ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ
# Киске Өфө
28 АВГУСТ - 3 СЕНТЯБРЬ (УРАҒАЙ - ҺАРЫСАЙ) 2010 ЙЫЛ
www.kiskeufa.ru
2002 йылдан башлап сыға
Һатыуҙа хаҡы ирекле
№35 (401)

✓*Коллоҡ кешене шул тиклем түбән төшөрә, ул хатта үҙенең бығауҙарын да ярата башлай.*

*(Люк де Вовенарг).*

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Беренселәр ауылдарҙа кәмей...**
ҡалаларҙа күбәйә бара

4

**Насар ғәҙәттәр ассимиляцияһы -**

8-9 ҡуҙғә күренмәгән төп дошманыбыҙ...

**Аралашыусан булыуым...**
әрмеләге "бабайлыҡ"ты ла еңеләйтте

12-13

**Суска ите ашамайым...**
тип тә ҡотолоп булмай, күрәһең

15

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## "Республика президенты" тигән һүҙ кемгә комачаулай, йәғни исемде үҙгәртеү менән есем үҙгәрәме?

***Фәнил ФӘЙЗУЛЛИН, философия фәндәре докторы, профессор, БР Фәндәр академияһы академигы:*** Рәсәй Федерацияһының, ундағы регионлар менән үҙәктең яңыса модулен ҡорорға теләүселәр һәр ваҡыт өлгө итеп Американы ала, уларҙың модулен механик рәүештә беҙгә күсерергә тырыша. Американан айырмалы рәүештә, Рәсәйҙә һәм уның республикаларында, өлкә, крайҙарында йөҙәрләгән милләт вәкилдәре үҙҙәренең тарихи тыған ерҙәрендә йәшәй. Шуға күрә беҙ үҙебеҙҙең дәүләт ҡоролошонда бер нисек тә Американы ҡабатлай алмайбыҙ. Чечняның территорияһы бөләкәй һәм унда асылда бер халыҡ йәшәй, шуға ла улар, бәлки, президентһыҙ ҙа йәшәй алалыр. Әммә йөҙәрләгән милләт вәкилдәре йәшәгән ҙур территориялы Башҡортостан, Татарстан, Саха-Якутия һымаҡ республикалар өсөн президент институты мотлаҡ кәрәк, тип иҫәпләйем. Был - беренсенән. Икенсенән, әле беҙҙә Рәсәй Федерацияһы һәм республикалар конституцияларының оптималь варианты табылмаған, вәкәләтлектәр тулыһынса бүлешелмәгән, етмәһә, бындай мөнәсәбәттәр ҙә көнөнә ҡырҡ үҙгәреш кисерә, етмәһә, иктисади кризис, тәбиғәт катаклизмдары булып тора. Ошондай шарттарҙа, республиканың закон сығарыу, башҡарыу һәм суд органдары эшмәкәрлеген контролдә тотоу өсөн дә, илебеҙ үҫешенең был этабында Башҡортостан һымаҡ республикаларға президент институты мотлаҡ кәрәк.

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы һәм ҡалаһының "Кәнгәк" гәзите баш мөхәррире:*** Минең уйымса, Рамзан Ҡадыровҡа һуңғы ваҡытта иғтибар кәмене. Ни әйтһән дә, Чечняла ниндәйҙер бер тотороҡлолоҡ барлыҡҡа килде һәм был уның үҙенә иғтибар иттереүгә йүнәлдерелгән "пиар-алым"ы булып торалыр.

Бынан 17 йыл элек бөтә халыҡ теләге менән беҙ Башҡортостанда президент һайлап ҡуйҙыҡ. Президенттың губернаторға ҡарағанда бурыстары, вазифаһы икенсерәк. Ә кемдер илдә бер генә президент булырға тейеш, ти икән, улай булһа, беҙ Фәндәр академияһы, төрлө компаниялар, холдингтар президенттарын да икенсе төрлә атарға тейеш булабыҙ. Ил етәкселәренең ҡайһы бер интервьюларынан ҡарағанда, был инициатива Мәскәүҙән сыҡмай, ә урындарҙан сыға, тиҙәр. Беҙҙең урындағы халыҡ, әгәр референдум үтһә, "президент" тигән вазифаны ҡалдырыр тип уйлайым.

Бер нисә республикала, әйтәйек, бына Карелияла президент тип түгел, республика башлығы, тип атала. Беҙҙә район, ҡала, ауыл хакимиәттәре башлыҡтары ла бар. Шул кимәлгә, уларҙың функциялар кимәленә төшөрөү, тип атайым мин быны. Беҙҙең республика ҙур, 4 миллиондан ашыу кешеһе бар. Үҙенең 100-гә яҡын сит ил менән эшлекле мөнәсәбәтен урынлаштырған, шул арҡала республика иктисадына миллиард һумлап инвестиция һалынған. Уларға сыҡҡанда беҙҙең етәксене "Башҡортостан башлығы", тип таныштырһалар, сит илдә беҙҙе аңламаҫтар ҙа, һәр хәлдә, тин күрмәҫтәр. Бөтә кешеләр өсөн ҡулайлы вариант ул "президент" һәм был шулай ҡалырға тейеш, тип уйлайым.

***Закирйән ӘМИНЕВ, юрист:*** Халыкта "Бер ҡаҙанға ике тәкә башы һыймай" тигән бик тәрән мәғәнәле мәҡәл-әйтем бар. Шуның кеүек, бер илдә ике хан, ике батша була алмаған һымаҡ, бер дәүләттә бер нисә президент була ла алмайҙыр. Беҙгә, эйфорияға бирелмәйенсә генә, киң автономия хоҡуҡтары өсөн көрәшергә кәрәк. Америка Ҡушма Штаттарында һәр штаттың үҙ закондары бар һәм улар бер-беренә тап килмәһә лә, АҠШ дәүләт былыуҙан туҡтамай. Федератив Германияның Ерҙәре лә, шулай уҡ, үҙаллы закондарға таянып йәшәй һәм уларҙың хоҡуғы беҙҙән хоҡуҡтарҙан да күберәк. Ваҡытында республикабыҙ етәксеһе Мортаза Рәхимов "Парламент республикаһы" идеяһы менән сығыш яһап ҡарағайны, Рамзан Ҡадыров яһаған тәҡдимдәрҙе ул да әйткәйне, инициативаһы хупланманы. Әгәр ҙә Башҡортостан Парламент республикаһы булһа, уның етәксеһе рәйес (председатель) тип атала ала ине. Әле килеп, беҙ тағы ла ошо уҡ мәсьәләгә әйләнеп ҡайттыҡ. Киләсәк өсөн беҙгә иң мөһиме "Башҡортостан Республикаһы"н һаҡлау фарыз.

**ЫСЫНЛАП ТА...**

**Бәлки Чечня һымаҡ бөләкәй территориялы регион өсөн президент институты кәрәкмәйҙер ҙә. Етмәһә, Ислам дине ҡанундары буйынса йәшәгән милләттең республикаһын нисек кенә атаһаң да (республикамы, өлкәме, крайымы, районмы), уның үҙ-үҙен һаҡлай алырлыҡ иммунитеты ҡуптән нығынған. Был йәһәттән Кавказ республикаларын Урал, Волга буйы, Себер, Алыҫ Көнсығыш республикалары менән сағыштырырлыҡ түгел. Ә беҙгә был институт үҙ республикаларыбыҙҙы, тимәк, милләттәребеҙҙе һаҡлап ҡалыу өсөн кәрәк. Шулай түгелме?**

**Әмир ҒҮМӘРОВ яҙып алды.**

## Белем көнө менән!



*Зең-зең, сең-сең...*
*Зеңгер йыры, сыңлап,*
*Күңелдәрҙән күсә күңелгә.*
*Ҡанатланып тағы килдек бөгөн -*
*Мәктәбебеҙ нурға күмелгән...*

ПАРАДОКС

# ЙӘШӘЙ-ЙӘШӘЙ АҠЫЛ КЕРӘМЕ...
## әллә сығып китеп, һайыға барамы

**Бер туҡтауһыҙ реформалар, үҙгәртеп ҡороуҙар ялыҡтырып китте. Хатта нимәһе һәйбәт, нимәһе хөрт икәнен дә аңламай башланы халыҡ. Халыҡтың был сифаты бер һаҡаллы күләмәстә иҫкә төшөрә. Тимер юлы вокзалындағы микрофондан анһыҡ ҡына мәғлүмәт ишетеүе ауыр бит, шуға был көләмәстә һүҙҙәрен боҙобораҡ һөйләргә кәрәк.**

Көтөү залында диктор: "Поезд на Воркуту уходит с первого пути", - тип иғлан итеүе була, пассажирҙар сумкаларын, төктарын күтәреп, ахылдап-ухылдап, 1-се юлға йүгереп барып етә. Көтәләр-көтәләр, поезд юҡ. Бер аҙҙан дикторҙың: "Поезд на Воркуту уходит с пятого пути!" - тигән тауышы ишетелә. Йөктәрен йөкмәп, халыҡ 5-се юлға йүгерә. Көтәләр-көтәләр, поезд юҡ. Тағы ла бер аҙҙан диктор: "Поезд на Воркуту уходит с третьего пути!" - ти. Халыҡ тағы тирләп-бешеп 3-сө юлға йүгерә. Поезд юҡ та юҡ. Шул саҡ кешеләрҙең һушын алып, диктор: "Поезд на Воркуту - тю-тю", - тип иғлан итә.

Ошо күңелһеҙ көләмәстәге халыҡҡа әүерелеп барабыҙҙыр бөгөн беҙ. Бер көн күршемдә поликлиникаға алып барғайным. Регистратура тәҙрәһенә сиратҡа баҫтыҡ. Беҙҙән алда баҫып торған оло йәштәрҙәге ир хирургҡа талон һораны. Ә йәш кенә медсестра: "Һеҙгә телефон аша яҙылырға кәрәк. Яңы закон", - тип өҫтәне. Был ағай: "Ярай инде, таяғыма таяның кесхәл менән килеп еттем. Бына паспортым, полисым, медстраховкам, талон бирсе", - тип инәлә. Ә ҡыҙыҡай: "Юҡ, телефон аша ғына яҙылырға мөмкин", - тип нығыша. Шул саҡ ағайҙың тауышы үҙгәрҙе: "Ну-ка, талон бирә һал!" - тип екергәйне, ҡыҙыҡай тиҙ генә ағайҙың паспортын алып, талон бирә һалмаһынмы! Ә икенсе кескәй тәҙрәлә бер әбекәй талон һорап ялбара. Ундағы ҡыҙ ҙа: "Телефон аша шылтыратып яҙылығыҙ", - тип нығыша. Әбекәй: "Номерығыҙҙы белмәйем шул", - тей. Халыҡты аптыратҡан һөйләшеү медсестраның ауырыуҙан паспортын, полисын һорау менән тамамланыр ине лә бит, был ауырыу әбекәй: "Ә телефон аша мин һеҙгә паспортымды, полисымды барыбер күрһәтә алмаҫ инем бит", - тип ысҡындырҙы. Сираттағыларҙың гөр килеп көлөүен ишетеп, ҡыҙыҡай компьютерының төймәләрен баҫҡыланы ла, әбейгә талон бирҙе.

Ошо күренештәргә шаһит булып, берәүҙең: "Йәшәгәндә кешегә аҡыл керәме икән, әллә сығамы икән?" - тигән һүҙҙәрен иҫкә төшөрмәй булмай.

**Айгөл АХУНОВА.**

БЕҘҘЕҢ ОСРАШЫУҘАР

# "КИСКЕ ӨФӨ" - БАЛТАСТА

**Ошо көндәрҙә "Киске Өфө" гәзите журналистары Балтас районының башҡорт теле уҡытыусылары менән осрашты. Осрашыу Иҫке Балтас ауылының өр-яңы 1-се мәктәп бинаһында, башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинетында үтте.**

Яңы уҡыу йылы башланыр алдынан уҡытыусыларҙың ошолай бергә йыйылып кәңәш ҡороуы, алдағы эштәрен планлаштырыуы матур йолаға әүерелгән. Шул йоланы уларҙың айырыуса бер йылылыҡ, энтузиазм менән атҡара икәненә әллә күпме тапҡырҙар шаһит булынғаны бар. Республика райондары буйлап командировкаларҙа йөрөгәндә беҙ мотлаҡ тоғро дуҫтарыбыҙ һәм уҡыусыларыбыҙ - башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыларының ошондай ҡорҙарында ҡатнашырға тырышабыҙ. Гәзитебеҙҙең ошо битендә сыға килгән фотоһүрәттәр шул осрашыуҙарҙа төшөрөп алына ла инде.

Был юлы ла Балтас районының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусылары менән күңел булғансы һөйләштек, донъя хәлдәре тураһында фекер алыштыҡ. "Башҡорт телен тыуған тел булараҡ та, дәүләт теле булараҡ та теләп өйрәнә балалар, - тип һөйләп торҙо беҙҙән сара үткән кабинет хужабикәһе, башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы Илүсә Нуриева. - Мәҫәлән, мари балалары хатта башҡорт балаларына ҡарағанда ла ҡыҙыҡһыбыраҡ өйрәнә башҡорт телен. Ҡыҙыҡһындырырлыҡ саралар ҙа булып тора бит. "Урал батыр" эпосы буйынса конкурстарҙа ла, "Башҡортостан ынйылары" конкурсында ла, олимпиадаларҙа ла ҡатнаша балаларыбыҙ. Дәреслектәр ҙә йөкмәткеле. Телде һәм әҙәбиәтте өйрәнеүгә ҡыҙыҡтырыу бына ошондай факторҙарҙан да тора инде ул... "

Һәм тағы бер фактор: балаларҙы теге йәки был предмет буйынса махсус йыһазландырылған кабинеттар ҙа үҙенә йәлеп итә. Бына Илүсә Нуриеваның башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты ла шундай ылыҡтырғыс нурға төрөлгән кеүек. Бәҡтиһәң, ул райондағы иң яҡшы башҡорт теле һәм әҙәбиәте кабинеты ла икән.

**Шулай итеп, яңы уҡыу йылы башланғанда гәзит-журналдарға яҙылыу кампанияһы ла старт ала. Шуға ла уҡытыусыларҙы эш мәшәҡәттәре араһында үҙҙәре яратҡан, үҙҙәренә кәрәкле ҡулланма булырҙай баҫмаларға яҙылып ҡалырға саҡырабыҙ. Ә "Киске Өфө" - тап уларға кәрәкле баҫма булараҡ танылыу алды.**

**Әле бына 2011 йылдың тәүге яртыһына гәзит-журналдарға яҙылыу башланып тора. Сентябргә тиклем хаҡтар элеккесә әле, шунан ул бер аҙ үҙгәрер. Шуға, сентябргә ҡалмай яҙылып ҡуйығыҙ. Яҙылыу тураһындағы квитанцияларығыҙҙы бүләктәр отошонда ҡатнашыу өсөн редакцияға ебәрегеҙ. Йылдағыса, матур бүләктәр һәм 2011 йылға "Дини календарь" оттораса҇ҡбыҙ. Гәзиткә үҙегеҙ генә яҙылып ҡалмай, дуҫтарығыҙ һәм туғандарығыҙҙы ла яҙҙырығыҙ. Бергә булайыҡ, бергә-бергә фекер ҡорайыҡ!**

### "Киске Өфө" - бүләгем" акцияһы дауам итә.

Әйҙәгеҙ, ауылдарҙа йәшәүсе ата-әсәйҙәребеҙгә, туғандарыбыҙға, яҡындарыбыҙға, дуҫтарыбыҙға, туған мәктәбебеҙгә, мәсеттәргә "Киске Өфө" гәзитен бүләк итәйек. Алты ай буйы гәзит уҡып кинәнер һәм баҫманың һәр һанын алған һайын һеҙҙе хәтеренә төшөрөр яҡындарығыҙ һәм рәхмәт уҡыр.

### Тағы бер тәҡдим бар...

Кем тыуған көнө уңайы менән "Киске Өфө" гәзите биттәрендә ҡотланырға теләй? Шулар гәзиткә яҙылып, квитанцияһын редакцияға ебәрә, тыуған көнө датаһын хәбәр итә һәм ваҡыты еткәс, гәзит биттәрендә беҙҙең ҡотлауҙы уҡып, бәләкәй генә бүлһә ла шатлыҡ кисерә.

### Өфөлә йәшәүселәр иһә "Киске Өфө"гә яҙылыуҙың бер нисә ысулын һайлай ала:

- Үҙегеҙ йәшәгән йорт эргәһендә "Өфө-матбуғат" киоскыһында яҙылыу һеҙгә бик арзанға төшәсәк.
- Аҙнаһына бер тапҡыр редакциянан килеп алып йөрөй алһағыҙ, гәзитебеҙгә редакцияның үҙендә яҙылыу ҙа уңайлы һәм арзаныраҡ.
- Редакцияла яҙылыуҙың тағы бер төрө - коллектив менән яҙылһағыҙ, редакция машинаһы уны һеҙҙең коллективҡа үҙе килтереп бирәсәк. Тик һәр коллектив кәмендә 15-20 дана гәзит алдырырға тейеш.



Балтас районының башҡорт теле уҡытыусылары.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов Бөтә Рәсәй сәйәси партияларының төбәк бүлексәләре етәкселәре менән осрашты. Осрашыуҙа "Берҙәм Рәсәй" партияһының төбәк сәйәси советы рәйесе Консантин Толкачев, РФ Коммунистар партияһы Башҡортостан республика комитетының беренсе секретары Рәфҡәт Гарданов, ЛДПР-ҙың төбәк бүлексәһе координаторы Евгений Былин, "Ғәҙел Рәсәй" партияһының төбәк бүлексәһе етәксеһе Константин Шаһиморатов ҡатнашты.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты Рөстәм Хәмитов "Рәсәй тимер юлдары" йәмғиәтенең Тимер юл вокзалдары дирекцияһы начальнигы Сергей Абрамов менән эшлекле осрашыу үткәрҙе. Осрашыу барышында "Өфө" станцияһында тимер юл вокзалын аҙағынаса төҙөп бөтөү, уның өсөн ике яҡтан да - Башҡортостан һәм "Рәсәй тимер юлдары" йәмғиәте яғынан да 190-шар млн һум аҡса бүлеү тураһында һөйләшеп килешелде.

✓Башҡортостан Республикаһы Президенты эш сәфәре менән Сибай ҡалаһында һәм Баймаҡ районында булды. Сибайҙа Президент аэропортты, БДУ-ның Сибай институтын, үҙәк ҡала дауаханаһын, Сибай ит комбинатын ҡараны, шунан йәмәғәтселекте ҡабул итеү бүлмәһендә граждандарҙы ҡабул итте. Республика Хөкүмәте ағзалары, Көньяҡ Урал райондарының хакимиәт башлыҡтары, бизнес даирәләре вәкилдәре менән кәңәшмә үткәрҙе. Унда был төбәк райондарҙың ауыл хужалығындағы һәм ағас эшкәртеү сәнәғәтендәге эштәрҙең торошо, уларҙы үҫтереү юлдары ҡаралды.

✓Баймаҡта булғанда Президент ҡаланың электр энергияһы, һыу, йылылыҡ һәм газ тәьминәте өлкәһендәге проблемалары менән ҡыҙыҡһынды, ошо хаҡта халыҡ менән фекер алышты, был мәсьәләне тормошҡа ашырыуҙа ярҙам итәсәген белдерҙе. Ҡуйнтау ауылында булғанда авария хәлендәге мәктәпте ҡараны һәм халыҡтың яңы мәктәп төҙөлөшө тураһындағы фекерен хупланы. Президент шулай уҡ Темәс ауылында шәхси эшҡыуар Айрат Байраҡаевтың һөт ҡабул итеү пунктында, Рөстәм Усмановтың патронат ғаиләһендә, тарих-тыуған яҡты өйрәнеү музейында булды, "Һаҡмар" леспромхозы яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтендәге хәл менән танышты.

✓ *Йәштәрҙән тормош-көнкүрешебеҙҙең тағы ла бер үҙенсәлекле яғына күҙебеҙҙе асты: барыбыҙҙа ла булмаһа ла, күбебеҙҙә тәбиғәткә ҡарата һаҡсыллыҡ тойғоһо бөтөнләй тәрбиәләнмәгән икән.*

ГӘЗИТТӘН КҮСЕРЕП...

# АҠЫЛЛЫ ҺӘМ ЗАМАНСА РӘСӘЙҘЕ...

## кем төҙөр?

**➔ Рәсәйҙәге оҙаҡҡа һуҙылған йәштәрҙән халыҡ араһында күптән ҡәнәғәтһеҙлек тойғолары уятҡайны инде. Халыҡ, әлбиттә, иң тәүҙә властарға һуҡранырға тотондо, уларҙы ваҡытында йәштәргә ҡаршы саралар күрмәүҙә ғәйепләне. Ысынлап та, урындарҙа ла, үҙәктә лә етәкселәр был тәбиғәт һәләкәтенең хәүефен тейешенсә баһалап еткермәне, буғай.**

Йәштәрҙе һүндереү башта бик һүлпән барҙы, әллә ямғырҙар яуыуына, әллә башҡа мөғжизәгә ышаныс ил башлыҡтарында башҡа тойғоларға ҡарағанда көслөрәк булып сыҡты. Өҫкә, гәзиттәгесә, "барыһы ла яҡшы, барыһы ла иҫәпкә алынған" тигәнерәк рапорттар осто. Ут илдең стратегик объекттарына яҡынайып, Кремль һәм Аҡ йорт кабинеттарында төтөн еҫе сыға башлағас ҡына барыһы ла хәүефкә төштө. Әлбиттә, ошонан һуң нисек етәкселәрҙе ғәйепләмәйһең инде?! Тик йәштәрҙән тормош-көнкүрешебеҙҙең тағы ла бер үҙен сәлекле яғына күҙебеҙҙе асты: барыбыҙҙа ла булмаһа ла, күбебеҙҙә тәбиғәткә ҡарата һаҡсыллыҡ тойғоһо бөтөнләй тәрбиәләнмәгән икән. Белгестәр фекеренсә, урмандарҙа һәм баҫыуҙарҙағы ауыһыҙ кояш аҫтында кипкән ҡоро үләнгә ут тоҡаныуында йышыраҡ кеше үҙе ғәйепле һәм бында етәкселәрҙең бер ҡыҫылышы ла юҡ.

Халыҡ бушҡа ғына "Инә һөтө менән инмәгән бейә һөтө менән инмәй" тип әйтмәгән. Ике-өс ай дауамында бер тамсы ла төшмәгән саҡта "урманда усаҡ тоҡандырмағыҙ", "тәмәке төпсөгөн һүндермәйенсә ташламағыҙ", тип тылҡып тороуҙың бер файҙаһыҙ икәнен яҡшы беләбеҙ. Йылға-күл буйҙарында ярайһы уҡ "төшөрөп" ҡыҙып алыусыларҙың усаҡта шешлек ҡыҙҙырыуын йәки машина тәҙрәләренән юлға осҡан утлы тәмәке төпсөктәрен күргәндән һуң иҫкәртеүҙең ҡоро һүҙ булып ҡалыуына төшөнәһең. Телевизорҙан меңәрләгән кешенең йәштән ҡорбанына әүерелеүен ишеткәндән, янғындан һуң ҡалған торомбаштарҙы күргәндән һуң да быҙдай кешеләр үҙенең һәм башҡаларҙың ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйыуын аңлап етмәйҙер әле. Янһа ни, минеке янмай ҙа инде, ә Рәсәй халҡы кеше бәләһенән, хатаһынан фәһем алырға, ҡыҙғаныусҡа ҡаршы, өйрәнмәгән. Үҙеңдең ҡапҡана килеп шаҡымаҫ борон бәләне бәлә тип танып, унан һаҡланыу саралары күреү күп хәүеф-хәтәрҙән һаҡлауы ике ятып бер төшкә лә инмәй.

**➔ Бына егерме йыл инде, Рәсәйҙә демократия етмәй, тип ҡыҫҡырабыҙ, Европаса тормош, яҡшы законлар, Конституцияға һаҡсыл ҡараш талап итәбеҙ. Һуңғы йылдарҙа бығаа модернизация, техника үҫеше, "аҡыллы йәмғиәт" төҙөү тураһындағы һөйләшеүҙәр өҫтәлде. Әммә үҙебеҙҙән һорарға онотабыҙ: аҡыллы һәм заманса Рәсәйҙе кем, ниндәй халыҡ төҙөйәсәк һуң? Көнбайыштан саҡырылған ғалимдармы? Форд үҙенең инженерҙары менән бүлешәсәкме? Әллә Оксфорд менән Стэнфорд әҙерләгән менеджерҙармы?**

"Яңы тормош" төҙөйәсәк кешеләрҙең татлы теләнә алданып, "Олби", "Властелин", "МММ" акцияларын һатып алғандан һуң мейес башында байығанын көтөп ултырыусылар дәүерен иҫләйһегеҙме? Сереп байыу өсөн эшләргә, уйлап табырға кәрәклеге тураһында әйтеүсе генә булманы уларға. Шуныһы ҡыҙыҡ: һуңғы ун йыл эсендә халыҡ күпме генә алданмаһын, ул һаман ниндәйҙер мөғжизәгә ышанып йәшәүен белә. Нефть һәм газға хаҡ төшмәһә, хәрби экспорт һаҡланһа, Америка менән дуҫтарса мөнәсәбәт дауам итһә, беҙ ҡиммәт булмаған хаҡҡа әҙерәк кенә демократия, әҙерәк кенә модернизация, әҙерәк ирек һатып аласаҡбыҙ, йәнәһе. Тик бер нәмәне танырға теләмәйбеҙ: халыҡтың бөгөнгө ҡарашы, хәле менән бындай мөғжизәләрҙең масштабы сикләнгән буласаҡ. Әлбиттә, беҙ Мәскәүҙе, Петербургты тағы матурыраҡ итеп биҙәйәсәкбеҙ, Сочиҙағы төҙәлөштәр, Русский утрауына күпер өсөн беҙгә оҙаҡ итеп ҡул сабасаҡтар... Европа ла беҙҙе күккә күтәреп маҡтаясаҡ, хатта шенген визаһы ла биреп ҡуйыр әле, бына күрерһегеҙ. Тик бынан Рәсәйҙә тормош үҙгәрәсәкме һуң?

**➔ Егерме йыл элек А. Солженицын үҙенең "Рәсәйҙе нисек үҙгәртеп ҡорорға" тигән билдәле мәҡәләһендә үҫеш һәм кешеләр араһындағы бәйләнешкә иғтибар итә. "Йәмғиәттең көсө йәки көсһеҙлегенән сығанағы булып тормоштоң рухи, ә һуңынан ғына сәнәғәт кимәле тора... Әгәр ҙә милләттең рухи көсө бөткән икән, иң яҡшы дәүләт ҡоролошо һәм бер ниндәй ҙә сәнәғәт үҫеше уны үлемдән ҡотҡара алмаясаҡ. Олоно ҡороған ағас йәшәй алмай. Мөмкин булған бөтә ирекләрҙең араһында иң беренсе урынға барыбер ҙә намыҫһыҙлыҡ ирекле сығасаҡ".**

Александр Исаевич "тормоштоң рухи кимәле" тигәндә нимәне күҙ уңында тотоуын аныҡлап китмәй. Бәлки, был ниндәйҙер юғары бер төшөнсәләр. Ғөмүмән, урыҫ кешеһендә хыялланыу, мифик ҡошҡа ултырып сәйәхәт итеү, Аллаға яҡынайыу теләге көслө. Хыял ул насар әйбер түгел, хатта хыялланырға кәрәк тә. Кешелектең бар мәҙәниәте, бөтә диндәр, күпселек философик тәғлимәттәр камиллыҡ һәм идеал эҙләүгә ҡоролған. Мәсетсиркәүҙәр, студент аудиториялары, ижади оҫтаханалар кимәлендә был турала, һис шикһеҙ, һөйләшергә, бәхәсләшергә кәрәк. Тик унан алда бер нәмәгә төшөнөргә кәрәк: юғары рухи маҡсаттарға өлгәшеүе еңелдән түгел. Хатта был бары изгеләрҙең көсөнән килә торған ғына эш.

Европала бына яҡшы аңлайҙар. Һәм унда власть халыҡҡа тик тормошҡа ашырҙай ғына ҡағиҙәләр тәҡдим итеп, уларҙың үтәлешен талап итә. Германияла, мәҫәлән, тәмәке тартыуға ҡаршы тоталь көрәш иғлан ителгән.

**➔ Рәсәй өсөн тәүге урындарҙа торған бәләләрҙең береһе булып эскелек тора. Илдә теркәлгән эскеселәр иҫәбе генә 2,3 миллиондан ашыу. Бөтөн донъя Һаулыҡ һаҡлау ойошмаһы белдереүенсә, Рәсәйҙә ҡулланылған алкоголь күләме милләт сәләмәтлеге өсөн зыянлы күләмдән ике тапҡырға күберәк. Йәмғиәт, ғаилә, демография, һаулыҡ, хеҙмәт етештереүсәнлеге һәм хәүефһеҙлеге, балаларҙың яҡты киләсәге эскелектән оло зыян күрә. Алкоголь һәм тәмәке тәьҫиренән, иң тәүҙә, урыҫ милләте боҙола. Быҙың шулай икәнлеген аңлау өсөн әрме сафына алыныусылар рәтенә бер һирпелеп ҡарау ҙа етә.**

Йәғни, әлеге ваҡытта Рәсәй халҡы шундай кимәлгә еткән, ул бәләне лә аңламай, уның менән көрәшә лә алмай. Аңлатыу эштәре алып барыу һуң, бөгөн урыҫ милләтенә ярҙам кәрәк. Араҡы һәм һыраға хаҡты күтәреп кенә был бәләнән ҡотолоп булмаясаҡ. Телевизор экрандарынан спиртлы эсемлек эсеү етеш тормош күрһәткесе булыуҙан туҡтаһа, араҡы һәм һыра лоббистарының сәйәсәткә ҡыҫылыуын булдырмағанда, милләт үҙен-үҙе һәләкәт юлынан ҡотҡара алмаҫ инеме икән?

**Мәскәү һәм бөтә Русь патриархы Кирилл йәштәрҙе гонаһтар өсөн яза, тип атай. Тик, әйҙәгеҙ, был бәләне властарға һәм халыҡҡа иҫкәртеү итеп тә ҡабул итәйек. Һәм был иҫкәртеүҙе ишетәйек.**

**Вячеслав КОСТИКОВ.**
**"Аргументы и факты" гәзитенән.**

---

ЙӨҘӨН КҮРЕП...

# ХАТАЛЫ ЯҘЫУҘАР...

## күҙгә төшкән сүп кеүек

**Ошо көндәрҙә баш ҡала округы хакимиәтендә "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыу буйынса комиссияның Терминологик төркөмө ултырышында предприятиелар етештергән продукцияларҙың ярлыҡтары биҙәлеше ҡаралды. "НУМИК" ит комбинаты продукцияһы ярлығындағы мәғәнәһеҙ хаталар айырым тикшерелде.**

Ҡала һәм район комиссиялары, Терминологик төркөм көндәлек эш алып барыуға ҡарамаҫтан, алтаҡталарҙа, реклама текстарында һәм башҡа визуаль мәғлүмәттә орфографик, грамматик һәм стилистик хаталар осрап тора. Тәржемә буйынса бигерәк тә "Башҡорт лингвистика үҙәге" йыш хаталар ебәрә. "НУМИК" ит комбинаты продукциялары ярлыҡтарындағы текстарҙы ошо хеҙмәт тәржемә иткән. Әлеге ваҡытта предприятие яңы ярлыҡтарға заказ бирҙе, ә ҡалған продукция ярлыҡтарына терминологик төркөм белгестәре экспертиза үткәрәсәк.

Баш ҡаланың Терминологик төркөмө предприятие, ойошма етәкселәренә тәржемәләр буйынса Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтына, "Оператив тәржемә"гә, "Башҡортостан" гәзитенең тәржемә үҙәктәре хеҙмәтенән файҙаланырға тәҡдим итә. Шулай уҡ бөтә тәржемәләр ҙә ҡала Терминологик төркөмөндә ҡаралырға тейеш. Төркөмдөң ҡабул итеү көндәре: аҙна һайын шишәмбе һәм йома көндәрендә сәғәт 11.30-ҙан 12.30-ға тиклем.

Ултырышта "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында"ғы Законды тормошҡа ашырыу буйынса район комиссияларына, район терминологик төркөмдәренә Өфөлә етештерелгән продукцияларҙың ярлыҡтарын тикшерергә, ойошмаларға методик ярҙам күрһәтергә ҡушылды. Терминологик төркөмдөң киләһе ултырышына продукциялар атамаһын дәүләт телдәренә тәржемә иткән бөтә предприятиелар саҡырыласаҡ.

**Ришат САБИТОВ,**
**Өфө ҡала округы хакимиәтенең гуманитар мәсьәләләр бүлеге начальнигы.**

---

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Татарстанда 2000 йылда тыуған уйынсылар командалары араһында үткән "Евразия кубогы" уйындарында "Салауат Юлаев" хоккей командаһы еңеүсе булды. Ул "Аҡ барыҫ"ты -2:1 иҫәбе менән еңде. Башҡортостан Президенты кубогына традицион турнир 2-4 сентябрҙә була. Беренсе уйында майҙан хужалары Силәбенең "Трактор" командаһы менән көс һынашасаҡ.

✓2010 йылда иген генә түгел, ә йәшелсә һәм картуф та уңманы. Шуға ла Хөкүмәт муниципаль властарға бюджет учреждениеларын һәм халыҡты картуф һәм йәшелсә менән тәьмин итеү мәсьәләһен хәл итергә ҡушты. Картуфты Алтайҙан, Астрахан өлкәһенән, Томск, Омск, Новосибирск, Красноярскиҙан, Белоруссиянан һатып алырға мөмкин буласаҡ. БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Шамил Вәхитов әйтеүенсә, Белоруссия картуфты 12 һум 5 тин менән тәҡдим итә, башҡа төбәктәр картуф хаҡын уныш йыя башлау менән әйтәсәк. Иҫәпләүҙәр буйынса, бер вагон картуфтың хаҡы 140 мең һумға төшәсәк.

✓"Китап" нәшриәтендә билдәле ғалим-археолог, тарихсы, БДПУ профессоры Владимир Ивановтың "Путь Ахмеда ибн-Фадлана" тигән китабы донъя күрҙе. Автор Ибн-Фаҙлан яҙмаларына, археология һәм башҡа урта быуат яҙма сығанаҡтарына таянып, IX-X быуаттарҙағы Көньяҡ Урал һәм Волга буйының этник һәм сәйәси картинаһын һүрәтләй.

✓4-5 сентябрҙә Орджоникидзе исемендәге мәҙәниәт йорто һәм Йәштәр һарайы (элекке "Юбилейный" мәҙәниәт йорто) алдындағы майҙандарҙа бал йәрминкәләре үтәсәк. Йәрминкәлә Умартасылыҡ һәм апитерапия буйынса ғилми-тикшеренеү үҙәге һәм республика умартасыларының продукцияһын һатып алырға мөмкин буласаҡ.

✓БР муниципаль берләшмәләренең III съезына әҙерлек сиктәрендә ойоштороу комитеты 27 августа ултырыш уҙғарҙы. Уны "БР муниципаль берләшмәләре советы" Ассоциацияһы Идараһы етәксеһе, Иглин районы башлыһы, ойоштороу комитеты етәксеһе урынбаҫары Ришат Исхаҡов алып барҙы.

✓Киҫкен эсәк инфекцияһы менән 14 кеше баш ҡала дауаханаларына мөрәжәғәт иткән. Асыҡланыуынса, уларҙың барыһы ла "Радуга" баҙарындағы кафела итле ҡоймаҡ ашаған. Тикшереү органдары кафены ваҡытлыса ябыуҙы һорап судҡа ғариза ебәргән.

✓ *Аҙ комплектлы мәктәптәрҙә былайҙа ла икешәр генә уҡытыусы эшләй. Бер уҡытыусы ике синыфты уҡыта икән, тимәк, бала тейешле белемде ала алмай, тигән һүҙ.*



*БЕЛЕМ УСАҒЫ*

**Роспотребнадзор мәғлүмәттәренә ярашлы, быйыл Рәсәйҙең 52 мең 962 мәктәбенә 13 миллион бала уҡырға барасаҡ. Мәктәптәр һаны былтырғы йыл менән сағыштырғанда 1140-ҡа ҡыҫҡарһа, уҡыусылар һаны 159 меңгә кәмегән. Был демографик процестар менән дә, төбәктәрҙә аҙ комплектлы мәктәптәр ябылыуы менән дә бәйле.**
**Республика мәктәптәре яңы уҡыу йылын нисек ҡаршылай? Өфөнөң башҡорт мәктәптәренә 1-се синыфҡа күпме бала уҡырға килә? Районларҙа оптималләштереү, ҡыҫҡартыуҙар һөҙөмтәһендә мәктәптәре ябылған ауылдар балаларын күрше ауыл мәктәптәренә нисек йөрөтә? Ошо һорауҙарға төрлө уҡыу йорттары директорҙары һәм директор урынбаҫарҙары яуап бирә.**

# БЕРЕНСЕЛӘР АУЫЛДАРҘА КӘМЕЙ...

## ҡалаларҙа күбәйә бара



**Рәғиҙә ЗАРИПОВА, 140-сы башҡорт гимназияһының башланғыс синыфтар уҡытыусыһы:** 57 уҡыусының ата-әсәһе ғариза биргән, уҡыу йылы башланғансы, бәлки, тағы ла уҡыусылар килер, тип көтәбеҙ. Инорс эшселәр районы, бында халыҡ та күберәк, мәктәп балаларға ҡытлыҡ кисермәһә лә, конкурентлыҡҡа һәләтле икәнлегебеҙҙе күрһәтеп торорға кәрәк. Нисек кенә булмаһын, торлаҡ йорттар менән бер рәттән, мәктәптәр ҙә төҙөлөп тора баш ҡалала. Гимназияның имиджын күтәреү өсөн төрлө саралар ойошторабыҙ, шуға ла балалар теләп уҡырға килә.

**Гөлназ ӘХМӘҘИЕВА, 158-се башҡорт гимназияһы директоры:** Әлегә һығымталар яһау иртәрәк, шулай ҙа быйыл беҙҙең гимназияла беренсе синыфтар һаны 5-әүгә етте, унда яҡынса 28-әр бала уҡыясаҡ. Гимназия яңы асылыу сәбәпле, ул әле тулы ҡеүәтендә эшләй ҙә башламаған. Башҡа уҡыу йорттарында хәлдәр нисектер, әммә әлегә беҙҙең гимназияла балалар һаны етмәй. Беренсе синыфҡа уҡыусылар йыя алһаҡ та, юғарыраҡ синыфтарҙа балалар аҙыраҡ, ә уҡыу йорто 900 балаға иҫәпләнгән.

**Шәмсулла ХӘБИБРАХМАНОВ, 136-сы башҡорт лицейы директоры:** Балалар һаны ҡыҫҡара, мәктәптәр ябыла, тигән фекер менән килешмәйем. Быға тиклем балалар һаны кәмене, әммә хәҙер, киреһенсә, арта бара. Быйыл 2003 йылда тыуған балаларҙы беренсе синыфҡа ҡабул итәбеҙ, былтыр 73 бала уҡырға килһә, быйыл тағы күберәк булыр, тип торабыҙ. Әлегә 3 синыфлыҡ уҡыусы йыйылды. Быны сәбәптәрен лицейҙың Сипайлово биҫтәһендә урынлашыуынан, йәштәрҙең был районда күберәк булыуынан күрергә ярамай, республикала демографик хәл, ысынлап та, насар түгел.

**Лилиә ДИСТАНОВА, Йылайыр районы Матрай мәктәбе директоры:** Быйылғы уҡыу йылында 13 кенә бала беренсе синыфҡа бара. Былтырғы уҡыу йылында мәктәпте тамамлаусылар 22 ине, тимәк, уҡыусылар һанында һиҙелерлек юғалтыу кисерҙек, тип әйтергә була. Базалы мәктәп булараҡ, 4 башланғыс - Балапан, Үрге Сәлим, Яҡуп, Солтанүҙәк мәктәптәре Матрай мәктәбенең филиалы иҫәпләнә, шуға балалар һанының дөйөм күләме кәмемәй, шул уҡ ҡала. Былтыр Яҡуп һәм Солтанүҙәк ауылдарында берәр генә бала булғас, унда мәктәптәрҙе ваҡытлыса ябып торғайныҡ, быйыл Яҡупта кире асырға ниәтләнеп торабыҙ. Ҡалған филиалдарҙа башланғыс мәктәп эшләп килә. Ауылдарҙың аралары йыраҡ ҡына, шуға уҡыусылар интернатта йәшәй, автобус уларҙы дүшәмбе барып ала һәм шәмбе кире алып барып ҡуя. Интернатта йәшәү өсөн шарттар нисек кенә яҡшы булмаһын, башланғыс синыф уҡыусыһы гел ата-әсәһе янында булырға тейеш инде ул.

Минең шәхсән фекеремсә, йән башына ҡарап финанслау ҙа ауыл ерлегендәге мәктәптәр өсөн артыҡ яҡшы булмаясаҡ, сөнки ауылда бер синыфҡа егерме биш бала йыйыу мөмкин түгел. Шуның һөҙөмтәһендә мәктәпте синыфтарҙы берләштерергә мәжбүрбеҙ. Йылдан-йыл балалар, тимәк, синыфтар һаны кәмей. Был ҙур сиратында уҡытыусыларҙың сәғәттәр һаны кәмеүгә килтерә. Нисә бала ултырыуға ҡарамаҫтан, барыбер тырышып уҡытаһың, юғары уҡыу йорттарына уҡырға инеүселәр проценты ла юғары, шуға бындай финанслау ысулы үҙен бер нисек тә аҡлай алмай.

**Азат МӘХИЙӘНОВ, Әбйәлил районы Ишҡол мәктәбе директоры:** Быйыл беренсе синыфҡа 14 бала киләсәк. Был һуңғы биш йыл менән сағыштырғанда - әҙерәк, былтырғы йыл менән сағыштырғанда артыҡ үҙгәрештәр юҡ. Балаларҙың аҙ булыуының төрлө сәбәптәре бар, шуларҙың береһе - йәштәрҙең Магнитогорск ҡалаһына күпләп эшкә китеүе. Ауылда эш булмағас, йәштәр юҡ, йәштәр булмағас - балалар ҙа юҡ.

Ишҡол мәктәбенә күрше өс ауыл балалары йөрөп уҡый. Исҡужа йырағыраҡ, ул ауылдың балалары интернатта йәшәй, ә Дәүләтша менән Тәпәндән көн һайын автобус барып ала. Дәүләтшала балалар һаны етмәү сәбәпле, былтыр башланғыс мәктәп ябылды, ул ауылдың бәләкәй синыф уҡыусылары ла ситтә уҡырға мәжбүр. Әлбиттә, алты йәшлек баланың ситкә йөрөп уҡыуы яҡшы күренеш түгел инде ул. Көн һайын уны мәктәпкә ата-әсә үҙе алып килә алмай, юлда ниндәй генә хәлдәр булмауы ихтимал? Һәр ауылда башланғыс мәктәп булырға тейеш, минеңсә. Ул ҙур ҙа булмаһын, тик ауылда булһын. Шул уҡ Дәүләтшала ваҡытында башланғыс мәктәпте ҙур итеп төҙөнөләр һәм бөгөнгө көндә электр энергияһы, башҡа хеҙмәттәр өсөн түләү ҡиммәткә төшә. Шунан 4 синыфты ла бер уҡытыусы уҡыта алмай. Аҙ комплектлы мәктәптәрҙә былайҙа ла икешәр генә уҡытыусы эшләй. Бер уҡытыусы ике синыфты уҡыта икән, тимәк, бала тейешле белемде ала алмай, тигән һүҙ. Бына ошо проблемаларҙы хәл итә итеүсен базалы мәктәптәр булдырыу, әммә автобус менән балаларҙы йөрөтөүе генә ауыр. Мәҫәлән, башланғыс синыфтарҙың дәрестәре беренсе яртыла, ә юғары синыфтарҙыҡы икелә бөтә. Ике тапҡыр автобус йөрөтөп булмай, тимәк, бала сәғәт ярым буйы мәктәптә көтөп йөрөргә тейеш була. Беҙ уны спорт залына индергән, ошонда уйнап тор, тип бүлмә биргән булабыҙ, барыбер бала арый бит ул.

**Вадим ШӘРИПОВ, Баймаҡ районы Иҫке Сибай мәктәбе директоры:** Быйыл беренсе синыфҡа килеүселәрҙән ике синыф йыйылды, унда яҡынса 30-ҙан ашыу бала уҡыясаҡ. Иҫке Сибай ауылы Сибай ҡалаһы янында урынлашҡан, шуға ла беренсе синыфҡа уҡыусылар йыйыуы еңелдән түгел. Ауыл йылдам үҫешә һәм яңы барлыҡҡа килгән урамдарҙа йәшәүселәр өсөн Иҫке Сибай мәктәбенә лә, Сибай ҡалаһы мәктәптәренә лә юл оҙонлоғо бер самараҡ. Ата-әсәләр Сибайға йөрөп эшләгәс, уларға балаларын үҙҙәре менән йөрөтөү ҡулайлыраҡ килеп сыға.

Мәғариф системаһында барған үҙгәрештәр һөҙөмтәһендә быйылғы уҡыу йылынан Иҫке Сибай мәктәбе базалы мәктәпкә әйләнәсәк, 3 ауыл мәктәбе - Казанка, Калинин һәм Йәнегет мәктәптәре филиал итеп ҡушылды. Беҙгә эш күбәйҙе, базалы мәктәп булараҡ, хәҙер филиалдарҙы ла ҡарарға тейешбеҙ. Урындарҙағы мәктәп мөдирҙәре шул уҡ эште башҡарырға тейеш булһа ла, ставкаһы бик бәләкәй булыуы мине борсоуға һала. Дөйөм алғанда, мәктәп алдынғылар рәтендә. Районда йыл һайын "Йыл мәктәбе" конкурсы уҙғарыла, быйыл унда Иҫке Сибай мәктәбе үҙ төркөмөндә беренсе урынға лайыҡ булды. Мәктәпте тамамлаусылар ҙа һынатмай, быйыл, мәҫәлән, 13 уҡыусының берәүһе - Мәскәүгә, ҡалғандары республика вуздарына һәм колледж-техникумдарына уҡырға инә алды.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**
**Республикала һуңғы ун йыл эсендә балалар һанының 200 меңгә кәмеүен иҫәпкә алып үткәрелгән реструктуризация ла, мәктәптәрҙең балалар һанына ҡарап финанслана башлауы ла, уҡытыусыларға эш хаҡы түләүҙең яңы системаһы индерелеүенә лә ҡараштар һаман төрлө. Әлбиттә, ауыл мәктәбе менән ҡала мәктәбе бер нисек тә бер төрлө сиктәргә һыймаған кеүек, мәғариф системаһындағы яңылыҡтар ҙа уларға төрлөсә тәьҫир итә. Әммә ҡалала ла, ауылда ла мәктәп ябылмаһын, уҡытыусы лайыҡлы эш хаҡы алһын өсөн балалар һанының күп булыуы шарт. Һуңғы өс йыл эсендә ҡалала беренсе синыфҡа барыусы балалар һанының артыуы күҙәтелһә, ауыл мәктәптәре был йәһәттән ҡытлыҡ кисерә. Уйлап ҡараһаң, сабый балалар баҡсаһында урын етмәүгә лә, мәғариф системаһындағы башҡа үҙгәртеп ҡороуҙарға ла ҡарамайынса тыуырға тейеш. Тимәк, эш системала түгел, үҙебеҙҙә түгелме һуң?**

**Ләйсән НАФИҠОВА яҙып алды.**

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Башҡортостандың рәсми делегацияһы Төркиәнең Анҡара ҡалаһында Кечиорен районында Әхмәтзәки Вәлиди исемендәге паркты асыу тантанаһында ҡатнашты. Делегация етәксеһе - БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Зөһрә Рәхмәтуллина йыйылыусыларҙы сәләмләне һәм Төркиәлә 2010 йылды Әхмәтзәки Вәлиди йылы тип иғлан иткән өсөн ил етәкселәренә рәхмәт белдерҙе. Ошо уҡ көндә Башҡортостандың сәнғәт оҫталары Халыҡ-ара Рамаҙан фольклор фестивалендә ҡатнашты.

✓Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы эргәһендәге оператив кәңәшмәлә Өфөнөң быйыл алты айҙағы тышҡы иҡтисади һәм төбәк-ара эшмәкәрлеге тураһында мәғлүмәт тыңланды. Билдәләнеүенсә, Өфөнөң ошо осорҙағы тышҡы сауҙа әйләнеше 745 млн АҠШ доллары тәшкил иткән. Экспорт 12 процентҡа артҡан һәм 649 млн доллар тәшкил иткән. Импорт 39 процентҡа кәмегән. Шулай итеп, ыңғай сауҙа балансы сальдоһы һаҡланған, йәғни экспорт импорттан 6 тапҡырға күберәк. Өфө предприятиеларының сауҙа партнерҙары булып 69 сит ил иҫәпләнә.

✓Федераль һалым хеҙмәтенең БР буйынса идаралығында "Коррупцияға ҡаршы ышаныс телефоны" эшләй башланы. Һалым инспекторы ришүәт талап иткән йәки һалым йыйыу даирәһендә хоҡуҡ боҙоу хаҡында башҡа мәғлүмәттәр булған осраҡта (347) 29-76-76 телефоны буйынса шылтыратырға була.

✓Мәғариф учреждениеларында автоматлаштырылған янғынға ҡаршы системалар ҡуйыуға 80 млн һум аҡса бүленәсәк. Был хаҡта республика Хөкүмәтендәге кәңәшмәлә БР Президенты хәбәр итте.

✓Ҡоролоҡ сәбәпле иғлан ителгән ғәҙәттән тыш хәлгә бәйле республика Үҙәктән 3 млрд 88 млн һум күләмендә өҫтәмә финанс ярҙамы алды. Бюджет займын тәү сиратта бойҙай фуражы, мал аҙығы, орлоҡ, икмәк бешереү предприятиелары өсөн он, лизинг шарттарында мал, малсылыҡ тармағы өсөн ҡоролмалар һәм ауыл хужалығы техникаһы һатып алыу өсөн ҡулланасаҡтар.

ИҪӘБЕ ТЕҮӘЛДЕҢ...

# РӘСӘЙ ӨСӨН...

## һәр кем мөһим




**Ошо девиз аҫтында үтәсәк Бөтә Рәсәй халыҡ иҫәбен алыу сараһын тормошҡа ашырыу өсөн республикаға 70 тонна документ, күргәҙмә әсбап килтерелгән.**

Башҡортостанстатта журналистар өсөн ойошторолған семинарҙы асып, департамент етәксеһе Әкрәм Ғәниев ҡәләм оҫталарын әҙерлек барышын һәм сараның әһәмиәтен ғәҙел, дөрөҫ яҡтыртырға саҡырҙы. Сөнки халыҡ араһында аңлатыу эштәре алып барыуҙың төп өлөшөн матбуғат саралары башҡара. Сираттағы халыҡ иҫәбен алыуҙың ҡурҡыныс, хәүефле булмауын, ә бары тик Рәсәй өсөн һәр кеше мөһим булыуын һәр кемгә аңлайышлы итеп еткерергә кәрәк. Иҫәп алыусыларға яһалма ҡаршылыҡтар тыуҙырылырға тейеш түгел. Юҡһа, илебеҙҙең ҡайһы бер төбәктәрендә иҫәп алыусылар ролендә фатирҙарға инергә тырышыусылар асыҡланған.

Быйыл иһә, 2002 йылғы халыҡ иҫәбен алыуҙан айырмалы, биналарҙы алдан йөрөп сығыу ҡаралмаған. Хәйер, иҫәп алыусыны таныуы ауыр түгел, уларҙың махсус танытмалары булырға тейеш, ә инде йорт хужаһы шәхесте раҫлаусы документ талап иткәндә, улар паспорттарын күрһәтергә бурыслы. Бынан тыш, тотош Рәсәй буйынса иҫәп алыусылар рус телендә "Дәүләт статистикаһының федераль хеҙмәте" тигән яҙыуы булған зәңгәр портфель тотоп һәм индәренә переписьтең эмблемаһы булған зәңгәр шарф һалып йөрөйәсәк. Шулай уҡ улар милиционерҙарҙыҡы кеүек һыбыҙғы һәм фонарь менән тәьмин ителгән.

Бөгөнгә республика буйынса 18 мендән ашыу иҫәп алыусы теркәлгән, шул иҫәптән 2400 кеше резервта тора. Иҫәп алыусыларҙың 13 проценты үҙенең теләге буйынса эшкә алынған. Дүрт мең самаһы иҫәпсе - юғары уҡыу йорттарынан, 1000 тирәһе ссуздарҙан йәлеп ителгән. Улар уҡыу курстары үткән, бындай уҡыуҙар 13 октябргә тиклем дауам итәсәк. Иҫәпселәр менән граждан-хоҡуҡи килешеүе төҙөлгән һәм ошо осорға уларға страховка ҡаралған. 12 көн эсендә бер кеше уртаса 400 гражданды иҫәпкә аласаҡ.

Иҫәпкә алыусылар барлыҡ торлаҡтарҙы ла йөрөп сығырға тейеш булғанлыҡтан, хәүефле фатирҙарға йәки өйҙәргә уларҙы участка милиционерҙары оҙатып йөрөйәсәк. Махсус бланкыларҙы тултырғанда шәхесте раҫлаусы документ талап ителмәй, яуап биреүсенең һүҙҙәре лә етә. Дүрт кешенән торған ғаиләлә документтар тултырыуға уртаса алғанда 18 минут китә.

Иҫәп алыусылар һәр йортҡа барып етәсәк, сөнки Рәсәй өсөн һәр кем мөһим. Ә инде улар һеҙҙе фатирығыҙҙа, өйөгөҙҙә тап итә алмай икән, үҙегеҙ стационар участкаларға барып, халыҡ иҫәбен алыуға үҙ өлөшөгөҙҙө индерә алаһығыҙ. Бындай участкаларҙың ҡайҙа урынлашыуы хаҡында мәғлүмәт буласаҡ.

14-25 октябрҙә төп иҫәп алыу саралары үтһә, 26-29 октябрҙә иҫәпселәр инструкторҙар менән бергә 10 процент өйҙә йәки фатирҙа контроль перепись үткәрәсәк. Йомғаҡтарҙың яҡынса мәғлүмәте 2011 йылда донъя күрһә, һуңғы мәғлүмәттәр иһә 2013 йылға тиклем тикшерелеп, эшкәртелеп, һуңынан халыҡҡа еткереләсәк.

Халыҡ иҫәбен алыуҙың нисек үтеүен үҙ иңегеҙҙә татып ҡарағығыҙ йәки ваҡытлыса иҫәпсе ролен атҡарып ҡарағығыҙ киләме? Интернеттағы "Иҫәпсегә ярҙам ит" тип аталған флеш-уйын аша был бурыстың ни тиклем ауыр ҙа, яуаплы ла икәнен үҙегеҙ аңларһығыҙ.

ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ТӨНДӘР ТЫНЫС ҺЫМАҠ...

**Баш ҡала хакимиәтендә аҙна һайын матбуғат конференциялары үткәреү матур йолаға әүерелде. Был юлы Өфө ҡала округы хакимиәтенең эске эштәр идаралығы хеҙмәткәрҙәре тарафынан экстремизм һәм терроризм сағылышын иҫкәртеү һәм туктатыу буйынса эшмәкәрлек тураһында һүҙ барҙы.**

Идаралыҡ штабы начальнигы Рифҡәт Сәйәхов белдереүенсә, дежур часть базаһында көстәр менән идара итеүҙең ярҙамсы пункты бар. Төрлө ҙур һәм мөһим саралар уҙғарылғанда унда дежур сменалар ойошторола һәм барлыҡ мәғлүмәт анализланып, хәл-торош буйынса ваҡытында сара күрелә. Был эш урындарҙа урынлаштырылған видеокамералар ярҙамында тормошҡа ашырыла. Бөгөн баш ҡалала 119 видеокамера һәм 19 "гражданин-милиция" терминалы эшләй. Күпселек ял, байрам иткәндә, теге йәки был ваҡиға айҡанлы уҙғарылған сараларҙа ҡатнашҡанда, беҙҙең именлекте һаҡлаусыларға эш, киреһенсә, күбәйә генә. Статистика күрһәтеүенсә, йылдың ете айында ғына күп халыҡты йәлеп иткән шундай 637 сара уҙғарылған.

Күп милләтле республикала барлыҡ халыҡтарҙың һәм милләттәрҙең дуҫ-татыу йәшәүендә лә был орган хеҙмәткәрҙәренең өлөшө юҡ түгел. Әле Башҡортостанда төрлө конфессияға ҡараған 71 дини берекмә һәм ете төп дини үҙәк бар икән, уларҙың һәр ҡайһыһы менән осрашыуҙар уҙғарыла, милли һәм дини экстремизмға юл ҡуймау маҡсатында һөйләшеүҙәр ойоштороla. Бындай эшмәкәрлек йәштәр араһында ла алып барыла. Сөнки көнө-төнө телевизорҙарҙан күрһәтелгән негатив тапшырыуҙар, ҡайһы берҙәрендә асыҡтан-асыҡ нимәне, нисек эшләргә кәрәклеген ентекләп һөйләгән, күрһәтеп биргән программаларҙы ҡараған йәштәр үҙҙәре лә аңламаҫтан шундағы күренештәрҙе ҡабатлап ҡарай. Тотош донъялағы ағымға әйәреп, бөгөн республикала ла "скинхед", "сатанист", "блэк-кер" һәм башҡа ҡолаҡҡа ятмаҫ һүҙҙәр менән аталған төркөмдәр күренә башланы, уларҙа 7-нән 240-ҡа тиклем йәш кеше иҫәпләнә. Быйыл балиғ булмағандар эштәре буйынса инспекторҙар һәм башҡа хеҙмәттәр менән берлектә уҙғарылған 76 рейд йәмғиәткә ҡаршы йүнәлештәге төркөмдәрҙең тупланған 35 урынын асыҡлаған.

Шулай уҡ төрлө тикшереүҙәр ваҡытында ҡорал да, шартлатҡыстар ҙа таба Өфө ҡалаһы эске эштәр идаралығы хеҙмәткәрҙәре. Йыл башынан алып миграция хеҙмәте менән берлектә 175 Ҡытай һәм Вьетнам гражданы республиканан ҡыуылған.

...Бөгөн дә, иртәгә лә таң беҙҙең өсөн ҡәҙимгесә атыр. Яңы көнгә ҡыуанып һәр кем эш урынына ашығыр. Баш ҡаланың эске эштәре идаралығы хеҙмәткәрҙәре, бәлки, был төндө керпек тә ҡаҡмай именлек һаҡлап, үҙ ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуйғандыр. Ә беҙгә төндәр шундай тыныс кеүек...

**Зәйтүнә САЛАУАТОВА.**

ЕТЕ РАЙОН

**Дим.** Йәйҙең тәүге көндәренән алып хакимиәттең мәҙәниәт һәм йәштәр эштәре буйынса бүлеге Мәҙәниәт һәм ял паркында аниматорҙар менән дискотека ойоштора. Дискотекала теләгән һәр кем бейеү коллективтарында шөғөлләнгән ҡыҙҙарҙың артынан хәрәкәттәрҙе ҡабатлай. Был сара балаларҙың күңеленә хуш килгән һәм улар йәй дауамында паркка теләп йөрөгән. Еңеүселәр иһә аттракциондарға билет менән бүләкләнгән. 28 августа бында быйылға һуңғы дискотека үтәсәк.

**Калинин.** "Лидер" балалар-үсмерҙәр клубтары берекмәһенең "Экологик десант" программаһы үсмерҙәрҙең йәйге мәшғүллеге буйынса проекттар ҡала конкурсында аҡсалата грант яулаған. Ошо программаға ярашлы, каникул ваҡытында 150 балиғ булмаған йәш кеше эш менән тәьмин ителгән. Беренсе Май паркы менән килешеү нигеҙендә улар территорияны, күл ярын сүп-сарҙан таҙартҡан, клумбаларҙы утаған, батуттарҙы йыуған һәм уның эргә-тирәһен һепергән.

**Октябрь.** Үҙәк ҡала китапханаһында "Курск" атом һыу аҫты кәмәһе һәләкәтенә 10 йыл тулыуға арналған күргәҙмә ойошторолған. 118 экипаж ағзаһы араһында Башҡортостандан да дүрт яҡташыбыҙ бар ине. Күргәҙмәлә төрлө баҫма матбуғаттан йыйылған материалдар, шулай уҡ беренсе атом һыу аҫты кәмәһен төҙөү, хәрби һыу аҫты флоты тарихында булған фажиғәләр тарихы менән дә танышырға мөмкин.

**Совет.** Рәсәй Һауа-десант ғәскәрҙәре ветерандары берләгенең, РФ Һауа-десант ғәскәрҙәре командующийының саҡырыуы буйынса районның "Голубые молнии" хәрби-патриотик клубында шөғөлләнеүселәр Мәскәүҙә, байрам сараларында ҡатнаша. Йәш десантсылар армия тормошо менән йәшәй: формала йөрөй, иртәнге алтыла зарядкаға тора, һалдат буткаһы ашай, хәрби хеҙмәт үтеүсе һалдаттар менән аралаша. Парадта бөтөн Рәсәй буйынса 137 клубтың 11-е, шул иҫәптән беҙҙең курсанттар ҙа ҡатнаша.

**Орджоникидзе.** 25 августан районда эшҡыуарҙар өсөн Хоҡуҡи именлек аҙнаһы ойоштороla. Сара барышында теләүселәр белгестәрҙән хоҡуҡи һәм хужалыҡ мәсьәләләре буйынса консультациялар аласаҡ, теләгәндәр семинар-консультацияларҙа ҡатнашасаҡ. Осрашыуҙарҙа һалым һәм пенсия ҡануниәтендәге үҙгәрештәр, хеҙмәт ҡануниәтен тотоу, баш ҡалала бәләкәй һәм урта эшҡыуарлыҡты яҡлау, эшһеҙ граждандарҙы бәләкәй эшҡыуарлыҡ предприятиеларына урынлаштырыу һ.б. мәсьәләләр ҡараласаҡ.

**Киров.** 1 сентябрҙә районның Мәҙәниәт һәм йәштәр эштәре буйынса комитеты "Башҡортостан" дәүләт телерадиокомпанияһының "Юлдаш" каналы менән берлектә Салауат Юлаев майҙанында киске сәғәт етелә яңы уҡыу йылы башланыуға арналған мәҙәни сара үткәрә. Унда республикаготаның эстрада йондоҙҙары сығыш яһаясаҡ.

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

## Организмды таҙартыу



1 ҡалаҡ ярым кейәү үләне (чабрец), 1 ҡалаҡ әрем, 2 ҡалаҡ һары мәтрүшкә, 2 ҡалаҡ ҡыҙыл көртмәле (брусника) япрағын 4 стакан ҡайнар хәлгә еткерелгән һыуға һалып төнәтергә. Термоста төнәтеү яҡшыраҡ. Һөҙөлгән төнәтмәне иртән 1 стакан, кисен ярты стакан эсергә. Дауа 10 көн дауам итә, ә шунан 20 көн ял итеп алырға һәм тағы 10 көн эсергә. Ул организмды таҙарта, спиртлы эсемлектәрҙе күп эсеү һөҙөмтәһендә ағыуланған кешеләр таҙарынып, эсеүен ташлай. Йылына ике тапҡыр - яҙын һәм көҙөн был төнәтмә менән дауаланып алырға тырышығыҙ. Ә кем эсеүҙән котолорға теләй, төнәтмәне был ғәҙәтен ташлағанға тиклем ҡулланыуҙы дауам итһен.

## Ашҡаҙанды йәйлау

Ашҡаҙан эшмәкәрлеген яҡшыртыу өсөн: 2 ҡалаҡ гөлйемеш, 2 ҡалаҡ меңъяпраҡ сәскәһе һәм үләнен ярты литр ҡайнар һыу менән бешекләп, ике сәғәт тотҡас, 1 ҡалаҡ бал, 1 ҡалаҡ алоэ һуты өҫтәп, көнөнә өс тапҡыр ике көндә эсеп бөтөргә кәрәк. Һигеҙ көндән һуң ашҡаҙаныгыҙ ғына түгел, ә бөтә организмығыҙ хәлләнгәнен тойорһоғоҙ. Башҡа төнәтмәләрҙә кеүек, был төнәтмә лә һыуыткыста һаҡлана. Тағы шуны ла онотмағыҙ: төнәтмәләрҙе ике тәүлектән артыҡ һаҡларға ярамай.

Эсәк, ашҡаҙаны борсоған кешегә ҡара көҙҙә (октябрь айында) ҡаҙып алынған дегәнәк тамырына юл үләне япрағын, меңъяпраҡты бер тигеҙ ҡушып, төнәтмәһен айҙар буйына эсергә. Мәҫәлән, 1 балғалаҡ меңъяпраҡ, 1 балғалаҡ юл япрағы үләне, 1 балғалаҡ ваҡланған дегәнәк тамырына 1 стакан ҡайнар һыу һалып, 15 минут буйына быуҙа тотаһың. Төнәтмәне 10 минут һыуытҡас, һөҙөп стакандың өстән бер өлөшөнә һалып, көнөнә 3 тапҡыр эсергә. Үлән төнәтмәһен ике-өс көн эсеүҙән файҙаһы булмай, яҡшы һөҙөмтәгә ирешәм, тиһәң, уны 2 ай эсергә кәрәк. Әгәр ҙә дегәнәк тамыры урынына, йәки ошо уҡ төнәтмәгә кесертkән япрағы ҡушып ебәрһәң, ҡан тамырҙары ныгына, ашҡаҙан аҫты биҙенең торошо яҡшыра.

## Һөйәк һынғанда

Аяҡ-ҡул йәки башҡа ағза һөйәге һынған осраҡта тәүге 8 көндә был урын һыҙлап йонсота. Шул саҡта сей картуфты ҡырғыстан үткәреп һалһаң, ярҙамы тейер. Һынған һөйәк тиҙерәк йүнәлһен өсөн көн дә башлы һуған бешереп ашап торорға һәм мумие ҡулланырға кәрәк.

**Флора БИКЕМБӘТОВА.**

*✓ Һәр идеаллаштырылған нәмә, хис, йән эйәһе, күренеш, мәл һ.б., ҡан тамырҙарына ултырған холестерин кеүек, йәшәү энергияһы ебәреп торған Юғары көс менән (Алла менән) һине ялғап торған каналдарға ултыра.*



КЛАСС СӘҒӘТЕ

**Танылған шағир Рәйес Түләк гәзитебеҙ сыға башлағандың тәүге йылдарында бер-ике ай ғына эшләп киткәйне редакцияла. "Класс сәғәте" рубрикаһын уҡыусыларыбыҙға ул тәҡдим иткәйне. Бик дәртләнеп тотонғайны ошо рубрикалағы яҙмаларына. Уның яҙмалары, йәғни тәрбиә мәсьәләләре тураһындағы фекерҙәре үҙенсәлекле булыуы менән иғтибарҙы йәлеп иткәйне. Тик ул эштән киткәс, был рубриканы уның стилендә дауам итеүсе булманы. Ә бит ата-әсәләр менән дә, балалар менән тәрбиә буйынса тап ошо юҫыҡта, Рәйес Түләк яҙған йүнәлештә һөйләшкәндә, фекер ҡорғанда, ҡалай отошло булыр ине. Бәлки уҡытыусылар араһында барҙыр был рубриканы Түләксә дауам итеүсе. Хәбәр көтәбеҙ. Ә өлгө өсөн Рәйес Түләктең гәзитебеҙҙең 2003 йылдағы һанында баҫылған сығышын тәҡдим итәбеҙ.**

# КҮҢЕЛЕБЕҘҘӘГЕ "СҮП-САРҘАР"

**Сәләмәтлеге хаҡында даими уйлаған кеше үҙенең һәр ваҡыттағы режимынан тыш та, яйы сыҡҡан һайын, йыуына, тәһәрәт ала. Йәғни, тәнен сафландыра. Өйөндәге сүп-сарҙы ла ваҡытында һеперп-түгеп, йыуып ҡуя.**

Кешенең организмы ла шулай, ашаған ризығын эшкәртә лә, ҡалдығын сығарып ташлай бара. Ә бына зиһендәге, күңелдәге бысраҡ, сүп-сар, ҡалдыҡтар тураһында артыҡ борсолоп бармай. Борсола башлаған ваҡытта, күпселек осраҡта, эш үткән була. Ул саҡта инде ауырыу кешенең борсолоуы ла, бер биҙрә ҡый булып, баяғы - күңелендәге, зиһенендәге сүп-сарға өҫтәлә генә. Организм ризыҡ ҡалдыҡтарын ваҡытында сығарып ташлай бармаһа, ошо ҡалдыҡтарҙан үҙе үк ағыулана. Тап шуның шикелле, күңелдә, зиһендә йыйылған сүп-сар ҙа кеше сәләмәтлегенә оло ҡурҡыныс булып янай. Кешенең зыйты, нервылары ҡаҡшай һәм ул берәй ағзала ауырыу, сир булып ҡалҡып сыға. Күңелде өйкәп торған ул сүп-сар тойғоларҙан ҡотолоуҙың байтаҡ ысулдары билдәле: медитация юлы менән үҙенде ҡотолдороу, аутоген күнекмәләр, спорттың ҡайһы бер төрҙәре, теүәл иғтибар талап итмәгән физик эштәр һәм, әлбиттә, намаҙ, Ҡөрьән, бетеү, тәсбих һ.б. төрлө дини саралар.

Һәр кемгә билдәле, өйҙө таҙа тотоу өсөн өҙләкһеҙ йыйыштырып тороуға ҡарағанда, уны ҡыйламау күпкә отошлораҡ. Кеше күңеле лә өй кеүек, һәм күңелдең дә ҡыйланыуына юл ҡуймаҫҡа кәрәк. Тик нисек?

Бала саҡтан уҡ бер төрлө лә стресс кисермәгән, ғаиләһендә дөрөҫ тәрбиә алған кешеләр өсөн әле әйтелгәндәр бигүк етди мәғлүмәт түгелдер ҙә. Тик сабый саҡта уҡ ауыртыу-һыҙлауҙары үҙәккә үтмәле сирҙәр кисереп үҫкәндәр ҙә күп бит. Бигерәк тә сабый саҡта уҡ ғаилә ағзалары тарафынан үтә ныҡ оялтып, үтә ныҡ ғәрләндереп, үтә ныҡ сәмләндереп, үтә ныҡ яраттырып һәм яратылып, ғөмүмән, "үтә ныҡ" тәрбиә кисереп үҫкән кешеләр. Әлбиттә, тәрбиә кәрәк, ләкин һәр шөғөлдәге шикелле алтын урталыҡты оноторға ярамай. Әйтәйек, ниндәйҙер эпидемия башланыр алдынан кешеләргә прививка яһайҙар, мәҫәлән, грипп эпидемиялары алдынан кешене аҙ ғына дәрәжәлә грипп менән ауыртала́р. Организм тиҙҙән килеп етәсәк грипп вирустарына ҡаршы торорлоҡ иммунитет булдырып, көслө ауырыу менән көрәшергә әҙерлек үтә. Ә инде был вакцинаны ике-өс доза бирһәләр, организм әҙерлек үтмәй, ә ысын мәғәнәһендә ошо ауырыу менән ауырый.

Баланы тәрбиәләү тигәндә, әле килтерелгән миҫалдағыса, беҙ унда тормош ауырлыҡтарына, тормош "эпидемияларына" ҡаршы торорлоҡ иммунитет тәрбиәләйбеҙ. Һәм, үрҙә әйтелгәнсә, "үтә ныҡ тәрбиә" биш доза вакцинаға бәрәбәр. Кеше былдай "тәрбиәнән" ныҡ ауырый һәм ғүмерлеккә комплекслана (комплекс неполноценности) - оялыу, ғәрләнеү, сәмләнеү, ҡурҡыу, кәмһенеү һәм башҡа хистәр ҡолона әйләнә. Хатта Чехов: "Мин тамсылап үҙемдән ҡолдо һығып сығарып бөттөм", - тип яҙып ҡалдырған. Ә бит күптәрҙең "ҡоло" уның үҙенән шәхеслек дәрәжәһен тамсылап һығып сығара. Ул йән эйәһе холоҡһоҙға, үҙәкһеҙгә әйләнә. Күптәре үҙенә йомола, һәм, уларҙың Алла биргән ғүмерҙе туғандары, яҡындары һәм йәмғиәт өсөн бик үкенесле шарттарҙа тамамлауы ихтимал. Шуның өсөн дә, бала тәрбиәләүгә "үтә ныҡ" иғтибар бүлергә, тормош эпидемияларына ҡаршы вакциналарҙы "үтә ныҡ" миҡдарҙа бирергә ярамай.

Былдай һығымтаға кемдәрҙер һиҫкәнеп тә киткәндер. Ләкин был бит бала тәрбиәләүгә бөтөнләй иғтибар бүлмәҫкә тигәнде аңлатмай. Тәрбиә туранан-тура түгел, фәҡәт Аллаһы Тәғәлә аша булырға тейеш. "Ярай, Хоҙай шулай ҡушҡандыр", "Алла бирһә, бөтәһе лә һәйбәт булыр" тибындағы инеш һөйләмдәр йышыраҡ ҡулланылырға һәм ошо һүҙҙәргә ышаныу, инаныу булырға тейеш. Ауырып киткән балағыҙҙы врачҡа күрһәтер алдынан үҙегеҙҙең һәм балағыҙҙың гонаһтары өсөн Алла алдында ярлыҡау һорап, балағыҙға һаулыҡ теләүегеҙ мөһим ҡағиҙә. Был хәл врач мөмкинселектәрен идеаллаштырмау, уны Алланан өҫтөн ҡуймау өсөн, икенсе төрлө әйткәндә, Аллаға тапшырыу, тип атала. Уға йәнегеҙ-тәнегеҙ менән ышанып, өтәләнмәй, йән тыныслығы һаҡлап, ошоларҙы эшләһәгеҙ, башығыҙға төшкән бәләнең аҙағы хәйерле булыр. Ибраһим бәйғәмбәрҙең үҙ балаһын, Алла хаҡына ҡорбан итергә тигән ҡарары, бала муйынына бысаҡ терәлгәс кенә Аллаһы Тәғәләнең уны туҡтатыуы - былар тап әле әйтелгән "Баланы Алланан да юғарыраҡ ҡуйып, "үтә ныҡ" яратырға ярамай" тигәндең символик һынланышы ул. Әгәр ҙә әйләнгән һайын үҙ фекерегеҙҙе тылҡып, образлы әйткәндә, "бер иҙәндән генә йөрөтөп" тәрбиәләһәгеҙ, балағыҙ баш-күллө комплексланасаҡ. Балағыҙҙың алдағы яҙмыш юлына ҡаршылыҡ артынан ҡаршылыҡ төҙөйәсәкһегеҙ. Һәр ҡаршылыҡ һайын ул хәлһеҙләнә, хәлһеҙләнгән һайын әле һаналып киткән тормош сүп-сарын күңеленә, йөрәгенә, зиһененә яҡыныраҡ ала бара. Кәйеф ҡырылыу менән генә үткәреп ебәрергә мөмкин булған хәлдәр ҙә уның өсөн оло ҡайғы һымаҡ күренә башлай. Күңеленә ныҡ яҡын алған, барлыҡ иғтибары менән ошо сүп-сарға йәбешкән был күренеште "идеаллаштырыу" тиҙәр. Шуны онотторға ярамай: һәр идеаллаштырылған нәмә, хис, йән эйәһе, күренеш, мәл һ.б., ҡан тамырҙарына ултырған холестерин кеүек, йәшәү энергияһы ебәреп торған Юғары көс менән (Алла менән) һине ялғап торған каналдарға ултыра. Йәнең арыясаҡ, тәнең ҡаҡшаясаҡ, ауырыуға һабышасаҡһың. Ғәҙәттә, ауырыу - Алла яҙаһы, тиҙәр. Яҙаның йәлләүесле ысулы, тип тә атайҙар. Шулайҙыр, Алла һине ауыртып, яңылыш йәшәүең тураһында иҫкәртә - был бер булһа, икенсенән, шул уҡ юл менән бәйләнеште тергеҙә, бәйләнеш каналындағы сүп-сарҙы таҙартырға тырыша.

Рәсүл Ғамзатовтың әйткәне бар: "Кеше йыш ҡына шундай хәлдәргә тарый - үҙе лә һиҙмәҫтән "Алла" тип ҡысҡырып ебәреп, ғүмерҙә ишетмәгән сүрәләрен уҡып ташларға мөмкин". Тап ошо һүҙҙәрҙәге кеүек, ауырыған ваҡытта кеше үҙенең күңеленә яҡын алған тормош сүп-сарҙары тураһында онота. Ирекһеҙҙән, ошо идеаллаштырылған сүп-сарҙы күңеленән дә, зиһененән дә сығарып ташларға мәжбүр була. Әйтәйек, ғүмер буйы карьераға ынтылған (карьераны идеаллаштырған) кеше өсөн, ауырып үлеп барғанда, карьера нимәгә кәрәкһен?! Онота. Шулай итеп, Хоҙай менән бәйләнеш һәйбәтләнә, кеше һауыға. Ә инде ауырыған саҡта ла үҙ хәленә, үҙеңде уратып алған донъя хәлдәренә риза булмаһаң, күңел тыныслығы һаҡламаһаң, борсолһаң - ошо ризаһыҙлығың, борсолоуың ҙур бер йомғаҡ булып, әле һөйләнгән бәйләнеш каналына тығыла. Канал көпләнергә, яҡты донъя менән мәңгегә хушлашырға мөмкинһең.




Һау һәм бер ниҙе лә идеаллаштырмаған кешенең Алла менән бәйләнеше.




Сирле, һәр нәмәне, йән эйәләрен, мәлде, тойғоларҙы күңеленә һәм зиһененә яҡын алған кешенең Алла менән бәйләнеше.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**- Бала саҡта уҡ уратып алған мөхит тарафынан күңелегеҙгә, түбәнге аңығыҙға һалынған холҡоғоҙға, тормошҡа мөнәсәбәтегеҙгә ҡарата әйтелгән баһаларҙың "насарҙары"нан ҡотолоу саралары күрегеҙ.**

**- Изге юлда саҡта, яңылыштан эшләгән хаталарығыҙ өсөн әйтелгән, ышанысығыҙҙы ҡаҡшатырҙай һүҙҙәрҙе бөтөнләй ҡабул итмәгеҙ. Ул һүҙҙәр төйөн булып күңелегеҙҙә ҡалһа, тиҙерәк ҡотолоу яйын хәстәрләгеҙ.**

**- Тән таҙалығы, организм таҙалығы хаҡында хәстәрләгән кеүек, кеше күңел таҙалығы тураһында ла даими хәстәрләргә бурыслы.**

**- Бер төрлө эште лә, мәлде лә, йән эйәһен дә Алла кимәленә күтәрмәгеҙ, Алланан юғары ҡуймағыҙ.**

✓ *Старшина тарафынан миңә ҡарата күрһәтелгән оло һәм иң ҙур хөрмәт уның үҙе менеп йөрөгән атын минең өсөн эйәрләргә бойороуы булды: бындай ололау уларҙа айырым кешеләргә генә күрһәтелә.*



ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ИВАН ЛЕПЕХИН СӘЙӘХӘТНАМӘҺЕ,

## йәки XVIII быуаттағы башҡорт донъяһына бер ҡараш




Өҫтәлдән тороусы ҡунаҡтар хужаға шул тиклем илтифатһыҙ булды, уға киске ашҡа ни ҙә булһа ҡалдырыу тураһында уйлап та бирмәне. Бында кем ни эләктерә ала, шуны өйөнә алып ҡайта, йәиһә алғанын шунда уҡ мәжлес тирәһендә туҫтаҡ тотоп сыуалып йөрөүсе бала-сағаға таратып бирә. Мәжлестәрҙең шәбе уларҙа ошо рәүешле атҡарыла, ҡунаҡтар саҡырыу буйынса түгел, ә олоҫтағы дөйөм белдереүгә ярашлы йыйыла. Уларҙың аштан туймаҫтай булыуы, бер-береһе алдынан итте бик йылдам эләктереп алыуы беҙгә бигерәк тә сәйер тойолдо. Беҙҙең ылаусыбыҙ, йәш кенә егет, үҙенең ашҡаҙанын шундай тынҡыслап тултырҙы ки, хатта атҡа ла көс-хәл менән менә алды; беҙ, көлә-көлә, ҡомһоҙлоҡ арҡаһында уның үҙ һаулығына зыян килтереүе хаҡында әйттек, ә ул былай тип яуап ҡайтарҙы: бындай байрамдар уларҙа һирәк була, һәм ҡорһағынды артығы менән тултырыу фарыз: кем мәжлестә аҙ ашай, шул кешене ҡунаҡ тип тә күрмәйҙәр.

Илеш старшина үҙенең барса ҡунаҡтары менән беҙгә ҡотлау һүҙҙәрен белдерҙе; быға тиклем уның һөйләшкеһе лә килмәй ине. Ул беҙгә үҙенең күптән түгел ҡырғыҙ-ҡайсаҡтарҙан ҡасып килгән йәш кейәүен күрһәтте, ул ысынлап та күҙ ҡарашы һәм үҙен тотоуы буйынса башҡорттарҙан күпкә айырылып тора ине; бик ситләшеүсән һәм ярамһыҡланыусан, тик беҙгә ысын башҡорт ихтирамлылығын күрһәтә алманы, беҙҙең менән бүрек кейгән килеш һөйләшергә мәжбүр булды: старшина алдында ул баш кейемен һалырға теләмәне, сөнки ҡатындың туғандары алдында башынды яланғас ҡалдырыу алама ғәмәл булып һанала.

Башҡорттар менән хушлашып, старшина туғандары оҙатыуында уның олоҫона юл тоттоҡ; уның йәйләүенә тиклем бик йыраҡ булмаһа ла, беҙгә шау-шыулы башҡорттар менән аралашыу оҙаҡ булып тойолдо. Уларҙың һәр ҡайһыһы беҙҙең янға ҡыйыу һәм, әйтергә кәрәк, рияһыҙ рәүештә яҡын килеп, беҙгә йөкмәтелгән эш буйынса төрлө һорауҙар бирҙе, Брагин эшмәкәрлеге ваҡытында һәм башҡа ошондай осраҡтарҙа ниндәй ауырлыҡтар кисерергә мәжбүр булыуҙары хаҡында ла ҡушып һөйләне. Илеш старшина беҙҙе мөмкин булғанса һыйларға һәм ихтирам күрһәтергә тырышһа ла, уның һыйы беҙҙең ҡорһаҡҡа тәғәйен түгел ине; беҙ унан тиҙерәк оҙатып йөрөүсе биреүен теләй инек. Тиҙҙән беҙгә уны күрһәттеләр, тик беҙ унан ҡәнәғәт була алманыҡ. Был башҡортто Сураш Мәргән тип атайҙар ине, ул Бөрйән бунтын ҡуптарыусыларҙың башында тороп, йыш иҫкә алынған таш эшкәртеүсе Брагинды үҙ ҡулдары менән үлтергән. Старшина тарафынан миңә ҡарата күрһәтелгән оло һәм иң ҙур хөрмәт уның үҙе менеп йөрөгән атын минең өсөн эйәрләргә бойороуы булды: бындай ололау уларҙа айырым кешеләргә генә күрһәтелә һәм мөһим тип һанала. Шуға өҫтәп, көслө ямғырға ҡарамаҫтан, ул беҙҙе Төркмән старшина йәйләүенә тиклем оҙата барырға риза булыуы хаҡында әйтте. Сураш Мәргән, һәр саҡта ла Брагин эргәһендә булғанлыҡтан, уның барлыҡ эш урындарын да белә ине, ә уларҙың Төркмән старшина йәйләүенән 30 саҡырымдарҙа, Һаҡмар түбәләренән 25 саҡырымда, Сураш Мәргән исеме менән аталып йөрөтөлгән үҙ ауылы эргәһендә булғанын иң мөһимдәренән һанай ине. Ҡыҙыҡһыныу, дөрөҫөрәге, бурысыбыҙ беҙгә ошо урында ла булып китергә мәжбүр итте.

Үҙебеҙҙең станға ҡайтҡас, бик күп эйәрләнгән аттар күрҙек, был беҙҙе Төркмән старшина йәйләүендә лә мәрхүмде иҫкә алыу мәжлесе атҡарыла икән, тип уйларға мәжбүр итте. Беҙҙе оҙата килеүсе башҡорттар, әлеге уйыбыҙҙы белгәндәй, ошонда йыйылған башҡорттарҙың Төркмән старшина йәйләүенән булып, беҙгә ихтирам йөҙөнән йыйылыуы хаҡында белдерҙе. Уларҙың әйткәне беҙҙең өсөн сәйерәк булып тойолдо, сөнки бөтә йәйләү урынлашҡан арауыҡ сирек саҡырымдан да артмай ине. Әммә башҡорт ғәҙәте һәм аттарҙың уғата күп булыуы уларҙы йәйәү йөрөүҙән биҙҙергән, шулай булғас, бер саҡырым тирәһе ерҙе йәйәүләп үтеү башҡорт өсөн оло походҡа тиң.

Олоҫҡа килеп етеүебеҙгә беҙҙе Төркмән старшина үҙ олоҫоноң иң күренекле башҡорттары менән ҡаршы алды; башҡорт ғәҙәтенсә, ихтирам белдереп, янымыҙға килде һәм беҙҙең өсөн башҡорт мәжлесен үткәрергә ризалашыуыбыҙҙы һораны. Беҙ уның үтенесен бик теләп ҡабул иттек, сөнки ошо осраҡтан файҙаланып, башҡорттарҙың нисек күңел асыуын күрергә өмөтләндек.

Беҙҙең поход палаткабыҙ уларға мәжлес өсөн иң шәп урын булып тойолдо. Старшина һәм уның энеһе ике яҡтан беренсе урындарҙы алды; ҡалған башҡорттар, биләгән вазифаларына ҡарамайынса, ике яҡҡа ултырышты. Башҡорттарҙың иң күркәмдәрен беҙ ябай сивуха (самогон. - **Ред. иҫк.**) менән һыйланыҡ, уны беҙ улар өсөн алған инек. Әммә улар сивуха эсергә бик теләп барманы. Уны татып ҡарарға ла теләмәүселәр булды, башҡорттар унан ниндәйҙер тәм табыуҙы бөтөнләйгә белмәй ине. Башҡорттарҙа бал беренсе эсемлек булып иҫәпләнә, уның әселегә эсеп өйрәнмәгән кешенең ауыҙын бөрөштөрә; ә ул башҡорттарға шәкәрҙән дә тәмлерәк тойола*. Сирек сәғәт тә үтмәне, улар мискәне бушатып та өлгөрҙө. Балдан һуң ҡымыҙға сират етте. Бында мәжлестә ҡатнашырға теләүсе һәр кем тирмәһенән бар булған ҡымыҙын алып килде; тиҙҙән беҙҙең палаткабыҙ башҡорт нектары тултырылған күн мискәләр һәм биҙрәләр менән тулды. Халыҡты һыйлау ике йәш башҡортҡа тапшырылды, уларҙың береһе ҡымыҙ ҡойһа, икенсеһе таратып биреп торҙо. Һыйлаған саҡта башҡорттар, бигерәк тә уларҙың күренеклеләре, инәлтеп ала, әммә кире ҡағыу оҙаҡҡа бармай, ә ҡымыҙ эсереүсегә нығыраҡ тырышырға тура килә: уға, аяҡ осонда торған көйө, бер ҡулы менән туҫтаҡты, икенсеһе менән эсеүсенең терһәген тотоп тороп, туҫтаҡты ҡулына алған башҡорттоң ауыҙына ҡымыҙҙы ҡойоп тигәндәй эсерергә тура килә.

Бал менән ҡушылған ҡымыҙ башҡорттарҙы шау-шыулыға әйләндерҙе. Улар үҙҙәрен иркенерәк һәм ҡыйыуыраҡ тота башланы, һәм ҡапыл һыбыҙғынан (ҡурай. - **Ред. иҫк.**) һәм варгандарҙан (ҡумыҙ. - **Ред. иҫк.**) торған башҡорт музыка хоры пәйҙә булды. Уларҙы йыйылыш уртаһына ултырттылар; бөтөн башҡорттар ҙа ошо төрлө тауышлы музыканы һоҡланып тыңланы; мәжлестәгеләрҙән икәү, танау аҫтынан мөәлдәп, уға ҡушылды (күрәһең, автор өҙләү хаҡында шулай яҙа. - **Ред. иҫк.**): бында кем бер тында оҙағыраҡ мөәлдәй ала, шуға өҫтөнлөк бирелә.

Башҡорттар, күренеүенсә, үҙҙәренең барса булған күңел асыу ысулдарын күрһәтергә теләп, вокаль музыканы ла тәҡдим итте. Бында 60 йәштәр тирәһендәге ҡарт уларҙың иң яҡшы йырсыларынан һанала ине, һәм, дөрөҫөн әйтергә кәрәк, беҙ ҙә уны тыңлауҙан ҡәнәғәтләнеү таптыҡ. Беҙгә уның имәндәй ҡаты тауышынан бигерәк, ым-хәрәкәттәре нығыраҡ оҡшаны. Ул үҙҙәре батыр тип атаған ата-бабаларының данлы эштәре хаҡында йырланы, улар араһында Алдар, Ҡара Һаҡал, Килмәт (дөрөҫө Килмәк. - **Ред. иҫк.**), Күсем һәм башҡалар беренсе булып иҫкә алынды (уҡый-яҙа белеүселәр аҙ булғанлыҡтан, башҡорттар ата-бабаларының тарихын йырҙарында һаҡлай). Беҙҙең йырсыбыҙ улар тормошоноң иң билдәле мәлдәре тураһында йырлау менән бергә, тауыш һәм ым-хәрәкәттәре аша уларҙың барса эштәрен сағылдырҙы: нисек итеп үҙҙәренең иптәштәрен өгөтләүҙәре, нисек яуға инеүҙәре, дошмандарын ҡырыуҙары, алған яраларынан көсһеҙләнеп, йән биреүҙәре хаҡында йырланы ул. Ҡарт быларҙың бөтөнөһөн дә шул тиклем йәнле итеп башҡарҙы, хатта мәжлестәгеләрҙең күбеһе илап ултырҙы. Әммә һағыш кинәт кенә ҡыуаныс менән алышынды, һәм шат йөҙлө булып киткән йырсы Ҡара юрға (автор "Карей иноходец" тип тәржемәләй. - **Ред. иҫк.**) тигән йырҙы башланы. Был йыр уларҙа иң күңеллеләрҙән һанала. Ҡарт, йырлай башлау менән үк, аяҡтарын тыпырҙата башланы: шуның менән Башҡорт балы асылды. Үҙҙәренең бейеүҙәрендә башҡорттар күпләп әйелә-бөгөлә, ым-хәрәкәттәре менән йыр һүҙҙәрен сағылдырырға тырыша. Бал тамамланыуға, улар нимәгәлер оҡшатып башҡарыу тип атап булған ғәмәлгә күсте. Улар үҙҙәренең тауыштары менән төрлө йәнлек һәм ҡош тауыштарын шул тиклем оҫта сығара, ысын ҡош тауышын башҡорт сығарғанынан айырыу ҡыйын ине.

**Бәҙри ӘХМӘТОВ тәржемәһе.**
**(Дауамы бар).**

* Башҡорттар балды ҡайнатмай, ҡоя; ғәҙәттә, ул бер көн эсендә лә етә. Улар татлы балды йылы һыу менән шыйыҡлап, бер аҙ миҡдарҙа арпа йәиһә тары ярмаһынан яһалған, ҡурйын тип аталған әсетке ҡуша. Әсетке ошо рәүешле эшләнә: бер ни тиклем ярма бешерелеп, шыйыҡ бутҡа рәүешенә килгәс, ике-өс ҡалаҡ һыра сүпрәһе һалына, һәм уны йылы урынға ҡуйып, әсей башлағансы тоталар, һуңынан уға баллы һыу ҡушалар.

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!



# "ПАРИЖДЫ ЛА КҮРҘЕК БЕҘ..."

Атлы полк 500 ябай һалдаттан, ә командирҙар составы 30 кешенән (2 полк командирының береһе - башҡорт, икенсеһе рус, 1 старшина, 5 йөҙ башы, 5 хорунжа, 1 мулла, писарь, 10 илле башынан) торған.

Французларға ҡаршы һуғышыусы полктарҙан тыш, 12 мең башҡорт Рәсәйҙең көнсығыш сигендә хеҙмәт итә - һыҙыҡ һағы хеҙмәтен үтәй. 1811-1813 йылдарҙа башҡорт кантондары Наполеон ғәскәренә ҡаршы һәм көньяҡ-көнсығыш сикте һаҡлауға 27 меңләп яугир ебәрә, мишәр кантондары 2 полк ойоштора. Шулай уҡ милли частарҙан 2 типтәр һәм 1 ставрополь ҡалмыҡтары полкы ҡатнаша.

1812 йылда Ырымбур казактары - 5, Урал казактары 5 полк ҡуя. Ырымбурҙан тағы 1 драгун полкы һәм Өфөнән пехота полкы һуғыша. Шулай итеп, Башҡортостан рус ғәскәренә ярҙамға 45 полк бирә. Быларҙан тыш, 1812-1813 йылдарҙа Ырымбур губернаһындағы 4 тапҡыр рекрут буйынса 10 мең крәҫтиән һәм эшсе-хеҙмәткәрҙәрҙе һалдатҡа алалар.

Башҡорт яугирҙарының төп ҡоралы - һөңгө, ҡылыс, уҡ-ян, ә мылтыҡ һәм пистолет бик һирәктәрендә генә була. Шулай уҡ ҡайһы берҙәренең тимер күлдәктәре лә булған. Тимер сымдарҙан үрелгән бындай ауыр күлдәктәрҙе һуғышҡа инер алдынан ғына кейгәндәр. Ул яугирҙарҙы һөңгөнән, ә алыҫ арала дошман пуляһынан һаҡлаған. Һуғыштан һуң күп йылдар үткәс, Өфө дини семинарияһы уҡытыусы Зефиров, француз яуында ҡатнашҡан Йәнтүрә батыр менән уның йәйләүендә осрашҡанда, уның һуғыш кейемен күрә һәм шул турала яҙып ҡалдыра: "...Ҡорос дүңгәләктәрҙән эшләнгән был күлдәк яугирҙы башынан алып биленә тиклем ябып тора. Мин дә уны кейергә теләгәйнем, ләкин ул ауыр булып сыҡты, ике бот тирәһе барҙыр, шуға кейә алманым. Минеңсә, мылтыҡ пуляһы ла уны тик яҡындан ғына тишә алалыр".

Ә парад кейеменә килгәндә, башҡорттарға үҙҙәре теләгәнсә кейенергә рөхсәт ителә. Ә шул осорҙа йәшәгән бер авторҙың яҙыуынса, башҡорт яугиры ошолай кейенгән: өҫтөндә - аҡ йәки күк төҫтәге буҫтау кафтан, киң ҡыҙыл һыҙатлы (лампаслы) шундай уҡ төҫтәге киң салбар, башында - осло түбәле аҡ кейеҙ ҡалпаҡ, аяғында - ат тиреһенән тегелгән итек, билендә - ҡайыш билдек, портупеяһы менән ҡылыс һәм патрондар һала торған сумка. Ә Йәнтүрә батыр Зефировҡа: "...Атҡа атланырға бойороҡ бирһәләр, тимер күлдәк өҫтөнән күк кафтанды, башҡа аҡ ҡалпаҡты кейеп, арҡаға уҡ-ян аҫып, билгә ҡылысты тағаһың да, һөңгөнө ҡулға эләктереп, командир күрһәткән яҡҡа атылаһың", - тип һөйләй.

Башҡорт яугирҙарына Рәсәй алып барған һуғыштарҙа йыш ҡатнашырға тура килгәнлектән, уларҙың үҙенсәлекле һуғышыу алымдары барлыҡҡа килә. Айырыуса дошмандың айырым отрядтарын ҡамап алып, юҡ итеүҙә ҙур оҫталыҡҡа ирешәләр. Йыш ҡына, ҡурҡып ҡасҡан булып, дошманды йәтеш урынға ылыҡтырып индерәләр ҙә, ҡапыл кире әйләнеп уратып алып, ҡыра торған булғандар. Ҡыҫымда ҡалған дошман, күп ҡорбандар юғалтып, бирелгән. Бер автор атлы яугирҙың һуғыштағы хәрәкәтен ошолай һүрәтләй: "...Дошманға етәрәк 40 аҙым уҡ атылыр ер ҡалғас, башҡорт арҡаһындағы ҡанъялын (уҡ һалғыс һауыт) күкрәгенә шыуҙыра ла, ике уҡ алып, береһен ауыҙына ҡаба, икенсеһен янына һала һәм шулай бер-бер артлы икәүһен дә атып ебәрә. Ә һөжүм иткәндә иҙеүҙәре асыҡ һәм еңдәре төрөлгән яугир, алға эйелеп, үҙәк өҙгөс тауыш менән дошманына ҡыйыу ташлана һәм уҡ атымы ер яҡынлашҡас, 4 уҡ атып ебәрә лә, ҡыуып етеп, һөңгө менән сәнсә". Ә икенсе бер автор: "Башҡорттар һөңгө менән бик оҫта һуғыша һәм мылтыҡ, һаҙаҡтан төҙ ата. Уның уғы бик алыҫ булмаған арала, мәҫәлән, 15 сажин (1 сажин - 2,18 метр. - **Авт.**), кешене генә түгел, ә атын да үтә тишеп сығып китә", - тип яҙа.

**Әнүәр ӘСФӘНДИЙӘРОВ.**
**(Дауамы бар).**

✓ *Бөгөнгө кешелекте иң беренсе нәүбәттә килем ҡыҙыҡһындыра, кешелек үҙе лә "ҡулланыусылар йәмғиәте"нә әүерелеп бара, тимәк, байлыҡ туплауҙы маҡсат итеп йәшәгән кешеләрҙең киләсәге юҡ.*



# НАСАР ҒӘҘӘТТӘР

## күҙгә күренмәгән

**Быйыл илебеҙҙә күҙәтелгән ҡоролоҡто ниндәй сәбәптәргә бәйләп аңлатып була? Артабан йәшәйешен һаҡлап ҡалыр өсөн кешелек, милләт донъяға ҡарашын үҙгәртергә тейешме? Сәләмәт тәндә сәләмәт рухмы, әллә сәләмәт рухлы сәләмәтме? Халыҡ медицинаһының традицион медицинанан өҫтөнлөгө нимәлә? Дәүләт милләттең ниндәй проблемаларын хәл итә ала? Ошо һәм башҡа мәсьәләләр буйынса Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған табибы, СССР-ҙың һаулыҡ һаҡлау отличнигы, хеҙмәт ветераны Фазылйән Сәғиҙулла улы ИШЕМОВ менән Аҡъяр үҙәк район дауаханаһы табиб-хирургы, ординаторы Артур Рәжәп улы БИКБИРҘИН фекер алыша.**

**▸ Рәсәйҙәге быйылғы ҡоролоҡто төрлө факторҙарға бәйләп аңлаталар. Уны тәбиғәт катаклизмы тип тә әйтәләр, Аллаһы Тәғәләнең кешелекте алда торған ҙур афәт хаҡында иҫкәртеүе тип тә белдерәләр. Быйыл йәй һеҙҙең районның Ғатаулла ишан тыуып үҫкән Вәлит ауылында үткән дини сарала ла ҡоролоҡҡа бәйле фекерҙәр яңғыраны. Унда йыйылған халыҡ күмәкләп ямғыр һорағайны, бер аҙ ваҡыт үтеүгә ямғыр яуып ебәрҙе. Нисек кенә булмаһын, ҡоролоҡ быйыл бар Рәсәй халҡын һиҫкәнергә мәжбүр итте. Бына һеҙ был күңелһеҙ хәлде нимәгә бәйләп аңлатыр инегеҙ?**

**Ф.ИШЕМОВ:** Ҡоролоҡ ҡабатланып тора. Мин, мәҫәлән, 1955 йылғы ҡоролоҡто яҡшы хәтерләйем. Комбайнда штурвалсы булып эшләп йөрөй инем. Ул йылды быйылғы һымаҡ яҙҙан ямғыр яуманы. Иген үҫмәне тиерлек, ни бары 15 сантиметр ғына ҡалҡты, үлән дә шул сама ғына күтәрелде. Йәй ауылда кеше бөтөнләй булманы тиерлек, барыһы ла ҡырҙа мал аҙығы әҙерләне. Беҙ, мәктәп балалары, тал ҡырҡып, силосҡа һалдыҡ. 1975 йылғы ҡоролоҡ та бик ауыр булды. Үлән, ҡаулан салғыға эләкмәгәс, кешеләр уны балта менән сабып йыйҙы. Хәҙер иһә, нишләптер, ауылдарҙа эшләмәй ятҡан кешеләр күбәйҙе. Уларҙы хатта ошондай ҡоролоҡ та урындарынан ҡыбырлата алманы. Киреһенсә булырға тейеш ине лә бит. Әлбиттә, малдарын аҫырап ҡыш сығарыу өсөн тырышып йөрөүселәр бар, әммә 1955, 1975 йылдарҙағы кеүек, дөйөм ҡуҙғалыу күҙәтелмәй. Кеше шул тиклем үк тормош көтөүгә, үҙ-үҙенә битарафҡа әйләндеме икән ни? Элек сенаж, бесән әҙерләү өсөн өмәләр ойошторола, уларҙа йәштәр күберәк ҡатнаша торғайны. Күп кенә кешеләр Ырымбур, Татарстан яғынан килеүселәргә осһоҙ ғына хаҡҡа малдарын һата башланы. Бөгөн эре малдың тере ауырлығы буйынса хаҡының килограмы 50-60 һум ғына. Беҙ ҡоролоҡҡа ҡаршы бөтөн халыҡты ойоштороп өлгөрмәнек. Бына минең күршем алтын ҡуллы, бик уңған кеше. Ул төрлө урындарҙа ялланып эшләй һәм үҙенә ярҙамсы таба алмай Аҡъяр буйлап йөрөй. Эш хаҡын көнөнә түләһә лә, көн һайын яңы кеше эҙләргә мәжбүр. Сөнки бер көн эшләп, күпмелер аҡсаны ҡулға алыусылар шундуҡ юҡҡа сыға. Уларҙың ҡайҙа һәм ни эшләп йөрөгәне билдәле инде. Бер ҡайҙа ла эшләмәүселәр күбәйҙе. Ғөмүмән, беҙ үҙгәртеп ҡороуҙар башланып, колхоз-совхоздар емерелгәс, эшләмәҫкә өйрәндек. Йәштәр хәҙер күмәкләшеп һыра эсеүҙе йолаға әйләндерҙе. Илленсе йылдарҙа беҙҙең Аҡъяр клубына 400-ләп кеше йыйылды. Унда райкомдың беренсе секретары, район советы рәйесе килгәйне. Йыйылыштың көн тәртибенә Аҡъяр урамында эсеп йөрөүсе дүрт кешенең тәртибен тикшереү ҡуйылды. Халыҡ алдына баҫыусылар баштарын түбән эйеп торҙолар, күтәрелеп ҡарарға ояldылар. Залдан бер-бер артлы: "Бөтә кеше эшләгәндә, оялмайса, ниңә эсеп йөрөйһөгөҙ?"- тип ҡысҡырҙылар. Ул саҡта кеше ояла белә ине. Бөгөн ололар менән йәштәр араһында аралашыу юҡ. Мин әле бына биш йыл пенсияламын, бер тапҡыр ҙа ветерандар йыйылманы. Тимәк, беҙҙә йәштәрҙе тәрбиәләү эшен ойоштороу ҙа шул кимәлдә. Йәш кеше ояла белһен өсөн уны оялта белеүсе өлкән кеше лә булырға тейеш бит. Юҡҡа ғына "Үлемдән оят көслө", тимәгәндәр. Әгәр ҙә етәкселек йәштәрҙе тәрбиәләү буйынса ниндәйҙер саралар күрмәй икән,



***Кешелек, милләт үҙ-үҙен һаҡлап ҡалыу өсөн прогрессив идея тирәһендә берләшергә, бер-береһенә ярҙам итергә бурыслы. Шул уҡ ваҡытта кешелектең айырым өлөшө булған милләттәрҙе һаҡлау ҙа һуңғы ситатта дөйөм кешелекте һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк. Беҙ элек эскелекте илебеҙҙең иң ҙур бәләһе, тип иҫәпләй инек, хәҙер тағы ла ҡурҡыныcыраҡ сир - наркоманлыҡ хатта ауылдарыбыҙға тарала башланы. Яңыраҡ "Комсомольская правда" гәзитендә әҙәм ышанмаҫлыҡ хәл тураһында уҡыным. 16 йәшлек ҡыҙ иптәштәрен саҡырып, уларҙың алдында 32 йәшлек һөйәрен үлтереп, башын өҙөп алып, фотоға төшә. Ҡайҙан барлыҡҡа килә һуң ошондай ҡырағайлыҡ? Үҙебеҙҙән килә.***

инициативаны йәмәғәтселек үҙ ҡулына алырға бурыслы. Халыҡ йыйындары ла юҡҡа ғына үткәрелмәгән бит элек. Беҙҙә хәҙер, ғөмүмән, халыҡ менән эшләү юҡ. Ниндәйҙер эштәр башҡарыла икән, улары ла түрәгә ярамһаҡланыу, эш күрһәтеү өсөн генә эшләнә.

Мин ҡоролоҡто дин, Аллаһы Тәғәлә менән бер нисек тә бәйләп аңлата алмайым. Ни өсөн тигәндә, мин динде әсәйем өйрәткән "Бисмилла", "Аллаһы әкбәр" кимәлендә генә беләм. Шуға күрә мин ҡоролоҡто кешенең үҙенән килеп сыҡҡан афәттер тип уйлайым. Беҙ шул тиклем тәбиғәтте боҙҙоҡ. Күпме заводтар ағыулы төтөндәрен күккә сығарып тора, тәбиғәтебеҙҙе үҙебеҙ ҙә бер туҡтауһыҙ бысратабыҙ. Шунан һуң ҡоролоҡ булмай, нимә булһын инде? Машиналарҙың самаһыҙ күп булыуы, бер туҡтауһыҙ янғындар сығып тороуы ла эҙһеҙ үтмәй.

**А.БИКБИРҘИН:** Синоптиктар әйтеүе буйынса, һуңғы 130, тарихсылар әйтеүе буйынса һуңғы мең йылда бындай ҡоролоҡ күҙәтелмәгән. Һәр хәлдә, бындай ҡоролоҡ тарихи документтарҙа теркәлмәгән. Бөгөн Рәсәй киңлектәрен ҡоролоҡ яндыра, Бразилияла ҡар яуа, Европаны һыу баҫа, төньяҡ полюстарҙа мең йыллап ятҡан боҙҙар ирей, ҡыҫҡаһы, Ер шарында глобаль үҙгәрештәр күҙәтелә. Был үҙгәрештәр бер беҙҙе генә түгел, бөтә кешелекте оло хәүефкә һала. Өҫтәүенә техноген һәләкәттәр ҙә йышайҙы. Атлантик океанда нефть үткәргес ҡоролма емерелеп, океан өҫтөнөң бысраныуы кеүек күренештәр тәбиғәттә булған үҙгәрештәрҙе тағы ла ҡатмарлаштыра һәм былар барыһы ла дөйөм кешелеккә һәм тереклеккә ҡурҡыныс менән янай. Дини кешеләр был күренештәрҙе кешелектең хаттин шашып китеп, гонаһтары күбәйеүҙән килә, тип билдәләй. Ысынлап та, төптән уйлап ҡараһаң, кешелектең дөрөҫ булмаған юлдан китеүенең сәбәптәре дини юлдан тайпылыуға ла бәйле бит. Хәҙер кешелектең хәҡиҡәткә, йәғни Аллаһы Тәғәләгә йөҙө менән боролоп баҫыр, тәүбәгә килер мөҙҙәте еткәндер, тип уйланыла.

Аллаһы Тәғәлә беҙҙе, бер яҡтан, һынай, икенсе яҡтан, ҡотолоу юлын да күрһәтә. Был йәһәттән һуңғы ваҡытта кешеләрҙең күпләп дингә ҡайтыуы ҡыуаныслы күренеш. Дини тәғлимәтте нисек кенә борғоларға тырышмаһындар, ул тәғлимәт кешене дөрөҫ юлға барыбер баҫтырыр ҡөҙрәткә эйә. Шул уҡ ваҡытта дин әһелдәренә бәйле ҡайһы бер күңелһеҙ күренеш-хәлдәр хаҡында ла әйтеп үтергә тура килә. Мәсеттәргә барып инһәң, йәш муллаларҙың хәйер һорап, артынан йүгереп йөрөүе күңелдә сәйер тойғолар уята. Шулай уҡ Ҡөрьән аяттарын үҙҙәренсә тәфсирләп, халыҡҡа аңлатыусыларҙың күбәйеүе төрлө ҡаршылыҡтар тыуҙыра башланы. Уйлап ҡараһаң, дин кешеләрҙе бер-береһенә ҡаршы ҡуйырға тейеш түгел бит. Дин кешеләрҙе ҡаршы ҡуймай, был күренеш кешеләрҙең аяттарҙы яңылыш аңлауы арҡаһында барлыҡҡа килә. Былар барыһы ла хәҙерге ваҡытта дини тәғлимәтте халыҡҡа дөрөҫ аңлатҡан Зәйнулла Рәсүлев, Ғатаулла Әбделмәликов, Ғабдулла Сәиди, Мөжәүир Сиражетдинов кеүек дин әһелдәребеҙҙең етмәүе менән аңлатыла. Фәҡәт уларҙың дини тәғлимәтте дөрөҫ аңлатыуы арҡаһында уларҙың мөриттәре юғары кимәлдәге шәхестәр булып үҫеп еткән. Кешелек ғилеме бөгөн әле сәңгелдәк кимәлендә генә, ә дини ғилем кешелекте һаҡлап килеүсе төп көс. Мәҫәлән, беҙҙең ғилем әле ямғыр һорап намаҙ уҡығандан һуң ни өсөн ямғыр яуыуын аңлата алмай. Мөжәүир хәҙрәткә Мәскәүҙән һуҡырайған ҡыҙын алып килеүсе фән докторы ни өсөн доға уҡығандан һуң ҡыҙының күҙе асылғанын да аңлата алмаған. Бөгөн ғилемдең әхлаҡ кимәле хаҡында ла һөйләр ваҡыт етте. Ни өсөн тигәндә, ғилми асыштар иң тәүҙә кешелекте юҡҡа сығарыусы һуғыш ҡоралы яһау маҡсатында яһала. Шуға күрә лә Аллаһы Тәғәлә кешелекте һаҡлап ҡалыу маҡсатында уның тормошон яҡшы яҡҡа үҙгәртә алырлыҡ ғилем серҙәрен йәшереп тоталыр ҙа. Бөгөнгө кешелекте иң беренсе нәүбәттә килем ҡыҙыҡһындыра, кешелек үҙе лә "ҡулланыусылар йәмғиәте"нә әүерелеп бара, тимәк, байлыҡ туплауҙы маҡсат итеп йәшәгән кешеләрҙең киләсәге юҡ. Әгәр ҙә кеше рухи үҫеште беренсе маҡсат итеп ҡуйһа, ғилми асыштар ҙа күп яһалыр ине.

**▸ Ер шарының тәбиғәт балансы үҙгәреүе арҡаһында тарихта булған халыҡтарҙың бөйөк күсенеүе процесы тағы ла ҡабатланыуы ихтимал. Бындай процестар беҙгә - башҡорт милләтенә һәм башҡа аҙ һанлы халыҡтарға ассимиляция менән янауы бар. Ошонан сығып, шундай һорау: артабан йәшәү өсөн кешелек, милләт үҙгәрергә тейешме икән?**

**Ф.ИШЕМОВ:** Кешелек, милләт үҙ-үҙен һаҡлап ҡалыу өсөн прогрессив идея тирәһендә берләшергә, бер-береһенә ярҙам итергә бурыслы. Шул уҡ ваҡытта кешелектең айырым өлөшө булған милләттәрҙе һаҡлау ҙа һуңғы ситатта дөйөм кешелекте һаҡлап ҡалыуға булышлыҡ итәсәк.

Беҙ элек эскелекте илебеҙҙең иң ҙур бәләһе, тип иҫәпләй инек, хәҙер тағы ла ҡурҡыныcыраҡ сир - наркоманлыҡ хатта ауылдарыбыҙға тарала башланы. Яңыраҡ "Комсомольская правда" гәзитендә әҙәм ышанмаҫлыҡ хәл тураһында уҡыным. 16 йәшлек ҡыҙ иптәштәрен саҡырып, уларҙың алдында 32 йәшлек һөйәрен үлтереп, башын өҙөп алып, фотоға төшә. Ҡайҙан барлыҡҡа килә һуң ошондай ҡырағайлыҡ? Үҙебеҙҙән килә. Ни өсөн тигәндә, барлыҡ телеканалдар тиерлек урлашыуҙы, кеше үлтереүҙе, фәхишәлекте асыҡтан-асыҡ пропагандалай һәм беҙ бер нәмә лә өндәшмәйбеҙ. Өндәшмәүебеҙ үҙе енәйәткә тиң.

Бигерәк тә ауылдарҙа спортҡа иғтибар бөтөнләй юҡ. Бына миңә 72 йәш һәм ҡыш саңғыла, йәй йәйәү йөрөгәс, спорттың беҙҙә ниндәй икәнлеген бик яҡшы беләм. Бынан ике йыл элек саңғы менән ҡырға сыҡтым. Мәктәп балалары ла физкультура дәресенә сыҡҡайны. Ярышырға булдыҡ. Шунда ун бишләгән егеттән өсәүһе генә минән алда килә алды. Уйлап ҡарағыҙ: миңә 70, уларға 15-17 йәш. Бынан 50 йыл элек быйма кейеп, саңғыла шыуалар, бөтә йәштәр спорт менән шөғөлләнә ине. Шуғалырмы, хәҙерге йәштәрҙең һаулығы ла юҡ. Мин табиб булараҡ, шуны әйтәм: хәҙерге йәш егеттәрҙең 30 проценты һаулығы буйынса армияла хеҙмәт итә алырлыҡ. Ә бына һуғыштан һуң 50-се йылдарҙа аслыҡта-яланғаслыҡта үҫкән үҫмерҙәрҙең 85-90 проценты армия хеҙмәтенә ярарлыҡ ине.

**А.БИКБИРҘИН:** Донъялағы аҙ һанлы халыҡтарға глобалләшеү заманы иң тәүҙә ассимиляция менән янай. Ер шарында күҙәтелгән тәбиғәт

**✓ Әгәр ҙә мейегә һыу етешмәй башлаһа, тәндең иң алыҫ нөктәләренән һыуҙы мейе тартып ала, сөнки мейеләге һыу 10 процентҡа кәмеһә, кеше үлә.**

# АССИМИЛЯЦИЯҺЫ – төп дошманыбыҙ…

катаклизмдары глобалләшеү процесын тағы ла әүҙемләштереүе бар. Элек беҙҙең ата-бабаларыбыҙ яу яланында үҙ дошманын аныҡ күреп, башҡаларҙан айырып, уға ҡаршы көрәшһә, физик яҡтан юҡҡа сығыуҙан халҡыбыҙҙы һаҡлап алып һалһа, әле беҙ күҙгә күренмәгән дошман менән көрәшергә мәжбүр ителгәнбеҙ. Ул дошман беҙҙең үҙебеҙҙә битарафлыҡ булып ултыра. Әгәр ҙә беҙҙәге күркәм сифаттар насар ғәҙәттәр ассимиляцияһы тарафынан йотолһа, кешелек тә, милләт тә үҙ-үҙен һаҡлап ҡала алмаясаҡ. Шулай уҡ телмәребеҙҙә төрлө телдәрҙән булған һүҙҙәрҙе бутап, бутҡа бешереү ҙә хәҙерге көндә тәбиғи булып бара. Был күренеш тә тәүгеһенең телдә дауам ителеше, йәғни үҙ туған теленә ҡарата булған мөнәсәбәт сағылышы. Һуң ҡоштарҙан ниңә үрнәк алмайбыҙ: һандуғастар ҡарҡылдамай, кәкүктәр һайрамай бит. Беҙ Рәсәй Федерацияһында рәсми документтарҙы урыҫ телендә тултырабыҙ, милләт-ара аралашабыҙ, инглиз телендә бар донъянан килгән мәғлүмәткә эйә булабыҙ, ә асылыбыҙ теле булған туған телебеҙ тик үҙебеҙҙең аралағы аралашыу теле генә булып ҡалды. Беҙгә туған телебеҙҙең әһәмиәтен күтәрергә кәрәк бөгөн, уның файҙалы һәм кәрәкле булыуын тәьмин итергә кәрәк. Башҡорт кешеһе үҙ телендә донъя кимәлендә һүҙ йөрөтә алһа, телебеҙ ғилем һәм иҡтисад теленә әүерелә алһа ғына, уның әһәмиәте лә күтәреләсәк, минеңсә. Бының өсөн иң тәүҙә, әлбиттә, башҡорт ғилеме Башҡортостан иҡтисадында сағылыш табыуы мотлаҡ. Икенсе аҙым - Башҡортостан иҡтисадының башҡорт телендә донъя кимәлендә һүҙ йөрөтә алыуы. Киләсәктә йәшәр башҡорт йәмғиәтенең яңы моделен мин шулай итеп күҙ алдына баҫтырам. Үҫеп килгән быуын үҙенең киләсәгенә юлды башҡорт теле, мәҙәниәте һәм иҡтисады аша тапмаһа, икенсе юлдан китәсәк.

**‣ Медицина күҙлегенән ҡарағанда, йәшәү рәүеше милли рухты билдәләй аламы? Медицина сирҙең үҙе менән көрәшә, халыҡ медицинаһы уның сәбәптәрен юҡҡа сығара. Шулай түгелме?**

**А. БИКБИРҘИН:** Туранан-тура билдәләй. Ни өсөн тигәндә, "Сәләмәт тәндә - сәләмәт рух", тиҙәр. Бер генә миҫал. Беҙҙең ир-егеттәрҙең сәләмәтлеге, тимәк, рухы туранан-тура атҡа бәйле булған. "Ир" һүҙенең "ат" менән йәнәш тороуы ла күпкә ишара. Беренсенән, атҡа атланып йөрөүсе һәр саҡ кәүҙәһен тура тотоп йөрөргә тейеш. Был умыртҡа һөйәгенең туралығын, тимәк, организмдың тулы ҡанлы эшмәкәрлеген тәьмин иткән. Кәүҙәһен тура тотҡан кешенең күкрәге киң, һулышы иркен, ҡан йөрөшө яҡшы була, йөрәге ҡыҫылмай. Икенсенән, атта йөрөү (бигерәк тә яйҙаҡ йөрөү) ир-егеттәрҙең простота биҙенә массаж да булып торған, кесе таз өлөшөндә ҡан йөрөшө яҡшырған һәм шуның арҡаһында ир-егеттәр түлле булған. Беҙҙең хәҙер туҡланыу рационы ныҡ үҙгәрҙе. Беҙ бит меңәр йылдар буйына ит ашағанбыҙ, ҡоротлап һурпа, ҡымыҙ эскәнбеҙ һәм был ризыҡ беҙҙең ҡанға һеңгән. Шулай булғас, милли ризыҡ ҡулланыу ҙа беҙҙең һаулыҡты бермә-бер нығытасаҡ. Кока-кола эсеп, чипсы ашаған егеттән ниндәй бала тыуырын күҙ алдына килтереп ҡарағыҙ шунан.

Беҙ, медиктар, хәҙерге ваҡытта ауырыуҙарҙың сәбәптәрен тулыһынса беләбеҙ, тип әйтә алмайбыҙ. Мәҫәлән, шундай сирҙәрҙең береһе - яман шеш ауырыуы. Берәүҙәр был сирҙе тәбиғәттә насар сирҙәр күбәйеүенә бәйләй, икенселәр уны йәшәү рәүешенә, өсөнсөләр туҡланыуға бәйләй. Кем белә, бәлки яман шеш рух кимәлендәге ауырыуҙыр ҙа, тән кимәлендә үҙенең сағылышын табалыр. Шуға күрә беҙ иң тәүҙә кешенең рухын, күңелен йүнәтеүҙе беренсе маҡсат итеп ҡуйырға бурыслыбыҙ. Күңеле һау булған кеше нурлы була, ул нурға яман шеш йоға алмай.

**Ф.ИШЕМОВ:** Мин Өфөлә медицина институтында хирургҡа уҡыным. Беҙ уҡыған саҡта халыҡ медицинаһына иғтибар булманы тиерлек, ул саҡта халыҡ медицинаһына архаик ҡараш йәшәне. Үҙемдең ҡан баҫымым бик юғары булды, эшләгән саҡта дарыуҙарҙы күп эстем, әммә ҡан баҫымым төшмәне. Пенсияға сыҡҡас, ҡулыма халыҡ медицинаһына нигеҙләнеп һыуҙың организмға файҙалы тәьҫире хаҡында яҙылған китап килеп эләкте. Медицина беҙгә һыуҙы, ашаған ризыҡты шыйыҡландырыусы матдә, тип кенә аңлатып килде. Китапта әйтелгәнсә һыу эсә башланым. Һөҙөмтә ике йыл эскәндән һуң беленде. Ҡан баҫымым төштө. Баҡтиһәң, һыу эсеп кенә йәмғеһе 61 төрлө сирҙән ҡотолоп була икән. Һыу бигерәк тә шәкәр ауырыуынан, аллергиянан арыныуға булышлыҡ итә. "Кешелек атом шартлауҙан, һыу баҫыуҙан түгел, аллергиянан юҡҡа сығасаҡ", тип белдерҙе донъяға киң билдәле булған бер ғалим. Һыуҙы көн һайын арттыра барып, иң күбе көнөнә 2 литр эсергә кәрәк. Июнь айында эсә башлағайным, сентябрь айында ҡан баҫымым 120-80 булды. Күп ҡатын-ҡыҙҙарҙың эсәге һыу етешмәгәнлектән насар эшләй. Эсәктә һыу етешмәгәс, ашаған ризыҡ яйлап ҡата башлай. Әле бик күптәргә төрлө ауырыуҙарҙан һыу эсергә тәҡдим итеп торам. Төрлө урындарҙан рәхмәт әйтеп шылтыраталар. Тик сәй эсеүҙе һыу эсеү менән бутарға ярамай. Сәй - ризыҡ, һыу - шыйыҡлыҡ. Етмәһә, сәй ҡан тамырын, киреһенсә, тарайта ғына. Бынан бер нисә йыл элек үпкәмдең яртыһы шешкәйне. Өфөгә саҡ-саҡ алып барып еткерҙеләр, ике аҙна реанимацияла яттым, әммә һауыға алманым. Тын алып булмай, саңғы кейеп тә йүгереп ҡарайым, тын ҡыҫыла. Тағы ла һыу эсә башланым һәм аяҡҡа баҫтым. Бөйөрҙәремдең икеһендә лә ҡом-таштар бар ине - һыу эсеп ҡотолдом, ҡатыулай инем - юҡ булды. Йоҡлай алмай инем, хәлем һәйбәтләнде. Бер ҡатын: "Фазылйән ағай, һеҙ әйткәнсе 8 стакан һыу эскәйнем, башым әйләнә",- ти. Мин уға көн һайын һыуҙы стаканлап арттыра барырға ҡуштым һәм ҡатын һауыҡты. Һыу эсеүҙең кеше организмына файҙаһы түбәндәгесә. Кешенең тәнендә һыу 70, ә мейеһендә 85 процент, ә бөтә ағзалар эшмәкәрлеген мейе ойоштора. Әгәр ҙә мейегә һыу етешмәй башлаһа, тәндең иң алыҫ нөктәләренән һыуҙы мейе тартып ала, сөнки мейеләге һыу 10 процентҡа кәмеһә, кеше үлә. Шулай итеп, әгәр ҙә мейе тәндән һурып алған һыу кире тулыландырылмаһа, кешенең иң ваҡ капилярҙары кибә һәм үлә башлай, дөрөҫөрәге, кеше яйлап үлеүгә дусар ителә. Баҡсағыҙҙағы түтәлгә бер көн генә һыу ҡоймаһағыҙ, сәскән әйберегеҙ шиңә-үлә башлай бит, бында ла шул уҡ хәл күҙәтелә. Ҡыҫҡаһы, халыҡ медицинаһы юҡтан ғына бар булмаған. Әле традицион медицина булмаған саҡта уҡ халыҡ йөҙәр-меңәр йылдар буйына төрлө сирҙәргә юлығып, төрлө үләндәрҙе эсеп ҡарап, иң кәрәклеһен билдәләгән. Хатта бесәйҙәр, эттәр ҙә үләндәрҙең араһынан үҙҙәренә кәрәклеһен һайлап ашай бит.

**‣ "Иң яҡшы табип - ул кешенең үҙе", тигән бер Корея табибы. Был фекергә ҡарашығыҙ нисек? Шул уҡ ваҡытта айырым кешенең генә түгел, кешелектең дә, милләттең дә киләсәге фәҡәт үҙенә генә бәйле. Шулай түгелме?**



**А. ИШЕМОВ:** Дөйөмләштереп алғанда, ысынлап та, күп нәмә кешенең үҙенән тора. Халыҡ медицинаһын да инҡар итмәйбеҙ. Әммә ҡайһы бер осраҡта традицион медицинаһыҙ бер нәмә лә эшләп булмай. Сибайҙа эшләгән саҡта бик күп тапҡыр янған кешеләргә операция эшләргә тура килде. Әйтәйек, янған урынды ҡырҡып алып ташларға һәм уның урынына тәненең һау урынынан тире ҡырҡып алып ялғарға кәрәк. Әйтәйек, аяғы йә ҡулы асыҡ рәүештә һынған кешегә халыҡ медицинаһы менән ярҙам итеп булмай. Минең табип ағайымдың практикаһында булған бер хәл: яңы тыуған баланың йөрәге түшенең тышында эшләп ятҡан. Оҙайлы операция ярҙамында ғына баланың түшен ярып, йөрәген үҙенең урынына ҡуйғандар. Шуға күрә традицион медицинаны инҡар итмәйенсә генә халыҡ медицинаһын да юғары уҡыу йорттары программаһына индерерҙәр, тип ышанам.

**А. БИКБИРҘИН:** "Иң яҡшы табип - ул кешенең үҙе" тигәндә мин күберәк кешенең үҙ-үҙенә, үҙенең киләсәгенә ышаныуына, килер көндәренә өмөт менән ҡарай белеүенә бәйләр инем. "Беҙ тырышһаҡ, килтереп сығара алабыҙ", тип йәшәй башларға кәрәк беҙгә.

**Ф.ИШЕМОВ:** Беҙ тырышыу менәнме ни ул, яҙмышыбыҙ Федераль үҙәктең ҡарарҙарына бәйле булғас, Артур ҡустым!

**А.БИКБИРҘИН:** Ҡул ҡаушырып ултырып булмай инде, Фазылйән ағай, хәрәкәт, минеңсә, ике яҡлы булыуы мотлаҡ: властан - халыҡҡа, халыҡтан власть яғына хәрәкәт. Бына беҙҙең ошо һөйләшеү ҙә донъяны үҙгәртеүҙә үҙ өлөшөн индерәсәк, кемдәрҙендер уййөрәген ҡуҙғатасаҡ. Был тәғлимәтте фәйләсүфтәр "күбәләк эффекты" тип атап йөрөтә.

**Ф.ИШЕМОВ:** Килешәм, күңелде төшөрөргә ярамай беҙгә. Таныш егеттәр һәм ҡыҙҙар Италияла, Испанияла, Францияла эшләп йөрөп ҡайтып, аптырап һөйләйҙәр: уларҙа бер етәксе ғәйепһеҙгә ҡул аҫтындағы хеҙмәткәрен рәнйетһә, тотош коллектив етәксегә ҡаршы сыға, ти. Беҙҙә иһә, киреһенсә. Хужаға оҡшамаһаң, яҡшы эшләүеңә ҡарамаҫтан эштән ҡыуа ла сығара.

**‣ Милләт алдында дәүләт кимәлендә хәл итерлек проблемаларҙан тыш, эске проблемалар ҙа етерлек…**

**А.БИКБИРҘИН:** Дәүләт, асылда, милләттең социаль проблемаларын хәл итеүгә көс түгә. Уларҙың иң мөһимдәре: эшһеҙлек, эскелек, торлаҡ шарттарын яҡшыртыу, һ.б. Бынан тыш, милләттең дәүләткә бәйләнмәгән үҙенең эске проблемалары ла етерлек, уларҙы хәл итеүгә милләт үҙе көс түгергә тейеш. Эске проблемаларҙың иң кәттәһе - ғаилә проблемалары.

**А.ИШЕМОВ:** Бының өсөн үткән быуаттың 90-сы йылдарында әүҙем эшләгән ижтимағи ойошмаларҙың эшен яңынан башлау фарыздыр. Ғаилә хәлдәренә килгәндә, ҡыҙғанысҡа ҡаршы, беҙҙә яңы ғаиләләрҙең 40 проценты тарҡала.

***Кешелек ғилеме бөгөн әле сәңгелдәк кимәлендә генә, ә дини ғилем кешелекте һаҡлап килеүсе төп көс. Мәҫәлән, беҙҙең ғилем әле ямғыр һорап намаҙ уҡығандан һуң ни өсөн ямғыр яуыуын аңлата алмай. Мөжәүир хәҙрәткә Мәскәүҙән һуҡырайған ҡыҙын алып килеүсе фән докторы ни өсөн доға уҡығандан һуң ҡыҙының күҙе асылғанын да аңлата алмаған. Бөгөн ғилемдең әхлаҡ кимәле хаҡында ла һөйләр ваҡыт етте. Ни өсөн тигәндә, ғилми асыштар иң тәүҙә кешелекте юҡҡа сығарыусы һуғыш ҡоралы яһау маҡсатында яһала. Шуға күрә лә Аллаһы Тәғәлә кешелекте һаҡлап ҡалыу маҡсатында уның тормошон яҡшы яҡҡа үҙгәртә алырлыҡ ғилем серҙәрен йәшереп торалыр ҙа.***

**ШУЛАЙ ИТЕП…**

**"Күбәләк эффекты"н миҫал итеп килтерҙе Артур Рәжәп улы. Ысынлап та, бер генә күбәләктең бер генә тапҡыр ҡанат елпеүе донъяны үҙгәртә алыр ҡөҙрәткә эйә булыуын ғалимдар иҫбат итте. Ә бит үҙ ваҡытында әйтелгән хәҡиҡәт тә шундай көс-ҡөҙрәткә эйә. Юғарыла әңгәмәләшкән ике ир-уҙамандың әйткән һүҙҙәрендә лә ярылып ята был хәҡиҡәт. Уларҙы аңлай һәм күңелебеҙгә һеңдерә генә белһәк…**

**Әхмәр ҮТӘБАЙ**
**әңгәмә ҡорҙо.**

✓ *Эшләй алырына, ғәмәлен атҡарып сығара алырына ышанмаған, хатта эшләп, тәүәккәлләп ҡарарға ла баҙнат итмәгән кеше үҙенең көсөн, мөмкинлеген, һәләтен ҡайҙан белһен?*



ҺАБАҠТАР

## Атым бар, йүгәнем юҡ...

Үҙенең тәүтамырҙарын, тәүсығышын әлегә теүәл, тоғро белмәгән әҙәм балаһы, ҡыҙыҡһыныусанлығынан төңөлмәһә, бер заман барыбер кем икәнен, ҡайҙан, ҡасан был яҡты донъяла хасил булып, бөгөнгө кеше кимәленә үҫешеүен аңлаясаҡ. Тәүтормош кешеһенең хәҙерге юғары аңлы кешегә әүерелеүе, әҙәмде әҙәм иткәне фәҡәт шул йәнендәге ҡыҙыҡһыныусанлыҡ ҡортоноң эшмәкәрлеге һөҙөмтәһелер. Тәүҙә һынған ағас ботағына яҙа таянғанда усы яраланғанды күреп аптырап торһа, һуңғараҡ, ауыртҡанын белһә лә осло ағас менән ҡулына төртөп, осло нәмә тишә икәнен аңлауы үҙенә иҫ киткес асыш булғандыр уның. Шулай осло ағастан тәүге ҡоралын - һөңгө яһап алғандыр. Шунан үткер таш табанын ярғанда, һыҙланһа ла, ҡыҙыҡһынып, тағы баҫып ҡарарға баҙнат итеүе һөҙөмтәһендә балта, бысаҡ әтмәләп алыуы донъяһын үҙгәрткәндер. Йәшен атҡан ағастағы "тере" ялҡынды үлтерәм тип осло һөңгөһө менән сәнскәндә таяғының осона эләккән утты һүндерергә лә, ҡуҙынан усаҡ яндырырға ла өйрәнгәндер. Ҡыҙыҡһыныуын тыя алмай, иҫәпһеҙ-хисапһыҙ хаталар, хатта үлемесле хаталар ҙа яһағандыр, ләкин йәнендә тотоп ҡарау, тәмләп ҡарау, эшләп ҡарау теләге тыуҙырған маҡсаты ҡурҡыу, һаҡланыу, шикләнеүҙәренән өҫтөн булып сыҡҡандыр.

Былар барыһы ла кешенең хәҙерге кимәленә етеп формалаша алыуының төп сәбәбе икәне бәхәсһеҙ. Даими үҙгәрештәрҙә, үҫештә генә кешелек үҙен һаҡлай ала. Донъяһы, булмышы, тормошо менән өҙлөкһөҙ ҡыҙыҡһыныусан кешенең йәшәү дәрте ғүмере буйы һүрелмәйҙер, ул белгәндән күберәк ғилем, күргәндән киңерәк донъя, татығандан татлыраҡ хистәр кисерергә ынтыла. Әҙәмде хыял-маҡсатлы иткәне, йән үҫешенең төп этәргес көсө тыумыштан аңына программа итеп һалынған ҡыҙыҡһыныусанлығы. Уның ғүмеренең аҙаҡҡы һулышына тиклем төп йәшәү сығанағы икәне һис шикһеҙ!

Тормошта маҡсаты булған әҙәм балаһы әллә ниндәй шарттарҙа ла юғалып ҡалмай, ауырлыҡтарҙан сығыу юлдарын, йәшәү сығанағын таба, яҡындарының ышанысын аҡлай, аҡларға тырыша һәр хәлдә. Уның өсөн физаҡәр батырлыҡ ҡылыу ҙа кәрәкмәй, йәне, тәне, аңының әүҙем хәрәкәттә булыуы ла етә. Донъялағы даими үҙгәрештәргә, бер туҡтауһыҙ булып торған тәбиғи хәлдәргә битараф булмаған кеше, тәү ҡарашҡа, ябай ғына күренештәрҙән дә үҙе өсөн ғәжәп асыштар, иҫ китмәле яңылыҡтар табып, ҡыҙыҡһыныусанлығын ҡәнәғәтләндерә ала. Самаһыҙ баҙнатһыҙлығы, ҡыйыуһыҙлығы арҡаһында кеше үҙен ҡыҙыҡһындырған күп нәмәләрҙән мәхрүм итә. Эшләй алырына, ғәмәлен атҡарып сығара алырына ышанмаған, хатта эшләп, тәүәккәлләп ҡарарға ла баҙнат итмәгән кеше үҙенең көсөн, мөмкинлеген, һәләтен ҡайҙан белһен? Үҙ мөмкинлектәреңде белеү өсөн дә ҡәҙимге ҡыйыулыҡ кәрәк! Шул уҡ мәлдә ҡыҙыҡһыныусанлыҡ һыҙаты һәр әҙәм балаһына тыумыштан хас булғас, ул йән ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү теләген ҡасан булһа ла ҡандырырға йөрьәт итә. Әлбиттә, бөтә кешеләлә тәүәккәллек бер кимәлдә түгел, әммә үҙен ҡыҙыҡһындырған ғәмәлде атҡарып ҡарарлыҡ ҡына кимәлдә була. Күп ваҡыт йәнендә тыуған ҡыҙыҡһыныуын яһалма рәүештә баҫыуы, тыйыуы арҡаһында ҡайһы берәүҙәр хәленән килгәнде лә тормошҡа ашыра алмай. Әллә саманан артыҡ баҙнатһыҙлыҡ, оялсан баҫалҡылыҡ артында ихтилалдар дәүерендә хоҡуҡтарынан биҙҙерелеп, язаланған, яфаланған халыҡтың нәҫел тамырҙарына һеңеп өлгөргән ҡыйыуһыҙлыҡ һыҙаттары йәшенеп ятамы?

Әҙәм сүрәтле булып тыуыу ғына кешене кеше итмәй. Кеше көн дә туҡтауһыҙ үҫештә булһа ғына үҙ асылында ҡала ала. Ҡаҙандың эргәһендә тороп ҡына уның кеүек ҡайнап булмаған шикелле, тормошта ла шулай: эсеңдә ҡайнарға кәрәк! Үҙ хәле, донъя хәле менән ҡыҙыҡһынмаған кеше тормош менән тигеҙ атлай алмай.

Эй, Хоҙайым, бәндәләрең
Бер бәрәс, бер бүреләй.
Шул фиғелдә һәр береһе
Йәннәт түренә үрләй... - тип яҙғайным ҡасандыр, аптырағас.

Бәлки, ҡайһы бер кешенең ҡыҙыҡһыныусанлығы ғүмере буйына уянмайҙыр, тип әйтер инең, имсәк имеп ятҡанда уҡ һәр бала күҙҙәрен әзерәйтеп, тирәяғын байҡай. Биләүҙән ысҡынғас, түшкә алһалар, яурын аша ынтылып, алан-йолан ҡарана. Имгәкләй башлаһа, бер урында ултырып сыҙамай, өҫтәл, карауат, урындыҡ аҫтарын ҡыҙырып сыға. Тәпәй баҫһа, тотоп алырмын тимә! Ҡамауҙарға ҡарамай, мүкәйләп, бөтә мөйөш-һәйештәрҙе тикшереп бөтә. Урамға үҙаллы сыға башлаһа, әллә ҡайһы тишектән йә ҡапҡа аҫтынан йыбырлап сығып ҡаса, ҡойма, һарай, мунса баштарына менеп, һаман да алыҫыраҡ ерҙәрҙе, киңерәк донъяны күрергә теләй. Көндән-көн ҡыҙыҡһыныуы арта, көндән-көн күберәк күргеһе, күберәк белгеһе килә. Мәктәпкә барғансы шулай үҙаллы күҙәтеүҙәре менән тирә-яҡ донъяһын өйрәнә, ҡулайлаша, яраҡлаша. Мәктәпкә барғас ҡына уның шул тыумыштан бирелгән тәбиғи ҡыҙыҡһыныу һәләтенә тәғәйен йүнәлеш бирелә, бала иғтибары белем туплауға, тәрбиә һабаҡтары үҙләштереүгә, йәмғиәт ҡағиҙәләрен өйрәнеүгә йүнәлтелә. Шул осорҙан алып ул йәмғиәттең дөйөм ҡағиҙәләренә аңлы рәүештә буйһоноп йәшәргә өйрәнә, хатта мәжбүр була. Хәҙер уның ябай ғына тәбиғи ҡыҙыҡһыныусанлығы ла маҡсат тыуҙыра. Артабан кемдер донъя менән ҡыҙыҡһыныуын үҙаллы әүҙем дауам итә, кемдәрҙер мәктәптәге етәккә өйрәтеүҙәренә күнегеп бөтә. Үндайҙар "Минең өсөн уйлайҙар, ҡарар ҡабул итәләр, нимәгә көсәнергә? Нимә ҡушалар, шуны урынына еткереп үтәһәм дә етә",- тип йәшәүгә күсә. Ләкин күптәр мәктәп белеме менән генә сикләнеп ҡалмай, юғарыраҡ маҡсатҡа, белемгә ынтыла, фәнгә ылығып, ниндәйҙер өлкәлә үҙенең ҡыҙыҡһыныу ихтыяждарын ҡәнәғәтләндерә. Күптәр үҙҙәрен ҡыҙыҡһындырған һөнәрҙе камил үҙләштереп, данлы еңеүҙәргә өлгәшә. Шулайтып, берәүҙәр йән, аң ҡыҙыҡһыныуын ғилем донъяһында ҡәнәғәтләндерһә, икенселәре башҡа өлкәлә үҙе ҡыҙыҡһынып һайлаған һөнәренең серен асып, маҡсатын тормошҡа ашырып, уңыштарынан ҡәнәғәтләнеү таба.

Ғөмүмән, әҙәм балаһына ҡыҙыҡһыныусанлығы ғүмере буйына сикләнмәҫ, шиңмәҫ һәләт итеп бирелгәндер. Сөнки ул ғүмере буйы нимә менәндер ҡыҙыҡһына, нимәгәлер өйрәнә. Хаҡлы ялдағылар ҙа тормош, донъя менән ҡыҙыҡһыныуынан бер ваҡытта ла ваз кисмәй: белгәненән күберәк, күргәненән арыраҡ, татығанынан татлыраҡ, тойғанынан сағыуыраҡты тойғоһо килә. Ҡыҙыҡһыныусанлығы әҙәм аңын әүҙем эшләргә мәжбүр итә! Аңы әүҙем эшләгән йәндәр һәр ваҡыт хәрәкәттә, һәр ваҡыт ниндәйҙер шөғөл менән мәшғүл, уларҙың моңайып, төшөнкөлөккә бирелеп ултырыр ваҡыты юҡ, шуғалыр ҙа, аңы айыҡ, һаулығы ныҡ, улар башҡаларға ҡарағанда яңы, сағыу хистәргә, тәьҫораттарға бай ғүмер кисерә. Ниндәй дәрәжәлә, ниндәй шөғөл менән булышһа ла, үҙе инанған ҡиммәттәрҙе ҡәҙерләгән, үҙ сифаттарын һаҡлаған, үҙ фекерен яҡлауға һәләтле шәхес һәр төрлө йәмғиәттә лә танылыу һәм ихтирам табалыр. Ғалимдар, фән эшмәкәрҙәренең башҡа һөнәр эйәләренә ҡарағанда оҙағыраҡ йәшәүе лә бәхәсһеҙ бит! Ҡыҙыҡһыныу тойғолары көслө, үҙҙәре дәртле кешеләр фәндә, сәнғәттә, спортта, һ.б. өлкәләрҙә йәне теләгән шөғөле менән ихлас мауығыуы арҡаһында бөйөк асыштарға, данлы еңеүҙәргә, һоҡланғыс һөҙөмтәләргә өлгәшә. Тәүәккәллеге, ҡыйыулығы самалы кеше, баҙнатһыҙлығымы, ҡурҡаҡлығымы арҡаһында, кеше көнлө булып, бахыр хәленә ҡалып йәшәй.

Мөғжизәләр тыуып тора Күктә, Ерҙә.
Тыуып тора мәшәҡәттәр һәр дәүерҙә.
Эшләмәһәң һәр бер эште үҙ мәлендә,
Эшләп булмай тыумаҫ борон, йә ҡәберҙә.

Мәшәҡәттәренән арынып бер минут та моңайып ултырыр ваҡыты булмаған кеше бәхетле! Донъяларына битарафлығы, үҙҙәренең баҙнатһыҙлығы арҡаһында ата-әсәһенең елкәһендә йәшәргә күнеккән йәштәрҙең ишәйеүе һиҫкәндерә. Имгәнмәгәндәр, зәғифләнмәгәндәр, Аллаға шөкөр! Һап-һау, типһә тимер өҙәрлөк егеттәрҙең эт һуғарып йөрөүе ғәжәп түгелме? Күрмәмешкә һалышҡан хәлдә лә, был факт! Тик ятыуҙан ниндәй йыуаныс, ҡыуаныс табалар? Кемдән йәки ҡайҙан был хәлдәренән сығыу әмәлен көтәләр? Улар мәшәүлектең сигенә еткәнме, әллә үҙҙәренең яҙмышына ҡул һелтәгәнме? Тик ятҡан таш мүкләнә... Уларҙың киләсәген кем хәстәрләр, нәҫел тамырҙарын кем дауам итер? Эшҡыуарлыҡ менән булышырға, йә ҡайҙалыр барып эш башларға баҙнат итмәүҙәренең сәбәбе ҡыйыуһыҙлыҡтамы, әллә ялҡаулыҡтамы?

Һорауҙар күп, ҡәтғи, әммә айышлы яуаптар юҡ! Эшләп ҡараманым, тип үкенеп ултырыуҙан, эшләйем, булдырам, хәлемдән килә, тип эш башлап ҡарау хәйерлерәк түгелме икән? Тәүәккәлләгәнгә генә уңыш йылмаялыр. Күреп йөрөйбөҙ, 1990 йылдарҙа "Сникерс" һатып, тимер-томор йыйып, үҙ эшен башлағандар бөгөн йөк машиналары, тракторҙары менән эшҡыуарҙарҙы, халыҡты, эре ойошмаларҙы хеҙмәтләндерә, үҙ эшен киңәйтә. Ваҡыт менән иҫәпләшмәй, ҡыйынлыҡтарға бирешмәй, тинде тингә ҡушып, әрһеҙләшеп, йәшәү маҡсатына ынтылғандар туғандарын, яҡындарын ҡыуандырып, етеш донъя көтә.

Шул уҡ мәлдә илебеҙҙе ҡытай, вьетнам, афған, тажиктар ҡыҫымынан бер ниндәй сиктәр ҙә, алыҫ аралар ҙа, йәшәү шарттары булмау ҙа, телде белмәү ҙә ҡотҡара алмай. Ҡарағош яуы кеүек өҫтөбөҙгә өйөрө менән ябырылған яттарҙы һағалап тоталар, ҡыуып сығаралар, төрмәләргә ябалар, ә улар күбәйгәндән-күбәйә, үрсегәндән-үрсей. Ҡап-ҡара кейенгән, ҡараңғы ниәтле кешеләр илебеҙгә яҡтылыҡ алып, яҡшылыҡ теләп килмәйҙәрҙер, уныһы ла факт! Ғәжәп, беҙҙең егеттәр бер нәмә менән дә ҡыҙыҡһынмай, бәләләрен ятҡа япһарып, эш юҡҡа һылтаналар.

"Атым бар, эйәрем юҡ, башым бар, йүгәнем юҡ..." тип йырларға ғына ҡала инде исем-аты бар - эйәре-һөнәре юҡ, башы бар - яҙмышын үҙ ҡулына алырға йүгәне юҡ, атай-әсәй эргәһенән бер аҙым китерлек ҡыйыулыҡтары ла юҡ ир-егеттәргә. Сит ерҙәрҙән килгәндәрҙең әрһеҙлегенә, йәшәү дәртенә ҡарайһың да һоҡланыу түгел, хатта көнләшәһең: улар бер заманда ла, бер ерҙә лә юғалып ҡалмаясаҡ, улар ауыр-

# ЯБАЙ КЕШЕНЕҢ... ҡатмарлы фекерҙәре...

ҺӨЙӨНСӨ!

## ЙӘШӘҮ ЭНЕРГИЯҺЫ АҢҠЫЙ...




*43 йәшендә генә ауыр яҙмыш һынауына дусар булған "Баймаҡ Корчагины" Урал Мостафин гәзит уҡыусыларыбыҙға яҡшы таныш. Ғүмерлеккә түшәккә ятырға мәжбүр булғандан һуң да ул йәшәү өсөн көрәшә башлай, ныҡышмалы рәүештә төрлө күнегеүҙәр яһай торғас, тороп ултыра, бер аҙҙан руль артына ла ултыра, ҡыҫҡаһы, тулы ҡанлы тормош менән йәшәүгә өлгәшә ул. Йәшәү мәғәнәһен эҙләү уны ғүмер асылы, тормош фәлсәфәһе хаҡында өҙлөкһөҙ уйланыуҙар аша ижад донъяһына алып килә. Шулай итеп, Урал Мостафин яҙыусы булараҡ икенсе тапҡыр донъяға тыуа. Уның шиғырҙарынан тупланған китабы ла үҙнәшер ысулы менән донъя күргәйне. Шулай уҡ беҙҙең гәзиттә баҫылған "Ябай кешенең ҡатмарлы фекерҙәре" фәлсәфәүи уйланыуҙары, "Ҡойон ҡойроғо оҙон..." повесы уҡыусылар тарафынан йылы ҡабул ителде.*

*Ошо көндәрҙә авторҙың Зәйнәб Биишева исемендәге "Китап" нәшриәтендә шиғырҙарынан һәм уйланыуҙарынан торған "Ғүмер - атылған уҡ" китабы ла донъя күрҙе. Авторҙың һәр һүҙенән, һәр фекеренән йәшәү энергияһы аңҡыған шиғри һәм публицистик әҫәрҙәре уҡыусыларға ла йәшәү, тормош мәғәнәһен тәрәнерәк аңларға ярҙам итер, тигән ышаныстабыҙ.*

лыҡтарҙы еңергә өйрәнгән, уларҙа ҡыҙыҡһыныу һәләте иҫ киткес көслө! Шулай булмаһа, ят илгә килеп, үҙ эштәрен башларға баҙнат итерҙәр инеме ни? Ҡыуылып, баҫтырылып ҡайтҡандары, моғайын, унда ҡыйын тип һөйләйҙәрҙер бит, ә улар, барыбер, ҡыҙыҡһыналар, киләләр, тәүәккәлләйҙәр! Улар, барыбер, үҙ күҙҙәре менән күреп, үҙ ҡулдары менән эшләп, үҙ елкәһендә бөтә әсеһенсөсөһөн татымайынса, бөтә һынауҙарын үтмәйенсә, ниәттәренән, маҡсаттарынан баш тартмайҙыр. Ят илдә, ят мөхиттә, ят донъяла йәшәр урыны юҡлығын, телде белмәүен, ярҙам итерлек кешеһе юҡ икәнен белә тороп киләләр, әрһеҙләнеп эшләйҙәр, йәшәйҙәр!

Таңдар ата. Көндәр үтеп тора.
Уйҙар ҡаса. Хистәр ҡаҡшата.
Аҡ болоттар үҙен сапҡан атҡа
Оҡшатмаһа, әҙәм оҡшата.
Вайымһыҙлыҡ илде шомға һала...
Ан-зиһене хатта һау саҡта,
Ҡунелене халҡы ҡарғыш ала,
Уйҙан аҙып, яуға ат сапһа.
Ҡыл өҫтөндә ята ил-имenлек
(Энә һаҡлап булмай ҡапсыҡта)
Әҙәм заты ҡулына суҡмар ала,
Көс етмәһә оло маҡсатҡа!
Аҡ болоттар түгел, ҡарағоштар
Күкте баҫа, оло яу ҡупһа.
Тыуған ерең - гәзиз түгел ятҡа,
Маҡсатына үрләр бер тупһа!..

Кешенең күңелендә маҡсаты, хыялы, гәме, сәме булғанда ул йәшәй! Кешесә йәшәргә бурыслы икәнен һиҙгән, йәшәгән дәүере менән ҡыҙыҡһынып, атҡарған хеҙмәтенән, башҡарған шөғөлөнән рухи ҡәнәғәтләнеү ала белгән кеше лайыҡлы дан, хөрмәттә йәшәй. Йәшәйем, тигән кеше, ауыр хәлдә лә, үҙендә көс, дәрт табып башҡалар менән тигеҙ йәшәргә һәләтле. Йәнендә ҡыҙыҡһыныу тойғоһо һүнмәһә, кеше әллә ниндәй шарттарҙа ла йәшәүгә һәләтлеләр тип уйлайым.

Эйе, тормошта бөтәһе лә ал да гөл булмай. Ҡайһы берҙә әҙәм ғәмәли һәҙөмтәләр алып тормошонда ҡулланыр өсөн түгел, ябай ҡыҙыҡһыныуын ҡәнәғәтләндереү өсөн дә төрлө хәүефле хәл, ғәмәлдәргә тәүәккәлләй. Үҙенә зарар килтерерлек күренеш менән артыҡ ҡыҙыҡһынып, самаһыҙ мауығып китеүе һәҙөмтәһендә һәселен ҡыйрылыҡ, оло афәт ҡуптарырлыҡ уңышһыҙ тәжрибәләр ҙә булып тора. Аңлы әҙәмгә ҡаршылыҡтарҙы үтеп, ауырлыҡтарҙы күтәреп, яңылыштарҙы төҙәтеп йәшәргә лә көс, һәләт бирелгән. Хаталарын ваҡытында аңлап, таныып, төҙәтеп, алға бара белеү аңлы әҙәмдең өҫтөнлөгө. Кеше бөтәһен дә алдан белеп йәшәһә, ғүмере һүлпән, төҫһеҙ, йыбаныс ҡына булыр ине. Ҡыҙыҡһынырлыҡ нәмәһе булмағас, маҡсаты ла тыумай, гәме булмағас, сәме лә юҡ. Ә былай, киләһе секундта тормош алдыма ниндәй мәсьәлә ҡуйыр, уны ҡасан, нисек хәл итермен, ҡайҙа ниндәй аҙым яһармын, тип, әҙәм аңы һәр ваҡыт әүҙем уйҙа, хәрәкәттә, гәмдә. Шуға күрә лә, һәр кемдең ғүмере һәр ваҡыт өр-яңынан башланған һәм ғүмере буйы туҡтауһыҙ дауам иткән шахмат уйыны. Фигуралары, йөрөштәре, ҡағиҙәләре, төрлө уйын алымдары, һәйбәтме, насармы, билдәле, бөтәһе лә таныш кеүек, ә даими үҙгәреүсән шарттар киләһе секундта ниндәй ҡатмарлы мәсьәлә ҡуйыр, ниндәй ҡарар ҡабул ителеп, ниндәй аҙым яһалыуы билгеһеҙ. Шуның өсөн дә, ғүмеребеҙ ваҡыт уҙғарыу түгел, һәр миҙгеле көсөргәнешле хәрәкәттәге йәшәү! Шуға ла, бер-береһенә оҡшаш булһа ла, бер төрлө яҙмыштар юҡ! Һәр кем ғүмерендә үҙ уйынын уйнай. Уйламаҫтан яҙмышы менән уйнағандар үҙен-үҙе отолоуҙарға дусар итә. Кемдәр тормоштан "мат" алып, сараһыҙҙан, уйынын туктатырға мәжбүр була, кемдәр, отолоп ҡуйыуынан ғәрләнеп, үҙенең һаулығын, тормошон ҡаҡшата, кемдәр цейтнотта иҫәнгереп ултыра, кемдәрҙәр, ауыр хәлдә ҡалһа ла, төңөлмәй, бирешмәй, сәмләнеп, ауырлыҡтан сығыу юлдарын, отошло юлдарҙы, дөрөҫ аҙымдар эҙләй, таба, еңмәгән хәлдә лә лайыҡлы "ничья"ға ризалаша. Маҡсатына өлгәшер өсөн, ҡурҡмай, яңы партияны башларға баҙнат итә! Ғүмерендә шахмат уйынын профессияһы иткән кеше лә отола, уйындағы кеүек, тормошта ла уңышлы, отошло булыр өсөн хәтһеҙ оҫталыҡ, таһыллыҡ, йылдамлыҡ талап ителә. Ҡыйыу кешенең уйыны бер ваҡытта ла уйналып бөтмәй, ул иң һуңғы пешкаһы менән дә һөжүмгә ташлана, һәр йөрөшө маҡсатына ҡыйыу аҙым булғас, барыбер еңә!

Йәнендә сәме, ғәме бар ҡыйыуҙар, егәрлеләр яңынан-яңы тәбиғәт мөғжизәләрен аса, йыһан серҙәрен сисә, кеше аңының үҫеү сиктәрен киңәйтә, йән, тән мөмкинлектәрен камиллаштыра. Донъяла ҡыҙыҡһыныусылар барҙа кешелектең тормош усағы яңынан-яңы ялҡындар сәсеп, осҡондар атып яныр әле. Ул усаҡ янына һыйыныусылар быуындан-быуынға аҡыллыраҡ, һәләтлерәк, үҙҙәренең донъяһына һәм берберeһенә сабырлыраҡ, мәрхәмәтлерәк булырына ышаныс киләә. Әҙәмдең күңелендә ҡыҙыҡһыныу ялҡыны дөрләгәндә, оло маҡсаты булғанда, ул йәшәр, бөгөнгөһөнән дә ҡыҙығыраҡ, бөгөнгөһөнән дә ҡыйыуыраҡ йәшәр әле, тигән өмөт бар. Донъяһы менән ҡыҙыҡһынған кеше генә яңы асыштар яһай, данлы еңеүҙәр яулай, тормошта туктауһыҙ алға барырға һәләтле! Әҙәмдә әҙәм иткән дә, бәхетле-шат иткән дә, хәүефле сиктәргә еткән дә, ҡайғыхәсрәткә дусар иткән дә фәҡәт шул ҡыҙыҡһыныу тойғоһо! Әҙәм ғүмерендә ҡыҙыҡһына, тәүәккәлләй, яңылыша, үкенә, илай, төҙәтә, еңә, дан яулай, тимәк, яҙмышына һәр кем үҙе түрә! Быуындарҙан-быуындарға мираҫ ителгән йәшәйеш рәүеше шулайҙыр, күрәһең...

Рәнйетелгән йән, тәнгә лә,
"Ғәҙеллек юҡ", тигәнгә лә,
Түҙемлек бир, Хаҡ Тәғәлә!
Һәләтлек бир саф ғәмәлгә,
Ул бит Һинең менән түгел,
Үҙе менән хаҡ дәгүәлә...

**Урал МОСТАФИН.**

КӨЛКӨФӨ



# БЫЛ ХӘЛДӘР КҮҢЕЛДӘ -
## йылмайта бөгөн дә

### УРАМ БАР - ФАТИР ЮҠ

Беҙгә 1969-1971 йылдарҙа Өфөнөң Карл Либнехт тигән бәләкәй генә урамындағы ярым ер аҫтындағы фатирҙа йәшәргә тура килде. Ағиҙел йылғаһының бейек уң яҡ ярындағы был урындарҙа йәйәүләп кенә йөрөргә мөмкин ине. Ҡышҡылыҡҡа утын әҙерләргә кәрәк, сөнки мейескә яғып йылынабыҙ, шунда аш-һыу әҙерләйбеҙ. Улыбыҙ Азат тыуып, йыл әйләнәһенә һалҡын, еүеш йортта көн күреү ауырлашҡандан-ауырлаша барғас, ялға китеүҙән файҙаланып, ҡатыным менән улымды Мәсетле яҡтарына - ҡәйнәмә алып барып ҡуйҙым. Үҙем, яңы фатир табыу ниәте менән, яңынан Өфөгә юлландым. Килеүемә, көс-хәл менән торлаҡты эҙләп тапҡан Салауат тигән ҡусты (әсәйем менән уның атаһы бер туған) көтөп йөрөп ята ине. Өйгә инеп, мин ашарға әҙерләгәнсе, ул туған-ырыуҙар, ауыл яңылыҡтарын һөйләне, өҫтәлдә ятҡан гәзиттәрҙе ҡараштырҙы. "Бәй, бынауында һинең шиғырҙар бар ҙа!" - тип ҡысҡырып-йылмайып, һөйөнсө һорағандай, "Совет Башҡортостаны" гәзитен минә һуҙҙы: әйтерһең, бығаса уларҙы күрмәгәнмен. Сәй-мәй эскәс, ҡусты нык ҡына йомшарып, гәзитте ауылға алып ҡайтайым әле, тип нығыша башланы. "Киләһе йыл китап сыға, уны үҙем менән алып ҡайтып бирермен," - тигәс кенә һыуына төштө. Нинә үҙегеҙ алдырмайһығыҙ гәзитте, тип йортҡа килгән туған кешегә нотоҡ уҡып булмай бит инде.

Икенсе көндө Салауат ҡустының йомошон хәл иткәс, минекенә - торлаҡ мәсьәләһенә ҡустек. Ҡаланың үҙәк урамында таба алмаҫты белеп, Өфөнөң тирә-яғындағы айырым йортҡуралар ҡулдан яҙып эленгән ҡағыҙ киҫәктәрен уҡыштырабыҙ. Нихәл итмәк кәрәк, ул саҡта, хәҙерге кеүек, фатирға индереүселәрҙең адрестары, телефондары яҙылған төрлө гәзиттәрҙе почта йәшниктәренә ҡыҫтап тултырып һалып китмәйҙәр ине. Үҙенә һорашырға, эҙләргә тура килде.

Бына бер ваҡыт, көн кискә ауышҡас, Иҫке Өфөнөң иң ситтә ятҡан бәләкәй генә бер урамынан китеп барабыҙ. Шул саҡ Салауат ҡустының:

- Абзый, кил әле, ҡара! - тигән саҡырыуын ишеттем. Янына яҡынлашҡас, ул бәләкәй генә йорттоң мөйөшөндәге тимергә бармаҡ менән төртөп: - Уҡы әле, уҡы! - тип йылмайҙы. Зәңгәр төҫтәге буяу өҫтөнән матур хәрефтәр менән яҙылған бары ике һүҙҙе ҡысҡырып уҡыйым: "Мифтахов урамы". Икебеҙ ҙә һүҙһеҙ ҡалдыҡ. Салауаттың аптырау ҡатыш йылмайыулы йөҙөндә ниндәйҙер ҡаушап ҡалыу ғәләмәте күрәнә. Мин яңынан яҙмаға ҡарайым: Мифтахов урамы. БыҒаса Өфөлә Бөйөк Ватан һуғышында һәләк булған күренекле драматург Сәғит Мифтахов исемен йөрөткән урам барлығын белмәүҙән, күрмәүҙән, бер ни тиклеп уңайһыҙланып, уйға ҡалып торғанда, тағы Салауат ҡустының тауышын ишеттем:

- Абзый, әллә был һинең ураммы?

Күңелгә шаярыу тойғоһо килеп инде лә:

- Бына, ҡустым, донъя нисек бит: үҙ урамында фатир эҙләп йөрө инде?! Ғәрлегеңдән шартлап үлерһең! - тип һалдырҙым.

- Ысынлапмы?! - тип нығыша туған кеше.

Ихлас, ышаныусан, бер ҡатлыраҡ, алдаша белмәҫ ине шул. Ауылда башланғыс класты тамамланы ла, артабан күрше ауылға йөрөп уҡыу мөмкинселеге булмағас, колхоз эшенә егелеп эшләп тик йөрөнө. Ҡулдарында, китап менән дуҫлашыр саҡта ла, сыбыртҡы, һәнәк, көрәк, балта һәм башҡа эш ҡоралдары булды...

Күрәһең, ошо ваҡиғаны ауылда ла һөйләштергәндәр. Бер саҡ Нафиҡ абзыйым һүҙ ыңғайында:

- Һин унда Салауат ҡусты менән үҙ урамыңда фатир эҙләп йөрөгәнһең түгелме? - тип шаяртып һорай ҡуйҙы.

Өндәшмәнем. Ул да, мин дә бары бер-беребеҙгә ҡарап, йылмайышып ҡына ҡуйҙыҡ.

### АТА ҠАҘ

Һуғыш тамамланып, ауыл халҡы колхоз эшенә әҙ генә арынған мәлендә, рөхсәт ителгән кимәлдә генә булһа ла мал үрсетергә, ҡош-ҡорт аҫырарға, бәрәңге ултыртырға тырышты. Был йәһәттән беҙҙең ғаилә лә ҡалышманы. Байтаҡ әтәс-тауыҡтар янында ҡаҡылдашып, бәпкәләрен эйәртеп, ҡаҙҙар ҙа йөрөп ятыр ине. Ҡасан ғына эргәләренә яҡынлашма, муйындарын һуҙып, йәнәһе лә, суҡып алмаҡсылар. Бер ҙур ҡаҙ бигерәк тә был йәһәттән ҡыйыулығын күрһәтергә әҙер. Ныҡ асыуға тейгәс, мин дә эстән генә уға урамға кем хужа икәнде раҫларға план ҡороп йөрөнөм. Шулай бер көндө асығып, хәлһеҙләнеп, Тәйрүк йылғаһында һыу инеп ҡайтып киләм. Ҡапҡа асып урамға инеүем булды, ата ҡаҙ, торпеда һымаҡ муйынын һуҙып, туп-тура минә яҡынлашты. Ситәнгә һөйәп ҡуйған оҙон таяҡты алып һелтәүем булды... ҡаҙым әйләнде лә төштө. Күҙ ағын аҡайтып һуҙылғанын бер нисә секунд ҡына ҡарап торҙом да, һарай артына һыпырттым. Ҡурҡыуҙан ҡалтырана-ҡалтырана, әсәйем күрмәҫ урындан ҡаҙҙы күҙәтәм: һаман шул килеш ята. Сепейҙәрен эйәрткән ҡаҙҙар ҡаңҡылдаша башланы. Нимә эшләргә? Ҡаҙ һынлы ҡаҙҙы үлтергәнсә һуҡ әле. Белһәләр, ул саҡта... Шулай ғазапланып торғанда, иҫәр башҡа бер шәп уй килмәһенме! Әлеге ата ҡаҙ янына ҡаса-боҫа ғына йүгереп барҙым да, һөйрәп килтереп, башын ситән араһына борғолаштырып ҡыҫтырып ҡуйҙым һәм кире күҙәткән урыныма барып сүкәйҙем. Ҡаҙҙарҙың ситән аша ҡаңғылдашыуына бер саҡ өйҙән әсәйем килеп сыҡты ла:

- Нимә булды һеҙгә, тауышығыҙ ҡолаҡты ярып алып бара, - тип уларға табан атланы. Тегеләр, ана малайың нимә эшләне, тигәндәй, ҡанаттарын ҡалҡыта-төшөрә ерҙә ятҡан иң дәрәжәле баш хужаларына яҡынлашты. Күрәм, бер аҙҙан теге "хужа" аяҡҡа баҫмаһынмы! Өҫтәүенә, ситәндән башын сығарырға аҙаплана башланы, шунда уны әсәйем дә шәйләп алды:

- Нимә булған быға, әллә иҫәрләнгәнме?! Нимә эҙләнең унда?! - тип һөйләнә барып, ата ҡаҙҙың башын ситән араһынан ысҡындырғайны, уныһы, рәхмәт әйткәндәй, башын һелкә-һелкә "бисәләре" төркөмөнә ҡушылды.

Әсәйем, минең исемде әйтеп бер нисә тапҡыр ҡысҡырҙы ла:

- Ҡайҙа йөрөй һуң был йүнһеҙ малай! - тип һөйләнә-һөйләнә яңынан өйгә инеп китте...

Ата ҡаҙҙың ваҡытлыса "үлеү" серен әсәйгә үҙем һөйләп өлгөрә алманым. Туғандарға ла серҙе асҡан юҡ ине. Бәлки ошо хәтирәне уҡып белерҙәр. Йылмайып ҡуйһалар ҙа шатлығы ни тора!

**Риф МИФТАХОВ.**

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Белеүегеҙсә, гәзитебеҙҙә лаҡапҡа әйләнгән мәҙәк хәлдәрҙе һөйләү өсөн "Алдар менән Ерәнсә ҡоро" рубрикаһы сыға килә. Уның конкурс форматында булыуын, йыл да йомғаҡ яһалып, әүҙем авторҙар бүләкләнә икәнен дә иҫегеҙгә төшөрөп ҡуйыйыҡ. Тормошонда булған ҡыҙыҡлы хәлдәрҙе хикәйәләргә теләгәндәр өсөн тағы бер рубрика тәҡдим итәбеҙ: "КөлкӨфө" тип атала ул. Һеҙҙән хаттар көтәбеҙ, мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ: күңел хәтирәләрен аҡтарып, ундағы иң ҡыҙыҡ мәлдәр һәм хәлдәр тураһында яҙып ебәрегеҙ. Иң ҡыҙыҡ әҫәрҙәр йыл аҙағында шулай уҡ бүләкләнәсәк.**

ИНТЕРНЕТТАН



# ФИЗИК ӘҮҘЕМЛЕК...

## бар сирҙәргә дауа

■ Америка ғалимдары әйтеүенсә, организмға һыу етмәүе артыҡ һимеҙлеккә килтерә. Һыуға ҡытлыҡ кисерә башлау сәбәпле, мейе асыҡыу тойғоһона оҡшаған сигнал ҡабул итә. Һөҙөмтәлә, һыу эсеү урынына беҙ ашай башлайбыҙ һәм артыҡ ауырлыҡ йыябыҙ. Шуға ла диетаға ултырыу, төрлө ябыҡтырыусы препараттар ҡабул итеү урынына организмда һыу балансын тигеҙләү генә кәрәк. Көнөнә сәй, ҡәһүә һәм башҡа эсемлектәрҙән тыш, 2-2,5 литр һыу эсергә кәңәш итә белгестәр. Һыу ябай һәм таҙа булырға тейеш. Ошо ябай ҡағиҙәне күҙәтеү асыҡыу тойғоһон баҫырға һәм аҙыҡты аҙыраҡ ҡулланырға ярҙам итәсәк.

■ Көртмәле составында булған фитонцидтар дизентерия таяҡсаларына, ҡорһаҡ тифына ҡаршы яҡшы сара иҫәпләнә. Шуға ла белгестәр көртмәле өлгөргән миҙгелде бушҡа уҙғармаҫҡа, ә уны туйғансы ашап ҡалырға саҡыра. Тунҙырылған емештәргә ҡарағанда, яңы өҙөлгән көртмәләнең күпкә файҙалыраҡ икәнен дә онотмағыҙ. Бынан тыш, көртмәле күҙҙәргә лә яҡшы тәьҫир итә, ул күреү һәләтен яҡшырта, күҙҙәр арымай башлай, төнөн, бигерәк тә энерҙә күҙ томаланыуҙан ҡотҡара. Эштәре компьютер менән бәйле булғандарға был емеш айырыуса файҙалы.

■ Америка ғалимдары, XX быуат чумаһы тип йөрөткән сир - депрессияны физик күнегеүҙәр ярҙамында еңеп була, тип белдерә. 25 минут физик күнегеүҙәр һнап алғандан һуң кешенең кәйефе күтәрелә, ул тыныслана. Даллас ҡалаһы университетында шундай тәжрибә һнала: тәүге төркөм 150 минут буйы еңелсә, ә икенсе төркөм 75 минут ауырыраҡ күнекмәләр менән шөғөлләнә. Асыҡланыуынса, икенсе төркөмгә тәғәйенләнгән күнекмәләр депрессияға ҡаршы һөҙөмтәлерәк көрәшә. Иртән бер нисә минут күнекмәләр яһарға ғәҙәтләнгәндәр ҙә депрессияға бирешеп бармай икән. Шуға ғалимдар әүҙем физик күнекмәләрҙең был сиргә ҡаршы махсус дарыуҙарға ҡарағанда файҙалыраҡ булыуын белдерә.

■ Нимә ул көлөү һәм кеше ни өсөн көлә икәненә аныҡ ҡына яуап биреүе еңел түгел. Ғалимдар көлөү иммун системаһын нығытыуын да билдәләй. Етмәһә, йыш көлгән кешелә нейрондар тарафынан бүленеп сыҡҡан бәхет гормондары - эндорфиндар баш мейеһенә ауыртыу сигналдарын үткәрмәй, киреһенсә, ҡәнәғәтлек тойғолары уята. Биш минут ихлас итеп көлөү 40 минут йүгереүгә тиңләшә. Психологтар әйтеүенсә, кеше олоғая барған һайын көлөү һәләтен дә юғалта. Табиптар раҫлауынса, яһалма көлөү ҙә организм өсөн файҙалы була ала. Бәхетһеҙ, эш көлөүҙең оҙайлығында икән. Көнөнә 17 минут ихлаҫлап көлөү депрессиянан ҡотҡара, ә яһалма көлгәндә ошо уҡ һөҙөмтәгә өлгәшеү өсөн 1 сәғәт ваҡыт кәрәк буласаҡ.

■ Австралия белгестәре, кәрәкмәһә лә магазиндар буйлап йөрөү ғәҙәте ауыр сир, тип белдерә. Был проблема Мельбурнда үткән медицина симпозиумдарының береһендә тикшерелгән, әммә табиптар был сирҙе дауалау саралары тураһында аныҡ ҡына фекергә килә алмаған. Осрашыуҙа ҡатнашыусыларҙың береһе, профессор Рэнди Фрост белдереүенсә, төрлө кәрәкмәгән әйберҙәр яратыусыларҙың 80 проценты ысынлап та ҡаты сирле. Уларҙың 25 проценты төрлө психик тайпылыштарҙан яфалана, 50 процентында депрессия күҙәтелә.

КҮҢЕЛ МӨҺӨРӨ

**Кеше тормошо борма-борма, һикәлтәле-һикәлтәле һуҡмаҡты хәтерләтә. Һәр кем ауырмы, еңелме, үҙ йөгөн үҙе тарта. Сүл ҡамғағы һымаҡ алға тәгәрәй. Уйлап ҡараһаң, ошо ҡыҫҡа ғына ғүмере эсендә кеше менән нимәләр генә булмай: күктең етенсе ҡатына күтәрер шатлығы ла, индәрҙе ергә һалындырыр ҡайғыһы ла. Донъяны бер яҡлы ғына итеп аңларға ярамағанлығын әле башлап төшөнә барам. Эйе, донъя - әҙәм балаһы алдында төрлө сүрәттә асыла... Кеше лә уға ярашлы үҙгәрештәр кисерә. Әммә был үҙгәрештәрҙең ҡайһы яҡҡа - яҡшығамы, насар яҡҡамы боролош алыуы үҙебеҙҙән тора. Мин был хәҡиҡәткә әрмелә саҡта инандым.**



# АРАЛАШЫУСАН БУЛЫУЫМ...

## әрмеләге "бабайлыҡ"ты ла еңеләйтте

Һис шикһеҙ, ир-егеттең тормошонда хәл иткес роль уйнаған ваҡиғаларҙың береһе ул - хәрби хеҙмәт. Бик күптәр әрмене "тормош институты" тип һанай. Улар менән килешмәү мөмкин түгел, сөнки халҡыбыҙ борон-борондан: "Хеҙмәтенде намыҫ менән үтә, йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермә", - тип теләп, улдарын әрмегә оҙатҡан, уларҙың унан ысын ир булып, аҡыл туплап ҡайтырына ышанған. Советтар Союзы осоронда ла әрменән тороп ҡалыу ир-егет өсөн ҙур хурлыҡ һаналған. Йәғни, ер-һыу күрмәгән, әрмелә үҙен һынап ҡарамаған егет әлегә ысын ир булып етмәгән, тиген фекер яралған...

Дөрөҫ, Рәсәй әрмеһендә бөгөн дә борондан килгән яугирлыҡ традициялары яҡшы һаҡлана, хөрмәт ителә. Егеттәребеҙ әле лә Ватаныбыҙ һағында тиңһеҙ батырлыҡтар күрһәтә. Униһына иманым камил. Әммә мине, ябай граждан булараҡ, шул борсой: ҡайһы бер йәштәштәр әрмегә ыңғай ҡараштa түгел, йә бөтөнләй битараф. Күп тапҡыр шундай хәбәр ишетергә тура килә: "Әрмелә нимә бар!? Унда йөрөп, ваҡытым ғына әрәм була". Уларса фекер йөрөткән булһаҡ, ата-бабаларыбыҙҙан мираҫ булып ҡалған Тыуған ерҙе һаҡлау бурысы бик үк мөһим булмаған булып сыға! Кемдер, мин ябай тормошта ла бик күп файҙа килтерә алам, тип әйтер. Валлаһи, хуплайым, ышанам. Тырышып эшләп, ғаилә ҡороп, матур пландар менән янып йәшәгән тиҫтерҙәремә дәғүәм юҡ. Әйҙә, эшләһендәр, илгә файҙа килтерһендәр. Шулай ҙа, әрмегә барып, үҙеңдең ниндәйерәк ҡамырҙан әүәләнгәнлегеңде белеү, минеңсә, файҙаға ғына...

Мин әрмеләге ошо ҡыҫҡа ғына бер йыл ваҡыт эсендә ниҙәр күреүем тураһында гәзит уҡыусылар менән уртаҡлашырға теләйем.

Бөтә малай тиҫтерҙәрем кеүек үк, үҫкәс, мин дә һалдат буласаҡмын, тип маһая торғайным. Хәрби кейемдәге кешене күреүе үҙенә күрә бер әкиәт батырын осратыу һымаҡ ине. Ағайҙарымдың берәм-берәм әрменән әйләнеп ҡайтыуын бик яҡшы хәтерләйем. Атайымдың ике туған ҡустыһы, Зәбир исемле ағайымдын (уның мәрхүм булып ҡалыуын әрмелә ишеттем, ауыр тупрағы еңел булһын) үҙенең хәрби кейемендә 3 һаны төшөрөлгән күк значокты минең түшкә беркетеүе иң яҡты хәтирә булып ҡалған (значоктың "3-сө класлы специалист билдәһе" булыуын әрмелә саҡта таныным). Әйткәндәй, үҙем дә, хеҙмәтемде тултырып ҡайтҡас, ҡустыларыма тараттым уларҙы.

Атайым мәктәптә военрук булғанға күрәлер, әрмегә барыу-бармау тураһында икеләнеүҙәр баштан уҡ булманы. "Ир-егет үҙ Ватаны алдында бурысын мотлаҡ үтәргә тейеш. Беҙҙең нәҫелдә бар ирҙәр ҙә әрмелә хеҙмәт иткән: һин дә имен-һау йөрөп ҡайтырһың", - тип атайымдың бала сағымда уҡ әйтеп ҡуйғаны иҫтә. Мәле еткәс, военкомат тупһаһы аша атлау ауыр булманы. Шуныһы өсөн атайыма, әсәйемә рәхмәтлемен.

2009 йылдың июль айы башталарында юғары уҡыу йорттарын тамамлап, ҡулына диплом алған ике тиҫтәгә яҡын башҡортостанлылар менән Свердлов өлкәһенә Хәрби Һауа Көстәренә ҡараған 185-се Зенит-ракета полкына килтерелдек. Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан Рәфил Ғәлиәхмәтов исемле институт йылдары һабаҡташым менән бер ергә эләгеүебеҙҙе бәхет йылмайыуы тип ҡабул иттем. Унан тыш, Баймаҡ районынан Азат Яҡшыбаев һәм Айсаф Хәмитов, Мәләүеҙҙән Тәлғәт Хисамов, Бишбүләктән Илнур Ихсанов, Өфө ҡалаһынан Алмас Гәрәев, Ишембай районынан Руслан Ғәзизов һәм Азат Халиков исемле башҡорт һәм татар егеттәре менән бергә хеҙмәт иттем. Полкка килеп етеп, автобустан төшкәс тә бар ерҙә лә булдырылған таҙалыҡҡа, бөхтәлеккә хайран ҡалдым. Сит илгә барып эләккәндәге кеүек хис ямланы мине. Тап-таҙа, йыйыштырылған баҡсалар, ялтырап ятҡан асфальт юлдар... Шул уҡ көндө күрше "Тау ҡалҡаны" ҡасабаһы янындағы хәрби часта "Йәш һуғышсы уҡыуҙары" үтергә киттек. Егерме көн дауамында шунда булдыҡ. Тәүге мәлдәрҙән үк тәртипкә, таҙалыҡҡа, пунктуаллеккә, сафҡа теҙелеү алымдарын өйрәтеүгә нығылап тотондолар. Ауыр булды, тип әйтә алмайым, бар нәмәне еңел үҙләштерҙем. Хеҙмәт итеү барышында таҙалыҡ, тәртип күнел талабына әүерелде. Шуныһы минең өсөн айырыуса ҡәҙерле.

Студент саҡта ата-әсәйемдән, туғандарымдан ике-өс аҙнанан да оҙағыраҡ ваҡытҡа айырылғаным булмағанға күрә, тәүге айҙарҙа бик һағына инем. Һағыныуҙан да ауырыраҡ нәмә булһа, шул һағыныу ғына барҙыр, тип уйлай инем. Үҙемде ҡыҙыҡһындырған шөғөлдәр табып, һағышты баҫыр булдым. Шиғырҙар яҙыу, Илнур Ихсанов исемле дуҫ егет менән әҙәби әҫәрҙәр, инглиз телендәге ҡулланмаларҙы уҡыу, уның менән нығлап спорт (турникта тартылыу, йүгереү, тренажер залында тимер-томор күтәреү) менән шөғөлләнеү, шахмат, шашка уйнау бер төрлө көндәребеҙҙе йәмләне.

Полктың бай китапханаһына күберәк йөрөргә тырыштыҡ. XV быуат фарсы-тажик шағиры Абдрахман Джамиҙың шиғырҙарын яратып уҡыныҡ. Мәсәлән, уның бер сабырлыҡҡа өндәгән робағийы бигерәк тә күңелгә ятты.

"Терпенье всем приносит сладкий плод,
Терпенье к благоденствию ведет;
Ты в жизнь вступил... Учись же с колыбели
Быть терпеливым... и достигнешь цели!"

Мин үҙем өсөн быуаса күрмәгән-ишетмәгән шиғриәт өлгөһөн астым. Әлегә ҡәҙәр уға еткән бер аҡыл эйәһен дә осратҡаным юҡ ине. Шуның өсөн генә булһа ла әрмегә барыуым менән бәхетлемен. Иптәштәрем кеүек, мин дә блокнот тултырырға тотоноп киттем. "Ҡуйын дәфтәремә" әрме тураһындағы халыҡ сығарған һәм үҙем дә яҙыштырған шиғырҙарҙы, Г. Лихтенберг, Б. Челинни кеүек классиктарҙың ҡанатлы һүҙҙәрен, урыҫ халҡының мәҡәл-әйтемдәрен һәм башҡа кәрәк тип тапҡан аҫыл һүҙ өлгөләрен күсереп алдым. Иң төп урынды Джамиҙың шиғырҙарына, әҙәбиәт ғилеме буйынса шиғри формала яҙған фәнни трактаттарына бүлдем. Бер мәл файҙаһы тейәсәк, тип уйланым.

Файҙа тигәндәй... Тыуған ауылым Темәс музыка мәктәбендә фортепиано класында бер йыл уҡығайным. Әрмелә бер саҡ халыҡ йыры "Азамат"ты уйнап ултырам, хеҙмәттәштәр ишетеп ҡалған да, ни тиклем һағышлы моң, тинеләр. Ҡабат-ҡабат шул көйҙө һорап, уйната торғайнылар. Ошо көйгә хисләнеп йөрөй торғас, уйҙарымды шиғыр юлдарына теҙмәйенсә булдыра алманым.

Талғын ғына моң ағыла...
Йөрәк сәңгелдәктә, хас та, бәүелә.
Мин - сабый, ә йырым - әсәһөтө...
Бер ни кәрәк түгел әлегә...
Әсә һөтө менән һеңгән мондар
Бишектәрҙән таныш кеүектәр.
Ата-әсәм биргән моңло күңел -
Хисе ташһа, йырлар күректер.
Моң йәшәртә беҙҙе, моң йәшәтә...
Кеше ғүмере бит йыр ғына.
Һәр бер яҙмыш яңы биҙәк өҫтәй
Оло хорға - күктәр йырына!

Бер ваҡыт, минең музыкаға әүәҫ булыуымды ишеткән старшинабыҙ килеп, тыңлап ултырҙы ла, хуплау һүҙҙәре әйтте. Мин уға баянда уйнай белеүем тураһында ла ыҫҡындырғас, күп тә үтмәй, өр-яңы бая-

ным да барлыҡҡа килде. Полкта бер кем дә уйнамағас, был иҫ киткес музыка ҡоралы тулыһынса минең ҡарамаҡта булды. Яҡташтарыма халыҡ көйҙәрен, эстрада музыкаһын уйнап, моңланып ала инек. Бына шулай әрмелә музыкаль һәләтемде лә үҫтереп ҡайттым.

Әрмелә кеше исеменә тап төшөргән заттар ҙа осраны. Бер егет автомобиль паркында аккумуляторщик булып эшләй ине. Сатлама һыуыҡ бер ҡышҡы көндә эшһеҙлектән йонсоп йөрөгән Вадимдың күҙ алдында берәҙәк эт пәйҙә була. Егеттән ярҙам өмөт итеп, яҡын уҡ килә мәхлүк. Йылынырға тип аккумуляторҙар бүлмәһенә барып кергән эткә һауыт төбөндә ҡалған һелтене һибергә нормаль кешенең башы етер инеме лә, йөрәге етер инеме?! Был ҡурҡыныс хәлдән һуң эт оҙаҡ ҡына арҡаһындағы таба ҙурлыҡ яраһынан интегеп йөрөнө. Ахыры ла бик йәлләүес булды: командирыбыҙ, эт интегеп йөрөмәһен өсөн, уны ҡыйыуыраҡ һалдаттарҙан үлтертте. Ошо ваҡиғанан һуң кешенең ни тиклем дә таш йөрәкле була алыуына аптыраным. Хайуандарҙы рәнйетеүсе кешегә ҡул күтәрергә лә күп уйлап тормаҫ. Ә теге егетебеҙ үҙенең ни өсөн бындай ҡот осҡос аҙымға барыуын аңлата алманы... Шундай кешеләр әллә ҡайҙа океан артында түгел, ә үҙебеҙҙең арала ла осраүы әсендерҙе мине.

Ни өсөндөр йәштәр әрмеләге "бабайлыҡ"тан ҡурҡа. Беҙҙә лә булды ул әйбер, күптәр ҡүҙаллағанса, ул шул тиклем үк хәтәр күренеш түгел. Мин үҙем "Кәңәшле ил - тарҡалмаҫ" тигән мәҡәлгә таянып эш иттем, күп кенә сетерекле мәлдәрҙә аралашыусан булыуым, өлкәндәрҙә хөрмәт итеү кеүек сифаттарым ярҙамға килде. Ниндәй генә көртәләр торһа ла, уларҙы енер көс - берҙәмлек, шуға күрә, әгәр һеҙ кеше менән бик еңел аралашыусан икән, тимәк, һеҙгә әрмелә ҡурҡырлыҡ бер нәмә лә юҡ.

Туғандарым менән аралар алыҫайған һайын, күңелем уларға нығыраҡ тартылды. Һәр хат һайын уларҙы һағынған мәлдәрҙә кинәт тыуған шиғырҙарымды ебәрә инем. Бер көн хатты тулыһынса шиғри формала ғына яҙып һалдым. Был, аҙаҡ ишетеүемсә, туғандарыма айырыуса ҡыҙыҡ тойолған. Әрмелә шиғыр яҙып ҡына тик яталыр был, тип көлөшкәндәр. Шул шиғырҙан да бер өҙөк килтерергә булдым.

Һаумы, атай! Һаумы, әсәй!
Шәпме, һеҙлем һәм ҡустым!
Ошо хатым аша һеҙҙең
Ҡулдарығыҙҙы ҡыҫтым.

Ҡаурый ғына ҡәләм алып,
Башлап киткәс яҙмамды,
Күңелемә, майҙай булып,
Хистәр килеп ялғанды...

Был миҙгелдә күҙ алдыма
Килде һеҙҙең күҙ-ҡараш...
Хатым булһа ике ҡарыш,
Был юлдарға һыймай ҡалған
Уйҙар ебем - йөҙ ҡарыш...

Әрмелә бик күптәр автомат тотоп арыған ҡулдарына ҡәләм ала. Шундайҙар рәтенә Мәләүез ҡалаһынан Тәлгәт Хисамовты айырып әйтер инем. Рус телендә ижад итеүсе егетебеҙ күңеленән урғылып сыҡҡан мөхәббәт хистәрен бер шәлкемгә шиғри юлдар итеп йыйҙы. Башлап яҙыусы тип тә әйтмәҫһең - юғары художестволы оҫталыҡ менән яҙҙы ул тәүге шиғырҙарын. Һуңғы шылтыратҡанында әле лә шиғыр яҙыуын дауам итеүе хаҡында хәбәр итте. Хәрби хеҙмәттә йәшерен таланттар ҙа асыла икән.

Хәрби хеҙмәтемдең күп өлөшө ҡарауыл хеҙмәтендә үтте. Ә был урын шиғри күңелле кешеләр өсөн айырыуса килешә... Тирә-яҡты күҙәтеү тәүлек әйләнәһенә башҡарыла торған бурысым ине. Часовой булып, вышкала баҫып торғанда, тәүлектәр алмашыуына ҡарап, ғүмер тураһында уйлана инем. Минең йәш йөрәгемдә ғүмерҙең һәр бер миҙгелен ҡәҙерләү теләге уянды. Айырыуса яҙғы иртәләрҙе күҙәтеү күңелдә әйтеп бөтөрә алмаҫлыҡ ләззәт тойғоһо уята ине. "Поста таң аттырған саҡта" исемле шиғырым да үҙенәнүҙе килеп сыҡты, тиһәм, дөрөҫ булыр.

Ҡарағайҙар еҫкәйҙәре
Аңҡый яҙғы иртәлә;
Алтын ҡояш уҡҡайҙары
Ерҙе үбә иркәләп.
Күкрәгемде ошо яҙғы
Сафлыҡ менән тултырҙым.
Һил иртәләр күңелдәрҙе
Пар ҡанатлы итәләр.
Ҡыҫҡа ғына ошо бер мәл
Боҙҙо ваҡыт ағышын.
Тирә-яҡҡа ҡарап тороп,
Мәлкәйгә сат йәбештем.
Мин үҙемде бөтөн иттем -
Бер бөтөн иртә менән.
Бар ғаләмде инләр өсөн,
Нурҙар менән ярыштым.
Күп тә тормай, әркеп сапты
Шәфәҡ - сихри миҙгелем.
Йылы нуры йөрәгемә
Һағылғайны, иренем.
Шуға беләм таң ҡәҙерен,
Таң - фатиха унышҡа.
Һәр иртә минә үҙенсә
Йылмая, тиер инем.
Илгиз, һаҡла ошо мәлде -
Һоҡлан, шатлан ҡояшҡа!
Гел шулай матур атһын таң,
Йәмдәр өҫтәп, тормошҡа!

Әле үрҙә әйтелгән шиғырҙағы кеүек, яҡты ҡояшым ҡалҡып ҡына килә... Мин йәш һәм, ошо илаһи мәлгә сат йәбешеп, килер көндәремдең гел шулай ҡояшлы булырын теләйем. Аҙ ғына ауырлыҡтары булһа ла, бирешмәҫмен. Сөнки мин бит, үҙемдең хеҙмәттәштәрем, күп кенә тиңдәштәрем кеүек, әрме сынығыуы алған кеше...



**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

# ИСМИ ӘҒЗӘМ ДОҒАҺЫ

**Әл-Мүһәймиинү** - бәндәләрҙе һәр ваҡыт үҙ ҡурсауына алыусы, яҡлаусы һәм һаҡлаусы. Үҙе яралтҡан һәр йәндең туҡ булыуын, һыуһап йөрөүҙәрҙән имен булыуын ҡайғырта. Ғөсөл ҡойонғандан һуң был исемде йөҙ мәртәбә әйткән кешенең күңеле тыныс булыр.

**Әл-Ғәзиизү** - көслө, ҡеүәтле, еңелеүҙәргә дусар булмай торған зат, бөтә көстәрҙе еңеүсе. Бөйөк Аллаһ - бер генә, Уның тиңдәштәре һәм иптәштәре юҡ. Яралтылыштарҙың Унан хәжәттәре ҙур, Уның хәжәте бер кемгә лә юҡ. Иртәнге намаҙҙан һуң ҡырҡ мәртәбә "Йәә Ғәзиизү" тигән мосолмандың һис нәмәгә лә мохтажлығы булмаҫ.

**Әл-Жәббәәрү** - үҙ хөкөмөн бар ғәмәлдәрҙә лә урынына еткереүсе көслө һәм ҡеүәтле зат. Уның хөкөмөнән бер кем дә ҡотола алмай. Кем был исемде егерме бер мәртәбә әйтә, Хаҡ Тәғәлә уны залимдар яуызлығынан имен ҡылыр.

**Әл-Мүтәкәббирү** - һәр эштә өҫтөн булған зат. Ғорур, үҙе яралтҡандарҙан күпкә өҫтөн. Үҙен яралтыусынан өҫтөн ҡуйғандарҙы юҡҡа сығара.

Аллаһ - Ул рәхим-шәфҡәт эйәһе. Аяуһыҙ һәм ҡанһыҙ түгел, фәҡәт үҙенә буйһоноуҙы талап итә. Ҡатынына яҡынлыҡ ҡылыуҙан алда мосолман ун мәртәбә "Йәә-Мүтәкәббирү" тиһә, Аллаһы Тәғәлә изге бала насип итә.

**Әл-Хаалиҡү** - бар итеүсе. Барса тереклекте һәм ғаләмде бер-береһенә оҡшаш, тиңдәш итмәйенсә бар итеүсе. Ул ғилем эйәләрен, наҙандарҙы, яҡшыларҙы, насарҙарҙы, мөслимдәрҙе, кафырҙарҙы бар иткән. Уның ҡатнашлығынан башҡа яралтылған бер кем дә, бер нәмә лә донъяла юҡ.

**Әл-Бәәрийү** - бәндәләрҙе һәйә, кеше һәр ваҡыт үҙенең яралтыусыһына ынтыла, йөҙөн бора. Уға ғына ярҙам һорап мөрәжәғәт итә. Уның ғына шәфҡәтенә мохтаж. Әгәр ҙә кеше бәләкәй баланы ошо исемдә етмеш мәртәбә әйтеп өшкөрһә, бала афәттәрҙән имен булыр.

**Әл-мусаүүирү** - бөтә нәмәләргә тәҫ, ҡиәфәт биреүсе, һәр кемгә һәм һәр нәмәгә үҙенә генә хас булған, ҡабатланмаҫ тәҫ һәм һын биреүсе. Бала тыуҙырмаған ҡатын ете көн ураҙа тотоп, ауыҙ асҡан ваҡытта һәр кис был исемде егерме бер мәртәбә әйтеп, һыуға өшкөрөп эсһә, Аллаһы Тәғәлә рәхмәте менән уға лайыҡ бала бирелер.

**Әл-Ғәффәәрү** - гонаһ-хаталарҙы ярлыҡаусы. Бәндәләрҙең донъялыҡта белеп йә белмәй эшләгән гонаһтарын донъялыҡта һәм Әхирәттә ғәфү итеүсе.

Ул - бик йәшерен. Кешеләр тарафынан күреп белергә тейешле кешеләрҙе йәшереп кенә тота. Үҙенең был исеме менән Ул ҡолдарының гонаһтарын йәшерә, йәғни ғәфү итә. "Йәә Ғәффәәрү" исемен даими ҡабатлап торған кешенең гонаһтарын ярлыҡар.

**Әл-Ҡаһһәрү** - бөтә көстәрҙән дә өҫтөн, бөтә нәмәгә көсө етә торған зат. Үҙенең ҡеүәте һәм бөйөклөгө менән бөтә нәмәне юҡ итә ала. "Йәә Ҡаһһәәрү" исемен даими ҡабатлап торһа, нәфсеһен еңеп, донъя артынан ҡыуыуға һалҡын булыр.

**Әл-Үәһһәәбү** - үҙенә бер нәмә лә һорамайынса бөтә нәмәне - һорағандарын да, һорамағандарын да үҙенең ҡолдарына биреүсе. Кешеләрҙең тормоштарын биҙәүсе һәм уларға муллыҡ булдырыусы. Был исемде даими әйтеп йөрөүсе кеше - Аллаһы Тәғәләнең ҡоло мохтажлыҡ белмәҫ.

**Әр-Раззәәҡү** - үҙе бар иткән һәр мәхлүгенә ризыҡ биреүсе. Һәр ҡолона һиҙелеп торған һәм һиҙелмәй торған ниғмәттәр - аҡыл, белем, дин, күңелдәренә иман. "Йәә Раззәәҡү" исемен даими әйтеп торған һәр бәндәнең ризығына бәрәкәт, тормошона муллыҡ килер.

УҢЫШ ҠАҘАН



# БӘХЕТКӘ УН АҘЫМ

## Уй-фекерегеҙҙе үҙгәртеүгә ике аҙым

Түбәндәге юлды уҡығыҙ ҙа, һуңынан күҙегеҙҙе йомоп, уны үҙ алдығыҙға ҡабатлағыҙ: "Көндән-көн мин бар нәмәлә лә позитив ҡарашлы була барам". Хәҙер тәрән итеп тын алығыҙ, күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ һәм ошо фразаны тағы бер тапҡыр ҡабатлағыҙ. Һеҙ әле генә үҙ аңығыҙҙы ҙур позитивлыҡ яғына ҡайтанан программалаштырыуға тәүге аҙым яһанығыҙ.

Тормош шуны раҫлай: уй-фекерегеҙ ысынбарлыҡты тыуҙырырға ярҙам итә. Икенсе дәлил: һеҙҙең уй-фекерегеҙ - программаланған компьютерҙан сыҡҡан мәғлүмәт ул. Эйе, һеҙҙең мейегеҙ - ҡеүәтле компьютер. Ул өс йөҙ миллиард нейрондан тора. Уларҙың һәр ҡайһыһы компьютер төйөнө кеүек эшләй. Аңығыҙҙы һәм тәнегеҙҙе көсһөҙләндереп, компьютерығыҙҙы һүндерәһегеҙ. Уға һүҙ аша инструкциялар биреп, программалайһығыҙ.Һеҙ ошо процессы башланығыҙ. Уның һөҙөмтәлелеген ҡырҡа арттырыу өсөн тағы ла ныҒыраҡ көсһөҙләнергә һәм аныҡ һүҙ инструкциялары бирергә кәрәк. Компьютерығыҙҙы ҡабыҙыу өсөн һеҙ тәрән көсһөҙләнеүгә булырға тейешһегеҙ. Быға ике сәбәп бар. Беренсеһе, тән көсһөҙләнмәйенсә, аң да көсһөҙләнмәй. Көсөргәнешле, үҙен уңайлы хис итмәүсе тән, "Мине онотма, мине онотма" тип, әсәһенең еңенән тартҡан балаға оҡшаш. Икенсе сәбәп: уйынға мейенең уң яҡ ярымшары ҡушылырға тейеш. Хатта ошо хаҡта уҡығанда ла уң яҡ ярымшарығыҙ эштән ҡасып, һул яғығыҙ уҡыу өсөн бөтә көсөн һала. Тәрән ял иткәндә уң яҡ ярымшар эшләй башлай һәм һулы менән бергә атлай.

Хәҙер компьютер ҡабыҙыла. Мейеләге компьютер ҡабынһын өсөн нисек тәрән итеп көсһөҙләнергә? Түбәндә тәү сиратта тәнде, һуңынан аңды көсһөҙләндереп, аҙаҡ мейе компьютерын ҡабыҙыу өсөн уның тәрәнәйеүе буйынса инструкция бирелә. Көсһөҙләндереүҙең ике ысулы бар: оҙайлы һәм ҡыҫҡа. Әгәр тормошоғоҙ ығы-зығынан тора йәки һеҙ көслө стресс йоғонтоһонда булһағыҙ, һеҙгә оҙайлы процедура кәрәк. Ә ҡайһы бер кешеләр үҙҙәренең мейе компьютерын бер нисә секундта тоҡандыра ала. Уларға ҡыҫҡа ысул да ярай. Оҙайлы ысулдың өс төрө була. Уларҙың береһе һеҙгә тап килергә тейеш.

**Көсһөҙләндереүҙең өс оҙайлы ысулы:**

- Яҡшылап ултырығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Башығыҙҙағы мускулды көсһөҙләндерегеҙ. Маңлайығыҙҙағы мускулды көсһөҙләндерегеҙ. Күҙ тирәләрендәге мускулды көсһөҙләндерегеҙ. Сикәләрегеҙҙәге, ауыҙ тирәләрегеҙҙәге, муйынығыҙҙағы, күкрәк ситлегегеҙҙәге, арҡағыҙҙағы, янбаштарығыҙҙағы, бөгәрҙәге, табанығыҙҙағы көсөргәнеште һәм аяҡ бармаҡтарын көсһөҙләндерегеҙ. Ашыҡмағыҙ. Тәнегеҙҙең һәр өлөшөн күҙ алдығыҙға килтерегеҙ. Сиратлап уларҙы ҡыбырлатығыҙ, уйығыҙҙа ғына уларҙың һәр ҡайһыһына мөрәжәғәт итеп, көсһөҙләнеүен һорағыҙ.
- Яҡшылап ултырығыҙ. Күҙҙәрегеҙҙе йомоғоҙ. Өс тапҡыр тәрән тын алып, уны йәйләп ҡына сығарығыҙ. Хәҙер йөҙҙән алып бергә тиклем кирегә һанағыҙ. Икенсеһенә күсер алдынан һәр һанды асыҡ итеп күҙ алдына килтерегеҙ.
- Яҡшылап ултырығыҙ. Күҙегеҙҙе йомоғоҙ һәм үҙегеҙҙе лифтта итеп күҙаллағыҙ. Ул бына-бына күҙғалырға тора. Был механик тауыш: "Етенсе ҡат: ҡатын-ҡыҙҙар кейеме һәм эске кейем", - тип иғлан иткән универмагтағы лифт булырға ла мөмкин. Беренсе ҡатҡа еткәс, мейе компьютерығыҙҙы программалаштырыуға әҙер булығыҙ. Йәки был шахталағы ситлек булыуы ла мөмкин - һәр йөҙ футҡа аҫҡа төшөүҙе белдергән яҙыуҙарҙы ҡарап барығыҙ. Ике мең футҡа төшкәс, программалашыуға әҙер булаҫаҡһығыҙ.

**Роберт СТОУН.**

АБАУ!

# СУСҠА ИТЕ АШАМАЙЫМ...

## тип тә ҡотолоп булмай, күрәһең



**Африка сусҡа киҙеүе яңынан-яңы территорияларға тарала. Был хәүефле вирус Ҡалмыҡ республикаһына һәм Волгоград өлкәһенә үтеп ингән. Россельхознадзорҙан белдереүҙәренсә, сусҡа киҙеүе Рәсәйҙең үҙәк райондары яғына йылына 600 км тиҙлектә яҡынлаша. Быйдай темп менән ул Башҡортостанға 2012 йылда килеп етәсәк. Әгәр ҙә нығылы кәртә ҡуйылмаһа, күпкә тиҙерәк килеп етеүе лә мөмкин.**

Вирус бик тиҙ үрсей. Һанаулы ғына көн эсендә меңәр баш йорт сусҡаһын ҡырып һаласаҡ, тиҙәр. Тимәк, сусҡасылыҡ тармағын бөтөнләй юҡҡа сығарыу көсөнә эйә. Африка киҙеүе, әлбиттә, кеше һаулығы өсөн хәүефһеҙ. Тик сусҡалар өсөн бик ҡурҡыныс - сирҙең 98-100 проценты үлем менән тамамлана. Ғалимдар тарафынан сусҡа киҙеүенә ҡаршы тороp дарыу әлегә табылмаған. Вакцина юҡ. Бары тик һаҡланыу саралары ғына ярҙам итәсәк.

БР Ауыл хужалығы министры Азат Йыһаншин республика территорияһында Африка киҙеүе таралыуын иҫкәртеү буйынса Ведомство-ара комиссия ултырышы үткәрҙе. Һөйләшеүгә профилле министрлыҡтар вәкилдәре һәм сусҡасылыҡ менән шөғөлләнеүсе эре хужалыҡтар етәкселәре саҡырылғайны. "Ҡурҡыныс бар, проблемаға ҡараш та етди булырға тейеш", - тип борсолоуын белдерҙе ауыл хужалығы министры.

БР Ветеринария идаралығы начальнигы Вәкил Буранбаев Африка киҙеүенең таралыу юлдары тураһында иҫкәртте. Иң төп хәүефте автотранспорт бәйләнеше тыуҙыра. Федераль трассалар буйынса Башҡортостанға төрлө региондарҙан, шул иҫәптән эпизоотик хәл киҫкен торған яҡтарҙан да малдар килтерелә. Махсус постар ҡуйып, йөктәргә дөйөм контроль ойоштороруға кәрәк. Әлегә сусҡалар һәм башҡа малдар ситтән бер ниндәй тикшереүһеҙ ҡабул ителә.

Вирусты шулай уҡ ҡырағай сусҡалар - ҡабандар таратырға мөмкин. Бигерәк тә һуңғы йылдарҙа уларҙың һаны ҡырҡа артыуы күҙәтелә. Мәғлүмәттәрҙән күренеүенсә, 1978 йылға тиклем беҙҙең регионда был йәнлектәр бөтөнләй булмаған. Яңы ерҙәргә күсеү менән популяция йылдан-йыл арта бара. Ҡышҡы маршрут иҫәпләүҙәре буйынса, 2007 йылда республикала биш мең тирәһе ҡабан сусҡаһы булған. 2009 йылға ҡарай уларҙың һаны ике тапҡырға артҡан. Бөгөнгө көндә Башҡортостан урмандарында 11 мең тирәһе ҡабан сусҡаһы йәшәй. Был яҡшы тенденция, әммә был беҙгә ҡурҡыныс менән янай. Һөйләшеү барышында шул билдәле булды: республикала Африка киҙеүенә ҡаршы көрәш буйынса аныҡ ҡына пландар ҙа, ведомство-ара килешеүҙәр ҙә юҡ.

Африка сусҡа киҙеүе таралыуҙың өсөнсө юлы - баҙар. Бында ла туҡтауһыҙ контроль кәрәк.

Көс структураларының, ветеринария, күҙәтеү һәм башҡа органдарҙың килешеп эшләүе генә ҡурҡыныс вирусты кире ҡағырға мөмкинлек бирәсәген Азат Йыһаншин һыҙыҡ өҫтөнә алды. Сусҡасылыҡ тармағында эшләүселәргә лә һиҙгерлекте юғалтырға ярамай.

**Эльвира ЛАТИПОВА.**
**"Башинформ".**

Ah-Ah!

# ТУРБАСЛЫ ТАУЫҠТАРЫ...

## Буш боттарынан шәберәк!

**Ошо арала Рәсәйгә "Буш боттары" "оса" башлаясаҡ. Буш тиһәң дә, бушлай түгел инде улар. Һәр нәмә өсөн түләргә кәрәк. Ватан етештереүсеһенә ярҙам итергә кәрәк, тип ураған һайын һөйләйбеҙ ҙә, ғәмәлдә, океан аръяғындағы етештереүсегә ярҙам ҡулы һуҙабыҙ, уға түләйбеҙ. Әйтерһең дә үҙебеҙҙә тауыҡтар юҡ та, үҙебеҙҙә гормондар ашатып, уларҙы тиҙ арала үҫтереү мөмкин түгел.**

Статистика күрһәтеүенсә, "Буш боттары"нда ғына Америка компаниялары йылына 750 миллион доллар самаһы килем ала икән. Ә улар ни сәбәпле беҙҙең яҡҡа "осмай" башлағайны, беләһегеҙме? "Канаттары" ҡырҡылғайны, йәғни йыл башында хлор менән эшкәртелгән ҡош итен индереүҙе тыйған санитар ҡағиҙәләр көсөнә ингәйне. Һөҙөмтәлә, АҠШ-тан килтерелгән тауыҡ боттарының барыһына ла тыйыу һалынды.

Хәҙер океан аръяғындағы беҙҙә ҡош ите менән тәьмин итеүселәр Рәсәй талаптарын үтәргә тырыша икән. Йылына миллиард самаһы аҡса кеҫәгә инеп ятһа, тырышаһың инде. Әммә эксперттар, Америка яғы 2006 йылдың 19 ноябрендә Ханойҙа ҡул ҡуйылған, Америка предприятиелары инспекциялау һәм сертификациялау тураһындағы килешеү шарттарында ҡаралған бурыстарын үтәүҙе даими боҙа, тип белдерә бит әле.

Ә Рәсәй халҡы бынан зыян ғына күрә. Беренсенән, ил кеҫәһенән аҡса ситкә китә. Икенсенән, халыҡтың һаулығына хәүеф янай. Сөнки "Буш боттары"нда гормондар һәм антибиотиктар күп. Медицина белгестәре билдәләүенсә, әгәр балаларға бер йәш тулғанға тиклем антибиотик бирһәң, ул ғүмеренең ахырынаса инвалид. Ә организмға бер әләккән антибиотикты сығарыу өсөн 20 йыл ваҡыт кәрәк. Шулай итеп, беҙ "Буш боттары" өсөн һумдар-тиндәребеҙҙе генә түгел, ә иң ҡәҙерле булған һаулығыбыҙ менән түләйбеҙ.

Әҙерләүе тиҙ, әммә сифаты шик тыуҙырған ит, шулай итеп, Рәсәйҙә тағы сауҙаға сығарыласаҡ. Был хаҡта Роспотребнадзор башлығы Геннадий Онищенко: "Әгәр һеҙ Америка тауыҡтарын яратаһығыҙ икән, тиҙҙән улар сауҙаға сығасаҡ. Әммә Рәсәй "боттары" яҡшыраҡ. Уларҙа гормондар һәм антибиотиктар әҙерәк. Үҙебеҙҙең "боттарҙы" ашағыҙ!", - тип белдерҙе.

Федерация Советының аграр-азыҡ-түлек буйынса сәйәсәт комитеты рәйесенең беренсе урынбаҫары, "Моссельпром" холдингына нигеҙ һалыусы Сергей Лисовский:

- Американан ҡош итен индереү мәсьәләһенә сәйәсәт ҡыҫыла. Онищенкоға баҫым яһайҙар, - тип иҫәпләй. - Америка ҡош итен индереп, беҙ үҙ етештереүселәребеҙҙең кеҫәһенә һуғабыҙ...

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Быйыл ҡоролоҡ һөҙөмтәһендә республикабыҙҙа ҡайһы бер райондарҙа малдарҙы һуҡыр тингә генә һатып ебәреү осраҡтары булыу асыҡланды. Ә Рәсәй буйынса быйдай төбәктәр күпме! Үҙебеҙҙең экологик таҙа иттәрҙе бушҡа осорабыҙ ҙа, әйҙә, рәхәтләнеп "Буш боттары"н һатып алып ашайбыҙ буламы? Парадокс! Ә шулай ҙа Геннадий Онищенконың кәңәшен тоторға кәрәктер ул...**

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# КОТЛАЙБЫҘ!

Август айында тыуған көндәрен билдәләүсе уҡыусыларыбыҙҙы - **Ейәнсура районы** Кесе Муйнаҡ ауылынан Камил Аҡбашевты, Абзан ауылынан Әбделмән Ишмөхәмәтовты, **Учалы районы** Ҡунаҡбай ауылынан Зәкирә Шәкированы, **Мәсетле районы** Яуыш ауылынан Нурия Сөләймәнованы, Олотамаҡ ауылынан Нәсимә Бәҙретдинованы, **Миәкә районы** Боғҙан ауылынан Мәүсилә Хәбированы, **Күгәрсен районы** Аҙнағол ауылынан Баязит Билаловты, Мораҡ ауылынан А. Сәйетҡоловты, **Сибай ҡалаһынан** Миңлегөл Ғәзизованы, Уралиә Хәсәнованы, Гөлнәзирә Игликованы, **Хәйбулла районы** Аҡъяр ауылынан Ғилминур Күскилдинаны, **Йәнтеш ауылынан** Зилиә Исҡужинаны, **Өфө ҡалаһынан** Райхана Файласупованы, **Баймаҡ районы** Йомаш ауылынан Хәлиҙә Биктимерованы, Йәрмөхәмәт ауылынан Бәлхиә Ишҡыуатованы, Һиҙиәтулла Мөьминовты, Гөлшат Мөьминованы, Ҡаратал ауылынан Иршат Рәхимовты, **Учалы ҡалаһынан** Зинфира Зиннурованы, **Әлшәй районы** Ҡыпсаҡ-Асҡар ауылынан Ғәлиә Садыҡованы, **Өфө районы** Алексеевка ауылынан Илүсә Ниғмәтуллинаны, **Бөрйән районы** Иҫке Монасип ауылынан Әнүзә Ғиззәтуллинаны, **Мәләүез районы** Ҡотош ауылынан Шәкирйән Вәхитовты, Шәрип ауылынан Самат Йыһаншинды, **Ишембай ҡалаһынан** Рәмзиә Шәрипованы, **Көйөргәҙе районы** Ялсыҡай ауылынан Зифа Әлибаеваны, Яҡшымбәт ауылынан Фәриҙә Бикмаеваны, **Әбйәлил районы** Туйыш ауылынан Айгүзәл Миңлебаеваны, **Ғафури районы** Яугилде ауылынан Лира Ғәлиәхмәтованы, Яңғыҙҡайын ауылынан Рәйсә Сабитованы, Красноусол ҡасабаһынан Хаммат Фәтҡузамановты, Сәйетбаба ауылынан Ғиндулла Шәйәхмәтовты, **Ишембай районы** Әхмәр ауылынан Сара Ғәзизованы, **Стәрлетамаҡ ҡалаһынан** Лилиана Хөсәйенованы, Арыҫлан Хөсәйеновты, **Федоровка районы** Балыҡлыбаш ауылынан Гөлкәй Исмәғилеваны, **Ауырғазы районы** Рәүиә Барҙыбаеваны ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ!

Көн һайын бәләкәй генә булһа ла уңыштарға өлгәшеп, еңеүҙәр яулап, Хоҙай Тәғәлә мәрхәмәттәренә өлгәшеп, Уңыш һәм Бәхет ғәли йәнәптәре менән ҡулға-ҡул тотоношоп йәшәргә яҙһын!

**Изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

* * *

17-се бер мандатлы һайлау округы буйынса икенсе саҡырылыш БР Өфө ҡала округы Советына өҫтәмә һайлауҙарҙа ҡатнашыусы депутатлыҡҡа кандидаттарҙың агитацион материалдарын баҫтырыу өсөн "Киске Өфө" гәзитендә бушлай баҫма майҙан биреү графигы:

**4 сентябрь 2010**
1. Хачко Евгений Юрьевич

**11 сентябрь 2010**
2. Германов Владислав Витальевич

**18 сентябрь 2010**
3. Фәхретдинов Илдар Рәфҡәтович

**25 сентябрь 2010**
4. Герасимов Данила Андреевич

**Өфө ҡала округының Киров районы территориаль һайлау комиссияһы**

* * *

17-се бер мандатлы һайлау округы буйынса икенсе саҡырылыш БР Өфө ҡала округы Советына өҫтәмә һайлауҙарҙа ҡатнашыусы һайланыусы берекмәләрҙең агитацион материалдарын баҫтырыу өсөн "Киске Өфө" гәзитендә бушлай баҫма майҙан биреү графигы:

**11 сентябрь 2010**
1. "БЕРҘӘМ РӘСӘЙ" Бөтә Рәсәй сәйәси фирҡәһенең Башҡортостан төбәк бүлеге

**18 сентябрь 2010**
2. КПРФ сәйәси фирҡәһенең Башҡортостан төбәк бүлеге

**25 сентябрь 2010**
3. ҒӘҘЕЛ РӘСӘЙ сәйәси фирҡәһенең Башҡортостандағы төбәк бүлеге

**Өфө ҡала округының Киров районы территориаль һайлау комиссияһы**

## ӘСӘЙЕМ ЛӨҒӘТЕ

# "КИСКЕ ӨФӨ" БАШЛАП ЕБӘРҘЕ,

## ә беҙ дауам итәйек

**Мин Баймаҡ районы Йомаш урта мәктәбенең XI синыф уҡыусыһы булам. Бәләкәй саҡтан күберәк өләсәйем менән аралашам, уның һөйләгән әкиәттәрен яратып тыңлайым. Ул миңә үҙенең алыҫ һуғыш йылдарында ҡалған бала сағы тураһында ла һөйләй. Бына шулай көндәлек аралашҡанда мин уның телмәрендә йыш ҡына башҡалар телмәрендә булмаған, беҙ ҡулланған һүҙлектәрҙә лә урын алмаған һүҙбәйләнештәр ишетәм. Ҡайһыларын тиҙ генә төшөнәм, ҡайһыларын өләсәйем үҙе аңлата.**

Өләсәйем телмәрендәге лөғәттәргә мин башта иғтибар итмәгәйнем, үҫә төшкәс, ул лөғәттәрҙе башҡалар ауыҙынан да ишетә башланым. Тик был лөғәттәрҙе үҙебеҙ уҡыған әҙәби китаптарҙа осратырмын тимә. Тел ғилеменә ошо һүҙбәйләнештәрҙе өйрәнеү, уларҙың аңлатмаларын төҙөү, һүҙлек итеп сығарыу актуаль темалыр, тип иҫәпләйем. Сөнки улар башҡорт теле байлығының бер өлгөһө бит. Бына, мәҫәлән, бер нисә лөғәтте һәм уларға аңлатманы яҙып үтәм.

**"Кейәнке"** тип еңел-елпе кәйеф менән йәшәүсе, эш һөймәүсе һәм ҡырағайыраҡ холоҡло кешегә әйтәләр. Ахыры, был һүҙҙең тамырында "кейек"мәғәнәһе ята. Ә "кейек" тип ҡулға өйрәтелмәгән ҡыр йәнлеген атайҙар.

**"Ҡулға өйрәтелмәгән"**, тимәк, беҙҙеңсә йәшәмәй һәм эшләмәй мәғәнәһендә. Мәҫәлән, өләсәйем телмәренән: "Ана, теге Маликтың кейәнкеһе атаһынан аҡса таптыра ти бит", йәки: "Ах-ти, кейәнкеләр, ҡайҙа йөрөйһөгөҙ ҡушҡан эште эшләмәй" һ.б.

**"Һоғо теймәһен"**. Баштараҡ был лөғәтте минең сәсемә ҡарап әйтә торғайны өләсәйем: "Сәсеңә ҡыҙыл таҫма үреп йөрө. Юғиһә, әҙәмдең һоғо тейер", - ти ине. Ҡустым ҡунаҡтан ҡайтып илаһа: "Әҙәмдең һоғо тейгәндер, ҡана өшкөрәйем" - тип, өшкөрөп тынысландыра һала. Әсәйемдең икмәге уңмай бешһә: "Әҙәмдең һоғо тейгәндер, табағыңдың төбөн туҡмап ал", - ти. Йәш баланы йәки бәләкәй балаларҙы ҡунаҡҡа алып йөрөргә лә ҡушмай. "Әҙәмдең һоғо тейә, йөрөтмәгеҙ", - ти. "Һоғо теймәһен", тимәк, күҙ теймәһен, тигәнде аңлата. "Һоғо" тигәне, бәлки, "һоҡланыу" һүҙенән алынғандыр. Ни өсөн тигәндә, беҙ бит нимәгәлер һоҡланһаҡ, "Һо-һо!", "О-һо!"тип әйтәбеҙ.

**"Буҫтама"**. Мин һыуыҡ тейҙереп ауырыһам, өләсәйем минең түшемә, арҡама буҫтама һалдырта. Тамаҡ шешкәндә, һыуыҡ тейгәндә, ҡатыу ҡалҡҡанда түшкә, арҡаға йомшаҡ йылы сепрәкте спирт, ҡайнар һыу, малдың иретелгән эс майы менән еүешләп ябалар, йәки хәҙергесә әйткәндә, компресс һалалар. Бөгөн дә ауылдың оло инәйҙәре компресс һалыуҙы буҫтама һалыу тип атай. Моғайын, был буҫтау һүҙенән килеп сыҡҡандыр, тип уйлайым.

**"Ҡырағаһы юҡ"**, **"ҡырағаһы булманы"**. Был лөғәтте өләсәйем күберәк үҙенең үткән тормошона байҡау яһағанда, үҙенең бала саҡ хәтирәләрен иҫкә алғанда телгә алырға ярата. "Үгәй булһа ла инәйемдең беҙгә ҡырағаһы булманы, һәр ваҡыт яҡты йөҙ, яҡты сырай күрһәтте". "Морат еҙнәмдең ҡырағаһы юҡ уның, барып инеү менән ней алып, ней биререн белмәй өтәләнә". "Ҡырағаһы юҡ", тимәк, ҡырағай һүҙенән килеп сыҡҡандыр, тип уйлайым. "Ҡырағаһы юҡ" - тимәк, ҡырағай түгел, үҙ кеше. Был лөғәт үҙ-ара йылы мөнәсәбәттә, кешеләргә яҡты йөҙ, яҡты сырай өләшеүселәргә ҡарата әйтеләләр.

**"Издиһат һалыу"**, **"издиһат итеү"**. "Әле был эшкә мин издиһат һалғаным юҡ. Издиһатымды һалһам, ҡуймаҫ инем инде", - ти өләсәйем ниндәйҙер эшләнәһе эшен еренә еткерә алмай йөрөгәндә. Тимәк, издиһат һалыу - күңел һалыу, күңел биреү була, тип иҫбатлайым.

**"Ирдауай"**. Был һүҙ ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата әйтелә. "Шәмсиә килен ирдауай бит инде ул, емереп ашай ҙа, емереп эшләй. Наҙланып тормай", - ти өләсәйем. Ирдауай эшкә тилбер, ир-ат кеүек көслө, күберәк ир-ат эшен эшләргә ятраҡан ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарата әйтелә, тип аңлайым.

**Лиза ЮНЫСБАЕВА.**
**(Дауамы бар).**

## КӨЛКӨФӨ



# ТӨРЛӨ МӘЛДӘР БУЛА...

**Донъя, төрлө мәлдәр шатлығы малайҙың, бесәйҙең, хатта эттең телен асҡан, имеш... Һеҙҙән дә, хөрмәтле уҡыусыларыбыҙ, төрлө ҡыҙыҡлы рәсемдәр, фотолар көтәбеҙ. Улар аҫтына тапҡыр, көлкөлө һүҙҙәр, шиғырҙар яҙылһа, бигерәк тә шәп буласаҡ. Унан инде, тора-бара шундай рәсем-фотоларға "Тапҡырҙар турниры" ойошторорға мөмкин буласаҡ. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ был фекер тураһында?**



Ниндәй рәхәт ағас баштарында
Ултырыуҙар, хатта йоҡлауҙар!
Ниңә икән, ҡошҡа ҡуйған кеүек
Бесәйҙәргә оя ҡуймайҙар!



Йә еүешләп, йә туктауһыҙ буяп,
Йөрөй инем өйҙә һәр ерҙе,
Әсәй миңә, бер балала булмаҫ,
Ҡабаҡ ыштан яһап кейҙерҙе.



Мин хужамдың азат эте:
Ашайым да кикерәм.
Тамаҡ туйғас, шатлығымдан
Күккә тиклем һикерәм!

### ИҒЛАН

Халыҡ-ара кимәлдәге **(Cambridge, ICELT)** тәжрибәле уҡытыусы, РФ дөйөм белем биреү алдынғыһы, инглиз теле уҡытыусыларының Рәсәй-Америка конкурсы **(TEA, 2001)** еңеүсеһе **инглиз телен** өйрәнергә теләүселәрҙән төркөм (6-9 кеше) йыя. Дәрестәр автор программалары буйынса үткәрелә.
**Тел.: 8-917-43-47-270, 256-98-04.**

## АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ОНОТОЛОУҒА ДУСАР ИТЕЛГӘНСЕ...

## тәнҡиткә дусар бул

Күңел тыныслығы теләйһең икән, телеңде тый.

**(Латин мәҡәле).**

Тыуым һәм үлемдән бер ниндәй дауа ла юҡ, шуға ла ошо ике арауыҡ араһында йәшәп ҡал.

**(Сантаяна).**

Белем яҡшы кешене яҡшыраҡ, насар кешене насарыраҡ итә.

**(Томас Фуллер).**

Кем үҙе теләгәндән аҙыраҡҡа эйә, тип иҫәпләй, шул үҙе лайыҡлы булғандан күберәккә эйә икәнен белергә тейеш.

**(Георг Лихтенберг).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Малайҙар көтөү көткән бер яланда ағыулы йылан йәшәгән. Бер саҡ был ялан аша бер дәрүиш үтеп бара, ти. Малайҙар уның янына йүгереп килгән һәм:"Әй, изге ҡарт, был тирәнән һаҡ ҡына үт, ағыулы йыланға барып эләкмә", - тип иҫкәртеп ҡысҡырған. "Мине ул йылан бер ни ҙә эшләтә алмай, балалар, - тигән ҡарт дәрүиш. - Мин яуызлыҡтан һаҡлана торған доғалар беләм..." Шулай тигән дә, дәрүиш юлын дауам иткән. Йылан уның ҡаршыһына сығып, башын күтәргән генә икән, дәрүиш уға ниндәйҙер доға уҡып өргән һәм йылан бөгәрләнеп ҡарттың аяҡ аҫтына йығылған. "Ниңә һин кешеләргә яуызлыҡ ҡылаһың? - тип һораған йыландан дәрүиш. - Мин һиңә Хоҙайҙың изге исемен атайым, һин уны минең артымса ҡабатла һәм Алланы яратырға өйрән, шул саҡта яуызлыҡ эшләү теләгенән һүрелерһең..." Ошо ваҡиғанан һуң бер нисә көн үткән. Баяғы көтөүсе малайҙар йыландың кешеләргә ташланмай башлауын, йыуашланып ҡалыуын шәйләп ҡала һәм уны таш менән бәргеләргә тотона. Малайҙарҙың береһе йыланды ҡойроғонан тотоп, баш осонда өйөрөлтөп, таш араһына атып бәрә хатта. Шунан улар, үлгәндер, тип уйлап, йыланды ҡалдырып китә. Йылан ысынлап та үлем хәлендә була, күп ҡан юғалта. Иҫенә килгәс, өңөнә төшөп ята, япраҡтар, ҡороған үләндәр менән туҡлана.**

**Бер саҡ был тирәнән тағы ла баяғы дәрүиш уҙып бара. Ул тирә-яғын байҡап, йыланды эҙләй. Малайҙар уға, йылан үлде, тигән хәбәр еткерә, әммә дәрүиш уның тере икәнен белә, сөнки йылан дәрүиш өйрәткән доға аша Алланы һөйөргә өйрәнмәйенсә тороп, был донъяны ҡалдыра алмай.Шул саҡ йылан өңөнән сыға һәм дәрүишкә үҙе менән ни булғанын һөйләй. Дәрүиш ҡысҡырып ебәрә хатта һәм асыуланып шулай ти:"Ниндәй ахмаҡлыҡ! Үҙ дошмандарыңдан нисек һаҡланырға белмәү өсөн ысынлап та алйот булырға кәрәк. Мин бит һиңә кешеләргә ташланма һәм ағыуыңды сығарма, ғына тинем. Ниңә һин уларҙы ҡурҡытыу өсөн ыҫылдау ҡоралыңды эшкә екмәнең?.."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

**Баш мөхәррир:**
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

**Беҙҙең адрес:**
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| Баш мөхәррир | 253-25-44 |
| Баш мөхәррир урынбаҫары | 246-03-24 |
| Бухгалтерия | 246-03-23 |
| Хәбәрселәр | 252-39-99 |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – 50665, 50673

Тиражы - 6035
Заказ 3407